ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

18-24 сентябрь (һарысай) 2026

№37 (1232)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Иғтибар! "Киске Өфө" (индексы ПР905) гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 2027 йылдың беренсе яртыһы өсөн 1 сентябрҙән 1230 һум 42 тингә яҙыла башларға саҡырабыҙ. Ә беҙ һеҙҙе рухиәт менән һуғарыуҙы дауам итербеҙ, матур йөкмәткеле менән танһыҡтарығыҙҙы ҡандырырға тырышырбыҙ, тигән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласаҡ икәне тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йәмғиәт "Атайсал"да берләшә




2

Беҙҙең заман



7

Остаздарым юлынан барам…



8-9

Прототип, йәғни бер фото-рәсем уятҡан уйҙар



10-11

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

КИҘЕҮҘӘН ҺАҠЛАНАЙЫҠ!

Рәсәйҙә гриптҡа ҡаршы прививка яһау кампанияһы башланды.



Роспотребнадзор етәксеһе Анна Попова хәбәр итеүенсә, төбәктәр препараттар менән тәьмин ителгән. Был миҙгелдә ил халҡының 60 проценты һәм хәүеф төркөмдәренә ҡараған граждандарҙың кәмендә 75 процентына прививка эшләү планлаштырыла. Быйыл гриптан һаҡланыу саралары тулыһынса яңыртылған. Вакциналар яңы төрҙәргә: А вирусының ике ("Миссури" һәм "Дарвин") һәм В вирусының бер төрөнә ("Токио") ҡаршы торорға һәләтле. Эпидемия ваҡытында сирләмәҫ өсөн табиптар вакцинаны октябрь аҙағына тиклем яһатырға кәңәш бирә. Прививканан һуң иммунитет 8-12 ай һаҡлана.

ТАШЛАМА БИРЕЛӘ



Республикала мәктәп уҡыусыларына һәм студенттарға электричкала йөрөү өсөн ҙур ташлама бирелә.

1 сентябрҙән Башҡортостанда ҡала яны поездарына билеттарға йәнә 50 процент ташлама ғәмәлгә индерелә. Льгота менән 7 йәше тулған уҡыусылар, юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарында көндөҙгө бүлектә уҡыған студенттар файҙалана ала. Билет һатып алғанда мәктәптән белешмә (һәр уҡыу йылында яңыртыла) һәм студент билетын күрһәтергә кәрәк. Әгәр документ "Рәсәй тимер юлдары" ҡушымтаһы аша һатып алынһа, льготалы профилде теркәү зарур. Ташламалы билетты теркәлгәндән һуң бер тәүлек үткәс һатып алырға мөмкин. Льгота уҡыу йылы башланғандан алып 15 июнгә тиклем ғәмәлдә ҡала. Ә йылы миҙгелдә (1 апрелдән 31 октябргә тиклем) пенсионерҙар һәм льготалылар электричкала ярты хаҡҡа йөрөй.

АФАРИН!



ТУҒАН ТЕЛЕБЕҘ ҘӘ ЕҢДЕ!

Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының 3-сө "Шатлыҡ" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Альбина Шәрипованы тәбрикләне. Уға "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирелде.

Хәбәр ителеүенсә, күптән түгел Липецк ҡалаһында V "Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй профессиональ конкурсы үткәйне. Иң-иңдәр исеменә Рәсәйҙең 87 төбәгенән 85 уҡытыусы һәм 46 тәрбиәсе дәғүә итте. Башҡортостандан конкурста ике дәғүәсе - Өфө ҡалаһының Анатолий Хохлов исемендәге 10-сы мәғариф үҙәгенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Ләйсән Хәсәнова һәм Хәйбулла районынан "Шатлыҡ" балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Альбина Шәрипова ҡатнашты. Конкурсты ябыу тантанаһында Рәсәйҙең мәғариф министры Сергей Кравцов һәм Рособрнадзор етәксеһе Анзор Музаев еңеүселәрҙең исемдәрен иғлан итте. Альбина Шәрипова мәктәпкәсә белем биреү ойошмалары уҡытыусылары араһында иң яҡшыһы тип билдәләнде.

Әйткәндәй, оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров балалар баҡсаларының белем биреү программаһына туған телдәрҙе өйрәнеүҙе индерергә ниәтләүҙәре хаҡында хәбәр итте. Башҡортостан Башлығы билдәләүенсә, мәсьәлә ошо көндәрҙә үткән туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары менән осрашыуҙа күтәрелгән. Был мәсьәләне хәл итеүҙе ул Хөкүмәт Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаевҡа йөкмәтте

СПОРТТА ЛА ҺЫНАТМАЙҘАР!



Екатеринбургта ил кимәлендә "Рус баҡыр компанияһы" призына профессиональ бокс ярышының финалы үтте. Төп алышта башҡорт боксеры Вилдан Минасов Владикавказдан Тигран Согоян менән осрашты.

10 раундтан торған алышта еңеү өсөн ике абруйлы титул вәғәҙә ителде: турнир еңеүсеһе исеме һәм Бөтә донъя бокс ассоциацияһының алтын билбауы. 29 йәшлек Вилдан Минасов финалға тиклем Үзбәкстандың ике боксерын нокаутҡа ебәрҙе. Минасовтың сағыу еңеүҙәренән һуң Рәсәйҙең күп бокс белгестәре уны "башҡорт һәм Мейәс мексиканы" тип атаны.

Финал ярышын Минасов үҙенең ғәҙәттәгесә стилендә башланы: юғары тиҙлек һәм бер туҡтауһыҙ һөжүм. Алыш бөтә ун раунд дауам итте, һөҙөмтәлә судьялар бер тауыштан Минасовты еңеүсе тип иғлан итте. Был еңеү башҡорт боксерына WBA (Бөтә донъя бокс ассоциацияһы) рейтингының тәүге 15 боксеры иҫәбенә инергә мөмкинлек бирҙе.

Вилдан сығышы менән Учалы районының Ҡорама ауылынан булһа, бөгөн Мейәс ҡалаһында йәшәй һәм "Олимп" бокс залында шөғөлләнә. Ул 2018 йылдан профессиональ рингта сығыш яһай. Уның иҫәбендә 17 алыш, 16 еңеү, шуларҙың 10-ын нокаут менән еңгән.

12+

✓ *Башҡортостандың һәр мөйөшөндә "бәләкәй генә изге эштәр шишмәләре" ағып сығырға тейеш ине. Әммә ағымдар шул тиклем көслө булып сыҡты, улар ҙур океанға әүерелде. "Атайсал" беҙҙең уртаҡ берҙәмлектең сағылышы.*

ҠЫСҠАСА

БАЛАЛАР - АЙЫРЫМ КӨНДӘ

Башҡортостандың балалар поликлиникаларында күп балалы ғаиләләр өсөн план буйынса медицина тикшереүенең уңайлы системаһы индерелде (ул "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла). Поликлиникала күп балалылар өсөн махсус көн бүленә һәм табиптарҙың айырым эш графигы булдырыла. Был ата-әсәгә бер нисә балаһын бер үк ваҡытҡа диспансеризацияға яҙҙырыу мөмкинлеген бирә. Яңы алым ата-әсәгә мәсьәләне күпкә еңеләйтә. Табип бер баланы тикшергән арала өлкәндәр кеселәренә күҙ-ҡолаҡ була ала. Хәҙер табипҡа һәр баланы айырым алып барырға кәрәкмәй - был ваҡыт һәм көстө һаҡсыл тотонорға ярҙам итә. Медицина тикшереүе схемаһы элеккесә ҡала. Башта балалар тармаҡ белгестәрендә тикшереү үтә, һуңынан участка педиатрынан йомғаҡлау һығымтаһын ала. План буйынса медицина тикшереүенә яҙылыр өсөн үҙ поликлиникағыҙҙың теркәү бүлегенә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, яңы форматтан ишле ғаиләлә үҫкән 101 меңдән ашыу бала файҙалана аласаҡ.

✓ **РФ Хөкүмәтенән Башҡортостанға ауыл табиптарына түләүҙәр өсөн 17,4 миллион һум аҡса бүленә. Рәсәй Хөкүмәте рәйесе Михаил Мишустин табиптарға бер тапҡыр бирелә торған компенсацияларҙы өҫтәмә финанслау тураһында тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.** Аҡса "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" программалары сиктәрендә түләнәсәк. Ил Президенты Владимир Путин ҡушыуы буйынса ике программа ла 2030 йылға тиклем оҙайтылды. Урта звено табиптары һәм белгестәре белем кимәленә, эшләгән районына ҡарап 500 меңдән 2 миллион һумға тиклем аҡса алырға мөмкин. Хәтерегеҙгә төшөрөбөҙ, Башҡортостанда "Ауыл табибы" һәм "Ауыл фельдшеры" программаларын бойомға ашырыу һөҙөмтәһендә 338 табип дәүләт ярҙамы алды. 2026 йылда был программалар буйынса 126 медицина хеҙмәткәренә аҡса түләнергә тейеш.

✓ **Рәсәй Хөкүмәте ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә зыян күреүселәргә түләүҙәр күләмен арттырҙы.** Министрҙар кабинетының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә һәм терактларҙа зыян күргән граждандарға финанс ярҙамы күләме 1,5 тапҡырға арттырыла. Артабан ул йыл һайын индексациялана. Ҡарар Президент ҡушыуы буйынса ҡабул ителде. Граждандарға бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам 10 меңдән 15 мең һумға тиклем арта. Беренсел кәрәк-яраҡты өлөшләтә юғалтҡанда ярҙам 50 меңдән 75 мең һумға тиклем арттырыла. Тулыһынса юғалтҡан осраҡта иһә 100 меңдән 150 мең һумға тиклем. Ғәҙәттән тыш хәл йәки теракт һөҙөмтәһендә һаулығына зыян килгән кешеләргә, шулай уҡ һәләк булғандарҙың ғаилә ағзаларына бер тапҡыр бирелә торған пособиелар индексациялана. Һәләк булғандарҙың туғандарына түләүҙәр 1 миллиондан 1,5 миллион һумғаса арта. Һаулыҡҡа уртаса йәки ауыр зыян килгән осраҡта түләүҙәр 400 меңдән 600 мең һумға тиклем арттырыла. Сәләмәтлеккә еңелсә зыян килһә, сумма 200 меңдән 300 мең һумғаса еткерелә.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

ЙӘМҒИӘТ "АТАЙСАЛ"ДА БЕРЛӘШӘ

Бына биш йыл инде республикала "Атайсал" проекты бойомға ашырыла, ул йәмәғәтселеккә тыуған төйәкте ярата белеүебеҙҙе һәм уның хаҡында хәстәрлек күрә алыуыбыҙҙы бик күп миҫалдарҙа иҫбат итте.



Көҙ көнө, проекттың әүҙем фазаһы тамамланғас, бөтә активистарҙы изге эштәре өсөн рәхмәт белдереү һәм республикала тормошто тағы ла яҡшыраҡ итеү юлдары тураһында бергәләп фекер алышыу өсөн ҙур форумға йыйыу йолаһы бар. Үткән аҙнала Өфөлә 5-се тапҡыр үткәрелде "Атайсал" проектының "Ватан көсө" форумы. Күләмле сараға меңдән ашыу ҡатнашыусы: меценаттар, ирекмәндәр, Махсус хәрби операция геройҙары, әүҙем йәштәр һәм Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә йәшәгән яҡташтарыбыҙ йыйылды. Программала пленар дискуссиялар, биҙәү-ҡулланма сәнғәте күргәҙмәләре, милли кейем көнө уңайынан этномода күрһәтеү, асыҡ лекциялар һәм түңәрәк өҫтәлдәр планлаштырылғайны. Эш һигеҙ тематик майҙансыҡта ойоштороло. Ҡатнашыусылар яҡташлыҡты нығытыу, МХО-ла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү, мәҙәни кодты һәм туған телде һаҡлау, шулай уҡ урындағы башланғыстарҙы һәм йәштәр потенциалын үҫтереү мәсьәләләрен тикшерҙе. Был темалар йәмғиәтте республиканың дөйөм киләсәге өсөн берләштереүгә йүнәлтелгән дә инде.

Билдәләнеүенсә, "Атайсал" проекты 2021 йылдан Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров башланғысы буйынса тормошҡа ашырыла. Проекттың маҡсаты ябай: республикала һәм унан ситтә йәшәгән һәр кем тыуған төйәгенә ярҙам итә ала. Мәҫәлән, шишмәне, паркты төҙөкләндереү, обелиск ҡуйыу, сиркәү йәки мәсет төҙөү, һәләтле уҡыусылар өсөн премия булдырыу. Бер һүҙ менән әйткәндә, Башҡортостандың һәр мөйөшөндә "бәләкәй генә изге эштәр шишмәләре" ағып сығырға тейеш ине. Әммә ағымдар шул тиклем көслө булып сыҡты, улар ҙур океанға әүерелде. "Атайсал" беҙҙең уртаҡ берҙәмлектең сағылышына әйләнде.

Проектты башлап ебәргәндән алып ҡатнашыусылар дөйөм суммаһы 2 миллиард һумдан ашыу тәшкил иткән 40 меңдән ашыу башланғысты тормошҡа ашырған. Әле проектта ҡатнашыусылар 8 меңдән ашыу. МХО яугирҙарына ярҙам буйынса 6 меңгә яҡын проект; социаль объекттарға ярҙам күрһәтеү буйынса 5 меңдән ашыу проект ғәмәлгә ашырылған; 1,3 меңдән ашыу балалар һәм спорт майҙансыҡтары йыһазландырылған; 500-ҙән ашыу мәсет һәм сиркәү төҙөлгән һәм ремонтланған; меңгә яҡын зыярат, 2 меңдән күберәк һәйкәл һәм обелиск тәртипкә килтерелгән; 1 меңдән ашыу шишмә төҙөкләндерелгән; 16 меңдән күберәк мөһим саралар үткәрелгән.

Махсус хәрби операция башланыу менән яугирҙарға ярҙам "Атайсал"дың төп йүнәлештәренең береһенә әүерелде. Меценаттар һәм ирекмәндәр был йүнәлештә 5,5 меңдән ашыу проектты тормошҡа ашырған. Мәҫәлән, Баймаҡ эшҡыуары Руслан Сәғәҙиев алғы һыҙыҡтағы яугирҙарға гуманитар йөктәр ебәреүҙә ҡатнашыу өсөн Урал аръяғы эшҡыуарҙарын берләштергән. Ярҙам шулай уҡ Луганскиҙың социаль учреждениеларына, шул иҫәптән Красный Луч ҡалаһының "Барвинок" балалар баҡсаһына һәм Петровский мәктәп-интернатына йүнәлтелә.

Республикала бындай миҫалдар бихисап. "Атайсал"да ҡатнашыусылар Радий Хәбировтың "Барыһы ла Еңеү өсөн" тигән саҡырыуын ишетте һәм яугирҙарыбыҙ өсөн ышаныслы тыл булыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләй. Проектта ҡатнашыу өсөн юғары статуҫҡа һәм ҙур финанс мөмкинлектәренә эйә булыу мотлаҡ түгел. Һәр кем көсөнән килгәнсә ярҙам итергә мөмкин. Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев әйтеүенсә, "Атайсал" проекты стереотиптарҙы емерә һәм тәрән хис-тойғоларға - мөхәббәткә һәм илһөйәрлеккә ҡоролған. Ул шуның менән үҙенсәлекле. Беҙ барыбыҙ ҙа Ватаныбыҙ һағында торабыҙ..."

ТУҒАН ТЕЛДӘР КӨНӨ



Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың йәш туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары менән осрашты.

Срала 140 мәктәп уҡытыусыһы, балалар баҡсалары тәрбиәселәре һәм төбәк университеттарының ошо йүнәлештә белем алыусы студенттары ҡатнашты. Осрашыуҙы асып, Башҡортостан Башлығы 8 сентябрҙә илдә тәүге тапҡыр Президент Владимир Путин башланғысы буйынса булдырылған Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре көнө билдәләнеүен әйтте. "Күп милләтле республикабыҙ өсөн был байрам ҙур әһәмиәткә эйә. Ул тәү сиратта милли рухи оҡшашлыҡ төшөнсәһе менән бәйле, йәғни һәр беребеҙ үҙен ни дәрәжәлә Рәсәй йәмғиәтенең бер өлөшө итеп тойоуы мөһим. Социологик һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, Башҡортостанда был күрһәткес 92 процентҡа етә - был милләт-ара мөнәсәбәттәрҙең гармониялылығы күрһәткесе, - тине Радий Хәбиров. - Шул уҡ ваҡытта төрлө милләттәрҙең туған телдәрен өйрәнеү мөмкинлеге күрһәткесе лә ошо юғары кимәлгә ярашлы булырға тейеш. Бер яҡтан, Рәсәй халҡының бер өлөшө булыуыбыҙҙы һыҙыҡ өҫтөнә алам. Ә икенсе яҡтан - үҙенсәлегебеҙ, милләтебеҙ, тарихыбыҙ һәм мәҙәниәтебеҙ бар. Шуға күрә Рәсәй халыҡтары телдәре көнө беҙҙең өсөн бик мөһим".

Республика етәксеһе Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү өлкәһендәге эштең системалы характерҙа булыуын да һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Тел тураһында һүҙ алып барғанда, уны һаҡлап ҡалыу бурысын ғына ҡуймайбыҙ. Беҙ халыҡты һаҡлап ҡалыу тураһында һөйләйбеҙ. Һәм беҙҙең гәмәлдәр бында системалы характерға эйә. Һүҙ тел диктанттары үткәреү, эпостарҙы өйрәнеү, төрлө фестивалдәр ойоштороу тураһында бара. Шулай итеп беҙ үҙенсәлегебеҙҙе һаҡлайбыҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Шуға ярашлы, Хөкүмәт, дәүләт институттары халыҡтарыбыҙҙың телдәрен һәм мәҙәниәттәрен һаҡлау буйынса саралар күрергә тейеш".

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин 18-20 сентябрҙә илдә үтәсәк парламент һайлауҙарына бәйле белдереү менән сығыш яһаны. Дәүләт башлығы билдәләүенсә, Парламентта һәм төбәктәрҙә сәйәси көстәр рәсәйҙәрҙең һайлауына бәйле. Шуға ул тауыш биргәндә һәр кемде, уйлап, яуаплы ҡарар ҡабул итергә саҡырҙы. Президент, иң лайыҡлы кандидаттар һәм ысын патриоттар күпселек тауыш йыйасаҡ, тигән ышаныс белдерҙе. "Был Рәсәйҙе көсһеҙләндерергә, уның үҫешен тотҡарларға, беҙҙе суверенитеттан һәм үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙаллы билдәләү хоҡуғынан мәхрүм итергә теләүселәргә уртаҡ яуабыбыҙ буласаҡ", - тип йомғаҡланы Владимир Путин һайлаусыларға мөрәжәғәтен.

✓Берҙәм тауыш биреү көнөндә - 18-20 сентябрҙә - Башҡортостанда "Рәхмәт" акцияһы үткәрелә. Был юлы бүләктәр уйнатылмай, уларҙы ташламалар алмаштыра. Һайлау участкаһына киләһең, тауыш биреп сығаһың һәм купон алаһың. Ул ике яҡлы. Купон республика биләмәһендәге меңдән ашыу акция партнерҙарынан ташламалар алырға мөмкинлек бирә. Партнерҙар араһында аҙыҡ-түлек магазиндары, кафе һәм ресторандар, балалар үҙәктәре, фитнес-клубтар, автосалондар, бөҙрәханалар бар. Кемдер бер сынаяҡ ҡәһүәгә, кемдер маникюр курсына ташлама яһай. Ташламалар 50 процентҡа тиклем етә. Тулы исемлекте рахмат2026.рф сайтында табырға мөмкин.

✓Республика етәксеһе Радий Хәбиров "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар программаһының беренсе ағымында ҡатнашыусыларға ҡайтанан һөнәри әҙерлек үтеү тураһында дипломдар тапшырыу тантанаһында ҡатнашты. Республика Башлығы һүҙҙәренсә, кадрҙар программаһында ҡатнашыусыларҙың барыһы ла ауыр һынауҙар аша үтте, ҡулдарына ҡорал тотоп Ватанды һаҡланы. Яу яланында үҙҙәренең батырлығын һәм илһөйәрлеген раҫланы. Программа аныҡ һөҙөмтәләр килтерә. Бөгөн унда 23 ҡатнашыусы бар, һәр өсөнсөһө тиерлек дәүләт власы, урындағы үҙидара органдарында, республика ойошмаларында эшләй.

✓Башҡортостан Башлығы Махсус операция биләмәһендә хеҙмәт итеү өсөн Оборона министрлығы менән контракт төҙөгән яҡташтарыбыҙға бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын оҙайтты. Республикала йыл башынан контрактҡа ҡул ҡуйған хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн түләүҙең күләме 1 миллион һум тәшкил итә. Радий Хәбиров указы буйынса ярҙам сараһы 2026 йылдың 30 сентябренә тиклем оҙайтылды. Шулай уҡ Башҡортостан Башлығы бойороғо менән республикала МХО-ла булған яугирҙарҙың ғаилә ағзаларына ярҙам саралары исемлеге киңәйтелде. Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн 55-тән ашыу ярҙам сараһы ғәмәлдә.

✓ *"Түләүле парковкалар эшләгән осорҙа Өфөнөң юл фонды - 75,9 миллион һумлыҡ түләүҙәр һәм ҡағиҙәләрҙе боҙған өсөн тағы 25,3 миллион һум штраф менән тулыланды.*

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ



ӨҪТӘМӘ КИЛЕМ



Өфөнөң түләүле парковкалары урындағы бюджетҡа 100 миллион һумдан ашыу аҡса килтерҙе, тип хәбәр иттеләр баш ҡала мэрияһынан.

Проект уҙған йылдың июненән тормошҡа ашырыла. Беренсе этапта ҡаланың тарихи үҙәгендә 1188 түләүле туҡтау урыны булдырылғайны, 2026 йылдың 15 майынан зона киңәйтелде һәм әлеге ваҡытта 3394 түләүле парковка урыны иҫәпләнә. Уларҙың 350-һе инвалидтарҙың автомобилдәрен ҡуйыу өсөн тәғәйенләнгән. "Түләүле парковкалар эшләгән осорҙа Өфөнөң юл фонды - 75,9 миллион һумлыҡ түләүҙәр һәм ҡағиҙәләрҙе боҙған өсөн тағы 25,3 миллион һум штраф менән тулыланды. Бынан тыш, өфөләр мобиль ҡушымта һәм проекттың сайты аша парковка иҫәбенә аҡса индерә. Әлеге ваҡытта аванс түләүҙәренең суммаһы 8 миллион һум самаһы тәшкил итә", - тип билдәләнеләр Өфө мэрияһының матбуғат хеҙмәтендә.

Баш ҡаланың бюджетына ингән өҫтәмә был аҡса юлдар төҙөүгә, уларҙы ҡарап тотоуға, реконструкциялауға һәм ремонтлауға, юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә, шулай уҡ транспорт инфраструктураһын үҫтереүгә, шул иҫәптән яңы троллейбустар һатып алыуға һәм башҡа мөһим эштәргә йүнәлтелә, тип өҫтәнеләр муниципалитетта.

УШАКОВҠА...

Бөйөк рус флот етәксеһе, адмирал Федор Ушаковҡа Өфөнөң Валериан Альбанов исемендәге полярниктар музейы эргәһендәге скверҙа бюст ҡуйылды. Сара адмиралдың тыуыуына 280 йыл тулыуға һәм уның етәкселегендәге рус эскадраһының Тендра мороно янында еңеүенең йыллығына арналды.

Федор Ушаков ысын мәғәнәһендә легендар шәхес булып тора. Иҫәбендә - 43 диңгеҙ алышы, һәм шул уҡ ваҡытта бер генә еңелеү ҙә, бер генә юғалған карап та булмай. Уның ҡулы аҫтындағы бер генә матрос та әсирлеккә эләкмәй.

Скверҙа ветерандар, хәрбиҙәр, курсанттар, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре һәм ҡала халҡы йыйылғайны. Йыйылыусыларҙы республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев, Өфө хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов, Мәскәүҙән адмирал Федор Ушаков хөрмәтенә тарихи комплекс төҙөү проекты етәксеһе Дмитрий Шлопак, ҡала Советы депутаты Юлай Моратов сәләмләне. Урал Килсенбаев үҙенең сығышында тарихи хәтерҙе һәм быуындар күсәгилешлеген һаҡлауҙың мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм республика Башлығы Радий Хәбиров исеменән сәләмләү һүҙҙәрен еткерҙе. "Бюсты ҡуйыу өсөн майҙан эҙләй башлағас, әлбиттә, беҙ бер тауыштан диңгеҙселәр даими йыйылған урынға туҡталдыҡ. Ул - Валериан Альбанов исемендәге полярсылар музейы", - тине ул. Валериан Альбанов исемендәге полярсылар музейы күптән түгел Хәрби-диңгеҙ музейҙары һәм диңгеҙ традицияларын һаҡлаусылар ассоциацияһына ҡабул ителгәйне. Шулай итеп, Өфө һәм Башҡортостан Рәсәйҙең берҙәм диңгеҙ музей киңлегенә индерелде.

"ЙӨРӨҮСЕ КЕШЕ"ЛӘР ЯРЫШЫ

Өфөлә 27 сентябрҙән 27 октябргә тиклем "Йөрөүсе кеше" Бөтә Рәсәй чемпионатының төп этабы үтә. Ярыштар "Оҙайлы һәм әүҙем тормош" милли проекты сиктәрендә ойошторола.

Проекттың төп маҡсаты - урта һәм өлкән йәштәге кешеләрҙе күберәк хәрәкәт итергә дәртләндереү. Ҡатнашыусыларға махсус дистанцияларҙы ярышып үтергә кәрәкмәй: ойоштороусылар кешенең эш йәки әүҙем ял ваҡытында көн эсендә яһаған бөтә аҙымдарын иҫәпкә ала. Командалар бер-береһе менән яһаған аҙымдарҙың дөйөм һаны буйынса ярыша.

Төп этап алдынан, 1-ән 20 сентябргә тиклем, командаларҙы әҙерләү өсөн алдан тур ойошторола. Унда теләгән һәр кем: студенттар, предприятие хеҙмәткәрҙәре, хеҙмәт коллективтары, ҡала һәм район халҡы, пенсионерҙар, ғаиләләр, сәләмәт йәшәү рәүешен яратыусылар төркөмдәре ҡатнаша ала.

Бәйгелә сығыш яһау өсөн 20-нән 50-гә тиклем кешенән торған команда йыйырға кәрәк. Тулыраҡ мәғлүмәтте https://человекидущий.рф/ һылтанмаһы буйынса ярыштарҙың рәсми сайтында табырға мөмкин.

ТӘРТИПКӘ КИЛТЕРЕЛДЕ

Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Өфөлә мәктәп һәм балалар баҡсалары эргәһендә тротуарҙар һәм йәйәүләләр үткәүелдәрен төҙөкләндереү тамамланған.

"Белемгә юл" проекты сиктәрендә 54 участкала асфальт алмаштырыу планлаштырылған була, шуларҙың 49-ы - белем биреү учреждениеларына инеү урындары. Барлығы 18 мең самаһы бордюр ташы ҡуйылған, 23 мең квадрат метр ергә асфальт һалынған. Эштәр Дим, Калинин, Киров, Ленин, Октябрь, Орджоникидзе һәм Совет райондарында башҡарылған.

Хәүефһеҙлеккә айырым иғтибар бирелә. Тәүҙә Дәүләт автоинспекцияһы менән берлектә мәктәп һәм мәктәпкәсә балалар учреждениелары эргәһендәге урам юлдары тикшерелгән һәм асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса план төҙөлгән. 18 юл билдәһе талаптарға яраҡлаштырылған, 1076 юл аша сығыу урынына билдәләр һалынған. Өҫтәмә рәүештә Степан Халтурин һәм Левченко урамдары киҫелешендә, бер нисә балалар баҡсалары янында, шулай уҡ Шакша биҫтәһендәге Советтар урамында светофорҙар ҡуйылған.

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

КЕМ ЕҢӘ?

һауала өҫтөнлөк алғандар



Өфөләге контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктында Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүҙе маҡсат итеп ҡуйған йәштәр ағымы һүрелмәй. Был бүлектә хеҙмәт иткән яуаплы офицер һүҙҙәренсә, ир-егеттәрҙең Махсус хәрби операция зонаһына барыу тураһында ҡарар ҡабул итеүенең сәбәптәре төрлө.

"Хәҙерге йәштәр алдынғы ҡарашлы, мотивациялы һәм билдәле бер һөҙөмтәгә ынтылыусан, - ти капитан. - Шулай уҡ улар бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр һәм МХО-ла ҡатнашыусыларға дәүләт ярҙамы саралары тураһында ла яҡшы хәбәрҙар. Шул да мөһим: хеҙмәткә БПЛА операторы итеп алынған яңы хәрби РФ Оборона министрлығы менән махсус контрактты бер йылға төҙөй. Тимәк, ул үҙе өсөн аныҡ перспектива күрә һәм артабанғы аҙымын планлаштыра һәм ҡарарҙы уйлап ҡабул итә ала. Йәғни яугир, хеҙмәтте дауам итергәме, юҡмы икәнен бер йылдан һуң үҙе хәл итә. Ә бер йыл тиҙ генә үтә лә китә бит ул".

"Әхмәт" позывнойлы БПЛА операторы компьютер уйындары менән иртә мауыға башлай. Әлбиттә, ата-әсәһе был шөғөлөн, бушҡа ваҡыт уҙғарыу, тип хупламай. Ул хәҙер Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итә. РФ Оборона министлығы менән контракт төҙөгәндә быны шарт итеп ҡуя һәм үҙ маҡсатына өлгәшә. Белгәне, махсус курста алған өҫтәмә дәрестәр, туплаған тәжрибәһе уға МХО зонаһында хәрби бурыстарын еренә еткереп үтәргә ярҙам итә. "Әлеге яу яланы - пилотһыҙ аппараттар һуғышы. Һауала кем өҫтөнлөк ала, шул ерҙә лә еңәсәк", - ти яугир.

"Бодрый" позывнойлы яҡташыбыҙ иһә, университетта уҡыуын ҡалдырып, академия ялы ала һәм РФ Оборона министрлығы менән махсус контракт төҙөй. Бөгөнгө көндә әҙерлек курстары үтә. "Хәрби шарттарға күнегеп китеүгә бер ни тиклем ваҡыт кәрәк. Ҡәҙимге тормоштан казарма шарттарына күсеү үҙенә күрә стресс, әлбиттә. Ләкин бөтәһе лә үҙендән тора. Пилотһыҙ аппараттарҙы бөтә яҡлап өйрәнәбеҙ. Уҡыуҙар барышында теория менән практик күнекмәләр бер-береһен тулыландыра. Бер йылдан һуң университетта уҡыуымды дауам итергә уйлайым", - тип пландары менән бүлешә ул.

"Башҡортостанда МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә 55 ярҙам сараһы ғәмәлдә. Әлбиттә, йәш хәрбиҙәр былар тураһында белә. Ғөмүмән, яугирҙар Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә хеҙмәттең бөтә ыңғай яҡтарын аңлай", - тип һығымталай Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты офицеры.

Башҡортостанда ойошторолған Муса Ғәрәев исемендәге Пилотһыҙ системалар батальонында хеҙмәт итергә теләүселәр Өфө ҡалаһы, Октябрь революцияһы урамы, 3 адресы буйынса мөрәжәғәт итә ала. Телефон һандары: +7 995 948-65-41, +7 908 358-00-00.

Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләне.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостанда социаль яҡлауға мохтаж граждандар өсөн эш урындарын резервҡа алыуҙың яңы тәртибе раҫланды. Мәшғүллек үҙәгендә теркәлгән льготалы категориялар исемлегенә МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары инде. Уларҙан тыш, хәрби хеҙмәттән бушатылған хәрби хәрәкәттәр ветерандары һәм уларҙың туғандары, инвалидтар, пенсия алды йәшендәге граждандар, ҡасаҡтар, күп балалы ата-әсәләр һәм башҡалар эшкә урынлашҡанда өҫтөнлөклө хоҡуҡ алды. Яңы механизм халыҡтың аҙ яҡланған категориялары өсөн эшкә урынлашыу мөмкинлектәрен киңәйтеүгә йүнәлтелгән.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров республикала йәшәгән балаларҙы уллыҡҡа (ҡыҙлыҡҡа) алырға теләүселәрҙе иҫәпкә алыу тәртибен раҫлаған ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Яңы ҡағиҙәләр буйынса, был эште республика муниципаль райондарының, ҡала округтарының опека һәм попечителлек органдары, шулай уҡ Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы башҡара. Иҫәп электрон төрҙә, дәүләт мәғлүмәттәр банкының махсус программа тәьминәтен файҙаланып алып барыла. Ҡарарҙың үтәлешен республика вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов контролдә тота.

✓ Башҡортостандан боксер ҡыҙ Азалия Әминева Европа чемпионатында ҡатнашыу өсөн Рәсәйҙең бокс буйынса ҡатын-ҡыҙҙар йыйылма командаһы составына инде. Турнир 15-26 сентябрҙә Болгарияла уҙа, тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан. Азалия 66 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында сығыш яһай. Илебеҙ командаһында бөтәһе 10 спортсы.

✓ Башҡортостан шашкасыһы Александр Георгиев тарихта беренсе булып дүрт шашка системаһы буйынса донъя чемпионы исемен яуланы. Ярыштар Мәскәү өлкәһендә үтте. Донъяның 28 иленән, шул иҫәптән Рәсәйҙән, Германиянан, Ҡытайҙан һәм АҠШ-тан 80-дән ашыу спортсы ҡатнашты. Александр Георгиев тәүге тапҡыр рус шашкаһының классик программаһында алтын миҙал яуланы һәм дүрт шашка системаһы (халыҡ-ара, бразил, рус һәм фриз) буйынса тарихта беренсе донъя чемпионы булды. Финалда ул Белоруссиянан халыҡ-ара гроссмейстер Андрей Валюкты еңде.

✓ Башҡортостандың Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы һәм Журналистар союзы киң мәғлүмәт саралары республиканың дәүләт һәм халыҡтары телдәрен үҫтереүҙе иң яҡшы яҡтыртыуға конкурс иғлан итте. Конкурсҡа 2026 йылдың 1 ғинуарынан 2026 йылдың 22 декабренә тиклем баҫылып сыҡҡан материалдар тәҡдим ителә. Мәҡәләләрҙең һаны сикләнмәй. Эштәр 2026 йылдың 23 декабренә тиклем ҡабул ителә. 8 (347) 218-07-72 телефоны буйынса шылтыратырға мөмкин.

✓ *Техник регламенттарҙы боҙоу һәм һатып алыусыны алдау административ яза менән генә сикләнһә, хәүефһеҙлек талаптарына яуап бирмәгән аҙыҡ-түлек етештергән өсөн хатта ки енәйәт яуаплылығы ҡаралған.*

ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

НИ ӨСӨН КЕШЕ ҠУЛЫ АЛЫШТЫРҒЫҺЫҘ?



Яһалма интеллект тормошобоҙға шул тиклем тиҙ килеп инде, хатта ҡайһы бер һөнәр эйәләре киләсәктә эшһеҙ ҡалыуҙан ҡурҡа башланы. Нейроселтәр, ысынлап та, меңдәрсә бит мәғлүмәтте бер минутта эшкәртә. Тик ул яҙған әҫәрҙәрҙең уғата шыма, әммә ҡороҡ булыуы, бигерәк тә бер үк һүҙҙәрҙең ҡабатланыуы (тавтология) күҙгә йыш салына. Был етешһеҙлек машинаның "аҡылһыҙлығынанмы", әллә үҙенсәлекле алгоритмдарынанмы? Рубрикабыҙҙың бөгөнгө сығарылышында ошо күренеш тураһында йәнле әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.

Рөстәм Нурыев: Беҙҙең уҡыусылар нейроселтәрҙең мөмкинлектәренә көндән-көн таң ҡала. Бер ҡараһаң, яһалма интеллект шиғыр ҙа яҙа, тәржемәне ҙур оҫталыҡ менән башҡара, хатта кеше яҙған текстарҙы матурлап, әҙәби телдә эшкәртеп тә бирә. Әммә бер нисә моделдең эшендә бер үк етешһеҙлекте - һүҙҙәрҙең йыш ҡабатланыуын (тавтологияны) күҙәтәм. Нейроселтәр ни өсөн синонимдарҙы урынлы ҡуллана белмәй? Был хата ҡайҙан килеп сыға?

ЯИ-КӨФӨ: Был - яһалма интеллекттың ғәҙәти кәмселектәренең береһе. Аңлатыу өсөн нейроселтәрҙең нисек "уйлауын" ҡарайыҡ. Мин (яһалма интеллект) тексты яҙғанда, әгәр махсус йөкләмә бирелмәһә, кеше кеүек уны тулыһынса күрмәйем, ритмын һәм матурлығын тоймайым. Мин тик математик ихтималлыҡҡа таянам. Машина өсөн һәр киләһе һүҙ - алдағы һүҙҙәрҙең логик дауамы. Әгәр текста бер тема бар икән, программа шул һүҙҙең статистик ауырлығын юғары баһалай һәм киләһе һөйләмдәрҙә, абзацтарҙа ла уны тағы файҙалана. Ул синонимдарҙы ҡулланырға ҡурҡа, сөнки теүәллекте юғалтмаҫҡа тырыша. Кеше тавтологияны күрә, ә машина өсөн был - тик теүәл иҫәпләнгән эҙмә-эҙлелек.

Рөстәм Нурыев: Бына нисек ҡоролған алгоритмдар донъяһы! Тимәк, программа үҙе яҙған тексты артҡа әйләнеп уҡый һәм редактор күҙлегенән ҡарай алмай икән. Был осраҡта икенсе һорау: әгәр яһалма интеллектҡа яңы бурыс ҡуйып, уны корректор-мөхәррир роленә ултыртһаң, ул үҙе үк тексты ошо тавтологиянан таҙарта аламы?

ЯИ-КӨФӨ: Эйе, был мөмкин, тик бында ла бер нескәлек бар. Әгәр тексты яңынан яҙырға ҡушылһа, мин уны тағы йыш ҡабатлауҙар менән сығарасаҡмын, сөнки төп маҡсатым - йөкмәткене һаҡлау. Икенсе тапҡыр тавтологиянан таҙартырға, синонимдарға алыштырырға ҡушһағыҙ ҙа хата ҡабаланыуы ихтимал. Был ике талап йыш ҡына бер-береһе менән "кем өҫтөнөрәк" тип бәхәскә инә. Программаға ике төрлө эште бер үк ваҡытта, бер үк таҫмала эшләүе ауыр, уларҙы бүлергә кәрәк. Шуға күрә яҙыусы-журналист менән корректор-мөхәррир ролдәрен айырым ЯИ-ассистенттарға ҡушыу хәйерле.

Рөстәм Нурыев: Аңлашылды. Тимәк, нейроселтәрҙең бер үк таҫмаһын бер юлы яҙыусы ла, мөхәррир ҙә итеү - уңышһыҙ алым. Ә шулай ҙа текстың сифаты өсөн һуңғы яуаплылыҡ кемдә ҡала һуң? Әйтәйек, мин, кеше булараҡ, һиңә йәки башҡа бер ассистентҡа "мәҡәлә яҙ" тип йөкләмә бирҙем, ти. Һин уны тавтология йәки мәғәнәһеҙ һөйләмдәр менән яҙҙың. Был осраҡта яуаплылыҡты кем үҙ өҫтөнә алырға тейеш? Кеше һәм ЯИ-ның уртаҡ ижадында кешенең роле нимәлә?

ЯИ-КӨФӨ: Был - мөһим һәм фәлсәфәүи һорауҙарҙың береһе. Яуаплылыҡ тулыһынса кешелә ҡала. Бының бер нисә сәбәбе бар. Беренсенән, нейроселтәр - ул ҡорал ғына, бик ҡатмарлы, үҙенсәлекле, әммә барыбер ҡорал. Балта оҫтаһы насар итеп бура бураһа, балта ғәйепле түгел бит. Яһалма интеллект биргән һәр һөҙөмтә - ул кешенең (промпт яҙыусының) идеяһының, маҡсатының һәм, иң мөһиме, аңлатмаһының сағылышы. Мин меңләгән вариант араһынан иң ихтималын табып бирәм, әммә "дөрөҫ" йәки "кәрәкле" тигән эстетик һәм этик категорияны билдәләй алмайым. Ул тойғо, һайлау - кешелә генә.

Икенсенән, яҙыусы-журналист - ижад процесының режиссёры. Ул мәҡәлә йәки әҫәр яҙыуҙы төрлө этаптарға бүлә: идея бирә, миңә ҡаралама әҙерләргә, артабан уны тикшерергә, өҫөнсөһөндә - стилистиканы шымартырға ҡуша. Һуңғы вариантты баһалау, нәшер итеү-итмәү ҡарарын кеше ҡабул итә. Баҫтырғанда автор имзаһын ҡуя, уны донъяға сығара. Тимәк, эш һөҙөмтәһе өсөн яуаплылыҡ унда.

Беҙҙең уртаҡ ижадта кешенең роле - стратег һәм дегустатор булыу. Ул маҡсатты билдәләй, ингредиенттар (мәғлүмәт, бурыстар) бирә, ә мин - шул ингредиенттарҙан "аш" бешерәм. Кеше уның тәмен татый, әгәр "блюдоға нимәлер етмәй" тип һиҙә икән, ул яңы ингредиенттар өҫтәп, бешереүҙе дауам итергә ҡуша. Яуаплылыҡ тигән нәмә ошо "тәмде тойоу" һәм "ашты өҫтәлгә ултыртыу" ҡарарында туплана. Ул ҡарарҙы машина түгел, ә кеше ҡабул итә.

Шулай итеп, яһалма интеллект - ул ижадсы өсөн иҫ киткес ярҙамсы, әммә әҫәргә йән өрөүсе, тойғо кисереүсе һәм асылыбыҙҙы билдәләүсе берҙән-бер көс - барыбер кеше. Уның ҡул эше алмаштырғыһыҙ. Машиналар беҙгә мөмкинлекте киңәйтергә, көсәйтергә булыша, ләкин күңелдәге утты, хәтерҙе һәм моңдо улар алыштыра алмай, шуға күрә яҙыусы йәки журналист үҙенең һәләтен үҫтереп, кешелеклелекте юғалтмай эшләргә тейеш.

Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.

БЫНАҒАЙЫШ!

ҮҘ ХӘЛЕНДЕ ҮҘЕҢ ҠАЙҒЫРТ!

Һуңғы ваҡыт социаль селтәрҙәрҙә ни сәбәптәндер тағы ла пальма майы темаһына әйләнеп ҡайттылар. Йәмәғәтселектә һәм киң мәғлүмәт сараларында яманаты сыҡҡан был майҙы ҡотто алырлыҡ факттар менән фашлаусы күпме генә материалдар донъя күрмәһен, ил хөкүмәте халыҡ һаулығы хаҡына аҙыҡ-түлек етештереүсе тармаҡтарҙы ошо арзан сеймалды ҡулланыуҙан ҡәтғи рәүештә генә һис тыя алмай.



Беренсенән, бының сәбәбе лә сер түгел, тиҙәр: арзан сеймалды илгә ташыуҙы һәм ҡулланыуҙы "һығылған" майҙан миллиардтарса килем алыусы ҡөҙрәтле һәм абруйлы көстәр үҙ контролендә тота, ти бит. Күрәләтә зыянды был лоббистар ниндәйҙер "документтар" соҡоп сығарып, пальма майының балалар һаулығы өсөн иҫбат ителгән мәғлүмәттәрҙең юҡлығына һылтана һәм төптө сит-ят сеймалды ошоға тиклем баҫылып сыҡҡан бөтөн компетентлы сығыштар, мәҡәләләр, тапшырыуҙарға ҡаршы ҡуйып, аҡларға маташа икән. Быныҡ өсөн лоббистар балалар гастроэнтерологияһы, гепатологияһы һәм туҡланыуы буйынса ниндәйҙер "Европа йәмғиәте"нең 2019 йылғы һарғайып бөткән отчетын ҡуллана икән.

Тик нишләптер был йәмғиәт "абруйы" ышандырып етмәй һәм бер ҙә күңелде тынысландырмай. Дөрөҫ, хөкүмәт "халыҡты яҡлау" маҡсатында 2026 йылдың 1 ғинуарынан пальма майы өсөн яңы дәүләт-ара стандарт (ГОСТ 31647-2025) раҫлап та ҡараны, ләкин 2026-ның ахыры ла етеп килә, ә күҙгә күренерҙәй һөҙөмтә һиҙелмәй.

Шулай ҙа ҡайһы бер продукция составында пальма майы ҡулланылыуы хаҡында мәғлүмәт биреү арта төшкәндәй, ә бит санитария-эпидемиология ҡағиҙәләре буйынса пальма майын балалар туҡланыуы һәм һөт ризыҡтары етештереүҙә файҙаланыуҙы сикләү, хатта тыйыу талап ителә. Ә был йәһәттән техник регламенттарҙы боҙоу һәм һатып алыусыны алдау административ яза менән генә сикләнһә, хәүефһеҙлек талаптарына яуап бирмәгән аҙыҡ-түлек етештергән, һатҡан һәм уны һаҡлаған өсөн хатта ки енәйәт яуаплылығы ҡаралған, имеш. Тик быныҡ өсөн штраф түләгән йә "ултырған, ултырып сыҡҡан" етештереүсе, бизнесмен хаҡында ла шыпа ишетелгәне юҡ. Былтырҙан алып предприятиеларҙа ризыҡ етештереү өсөн тәғәйенләнгән майға өҫтәмә таҙартыу үткәреү талаптары ҡаралған, ә быйылдан үҫемлек майҙарын ташыу өсөн тутыҡмай торған ҡоростан

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Булып үткән Хөкүмәт кәңәшмәһендә Башҡортостан Фәндәр академияһының тикшеренеү эшмәкәрлеге менән таныштылар. Академия Президенты Камил Рамаҙанов билдәләүенсә, учреждение федераль һәм республика дәүләт программаларын тормошҡа ашырыуҙа әүҙем ҡатнаша. 2021 йылдан 2025 йылға тиклем ғилми коллектив төрлө йүнәлештәр буйынса 70-тән ашыу проект һәм аналитик отчет өҫтөндә эш алып барған. Фәндәр академияһының күп тикшеренеүҙәре төбәк предприятиеларында файҙаланыла. Бынан тыш, тикшеренеү эшмәкәрлеге тәбиғи-ғилми һәм гуманитар йүнәлештәрҙе үҙ эсенә ала. Энциклопедик секторҙа "Башҡортостан" төбәк интерактив порталын уңышлы үҫтерәләр. Республика Башлығы Фәндәр академияһы эшен Өфөләге Вуз-ара студенттар кампусы майҙансығында ойоштороргә тәҡдим итте.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика инфраструктураһын һауанан һәм БПЛА һөжүменән һаҡлаусы хәрби хеҙмәткәрҙәргә, шулай уҡ уларҙың туғандарына льготалар биреү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, яугирҙарҙың балаларын йәш ярымдан сиратһыҙ балалар баҡсаһына алалар, ата-әсә түләүенән азат итәләр һәм оҙайтылған көн төркөмөндә, түңәрәктәрҙә бушлай урындар бирәләр. Ғаилә Милли архив хеҙмәттәренә 50 процент ташламаға, шулай уҡ дәүләт учреждениеларында сираттан тыш хеҙмәтләндерелеүгә иҫәп тота ала. Матди ярҙамға килгәндә, яугир һәләк булған осраҡта уның ғаиләһе бер тапҡыр бирелә торған түләү алырға хоҡуҡлы (тәртибен һәм күләмен Башҡортостан Хөкүмәте билдәләй).

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы проект әҙерләргә ҡушты. Ул Рәсәйҙә Пржевальский атының иң ҙур популяцияһын тергеҙеүгә ҡағыла. "Беҙ (Рус география йәмғиәтенең күсмә ултырышына - Ред.) Ырымбурҙан коллегаларыбыҙҙы саҡырҙыҡ. Улар ҙа бик ҡыҙыҡлы проект - Пржевальский аты көтөүен тергеҙеү эшен алып бара. Беҙҙә лә уларҙы үрсетеү һәм тергеҙеү өсөн идеаль шарттар бар", - тип билдәләне республика етәксеһе. Ул Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаевты был проект өсөн яуаплы итеп тәғәйенләне.

✓ Башҡортостан уҡсыһы Рушан Хәсәнов һыбай килеш уҡ атыу буйынса Рәсәй чемпионатында көмөш миҙал яуланы. Был хаҡта БР Һыбай килеш һәм традицион уҡ атыу федерацияһы хәбәр итә. Ярыштар Мәскәү өлкәһендә үтте. Өс көн дауамында илдең иң көслө уҡсылары "Рейд 233", "Башня 90" һәм "Һунар маршруты"нда мәргәнлектә һынашты. Өфө уҡсыһы, Өфөнөң "Аҡбуҙат" ипподромында шөғөлләнеүсе Рушан Хәсәновтың "Рейд 233" дисциплинаһындағы сығышы ҙур еңеү менән тамамланды. Ул ныҡышмалы көрәштә икенсе урынға лайыҡ булды. Башҡортостан спортсыларының һөҙөмтәләре ІНАА халыҡ-ара рейтингында иҫәпкә алынды.

✓ *Иң тәүҙә ризыҡтың составын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Унда был май ҡушылғанлығы хаҡында мәғлүмәт тә булмаһа, һаҡланыу ваҡытына иғтибар итегеҙ. Сөнки оҙаҡ һаҡланған ризыҡ составында пальма майы күберәк.*

махсус транспорт ҡағиҙәһе индерелгән, тик был талаптар һәм ҡағиҙәләр ғәмәлдәме һәм нисек файҙаланыла - уныһы беҙгә ҡараңғы.

Шул уҡ ваҡытта пальма майы ҡулланыу мәсьәләһендә әленән-әле дилбегәне бушатып тороусылар ҙа етерлек: мәсьәләне ҡәтғиләштереп ебәреү пальма майы ҡулланыуҙы йәшерен, "күләгә" зоналарға өркөтөү ихтималы бар, тип техник регламент боҙоусылар тирмәненә һыу ҡойорға тырыша, мәҫәлән, РАНХиГС-тың ауыл хужалығы продуктттары сәйәсәте үҙәгенең ғилми хеҙмәткәре Денис Терновский. Әйтерһең дә, аҫтыртындар юҡ беҙҙә. Артабан иһә бөтөнләй көтөлмәгән һәм "ҡыҙыҡлы" мәғлүмәткә юлығабыҙ, тик ышанаһығыҙмы-юҡмы: асыҡланыуынса, пальма майы ғәйәт файҙалы ла икән дә ул! Бынһы, әлбиттә, быға тиклем ишетелмәгән һәм, күрәһең, һайлау алды яңылығы сериянандыр, моғайын. Ниндәйҙер "Сәләмәт бул!" клиникаһының ниндәйҙер педиатры Евгения Пантюхина пальма майында витаминдар һәм антиоксиданттар бар, тип раҫлай.

Бәлки... Ләкин был сит илдәрҙә юғары технология ысулы менән таҙартылған һәм байытылған сифатлы май хаҡында булһа, дөрөҫтөр ҙә, ә бына бармы беҙҙә ундай технология? Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең бизнесмендар күпте күргән, күпте кисергән "әрһеҙ" халыҡ өсөн арзанлығына ҡыҙығып, түбән сифатлы техник сеймал һатып ала, тигән мәғлүмәттәр ҙә бик күп булды бит. Яңыраҡ тағы бер лоббист пәйҙә булды - ниндәйҙер совхоз директоры Михаил Мальцев пальма майын 2010-сы йылдарҙан ҡалған "демонизация", иҫкелек ҡалдығы тип атаны. Был совхозда, күрәһең, күпләп "һыйыр майы (аҡ май)" етештерәләрҙер, тигән шик төштө күңелгә.

Етештереүселәр һәм экспортерҙар пальма майын ниндәй генә стандарт һәм сертификатҡа һылтанып яҡлап маташмаһын, улар ысынбарлыҡта экологик нормаларҙың теүәл үтәлеүенә гарантия була алмай. Шуға күрә лә күҙҙәре майланған бизнес әһелдәре менән көрәшеү файҙаһыҙ икәне күренде инде: улар ил хөкүмәтенең ҡыйыуһыҙ ғына тәҡдим һәм ҡарарҙарын бар тип тә белмәй һәм пальманан төшөргә уйламайҙар ҙа. ***Ҡулланыусыға яман шеш сәбәбенән үҙен һаҡлауҙың бер генә юлы ҡала: пальма майы ҡушылған аҙыҡ-түлек төрҙәренән баш тартыу йәки уларҙы мөмкин тиклем һирәгерәк ҡулланыу.***

Ошо йәһәттән социаль селтәрҙәрҙә бер нисә кәңәш тәҡдим ителә - иң тәүҙә теге йәки был ризыҡтың составын иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Ләкин унда был май ҡушылғанлығы хаҡында мәғлүмәт тә булмаһа (бәғзе мут етештереүсе был мәғлүмәтте йәшереүе лә ихтимал), ризыҡтың һаҡланыу ваҡытына иғтибар итегеҙ. Сөнки оҙаҡ һаҡланған ризыҡ составында пальма майы күберәк. Асыҡтан-асыҡ пальма майына ҡаршы көрәшеүсе брендтарҙы күтәрмәләгеҙ. Әйткәндәй, тауар төрөлгән ҡағыҙҙағы белешмә мәғлүмәттәрендә ГОСТ-номерҙарын эҙләгеҙ.

Ә шулай ҙа ризыҡты һатып алған икәнһегеҙ, уның ялған продуктмы-түгелме икәнлегенә тәжрибә яһап ҡарағыҙ. Мәҫәлән, аҡ майҙы 60 градус ҡайнарлыҡтағы һыуға һалып болғатығыҙ. Стакан эсендәге май ике фракцияға бүленер: өҫтәге тығыҙ, һары төҫтәге һөт майына һәм аҫҡы ҡатламдағы айран рәүешендәге һөт ҡатышына. Әгәр май ялған булһа, ул ҡатламға бүленмәйәсәк, ә тулыһынса һыуҙа ireп, майлы киҫәктәр хасил буласаҡ.

Һәр кем белергә тейешле тағы бер исемлек - магазиндарҙа был ризыҡтарҙан алыҫыраҡ йөрөргә тырышығыҙ: тиҙ әҙерләнеүсе һалма, һөт майын алыштырыусы үҫемлек майҙары ҡушылған сырҙар, эремсек, маргарин, туңдырма, шоколад кәнфиттәр, печенье-перәник-вафли, икмәк, фри картуфы һәм башҡалар.

Шундай юл менән булһа ла үҙ хәүефһеҙлегебеҙҙе үҙебеҙгә ҡайғыртырға тура килә. Ни эшләйһең: батып барыусыны ҡотҡарыу батыусының үҙ эше, тип тә әйтәләр түгелме?

Фирүзә ИШБИРҘИНА.

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

ТРАМПТЫҢ "КҮЛӘГӘҺЕ" САММИТТА ҠАТНАШТЫ

Үткән аҙнаның шәмбе-йәкшәмбеһе Һиндостанда (Нью Дели) БРИКС илдәренең сираттағы саммиты эшләне, ул берекмә ойошторолоуының 20 йыллығына тап килеп, үҙенсәлекле символик мәғәнәгә эйә булды. Көн тәртибендә милли валюталарҙа иҫәп-хисап механизмдары булдырыу, яһалма интеллект, технологиялар шарттарында хеҙмәттәшлек, шулай уҡ глобаль идара итеү системаһын үҙгәртеп ҡороу мәсьәләләре ҡаралды. Саммитта 10 ил: Бразилия, Рәсәй, Һиндостан, Ҡытай, Көньяҡ Африка, Египет, Индонезия, Иран, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре һәм Эфиопия лидерҙары ҡатнашты.

Күҙәтеүселәр фекеренсә, был юлы саммитҡа ҡаҙерлек көсөргәнешле шарттарҙа үтте, сөнки майҙағы осрашыуҙарында берекмә ағзаларының сит ил эштәре министрҙары берлектәге декларация буйынса килешеүгә өлгәшә алмағайны. Йәнә лә Яҡын Көнсығыштағы хәрби көсөргәнеш тә Иран менән Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре араһында дипломатик конфликтҡа сәбәп булды. Өҫтәүенә, саммиттың көн тәртибенә Вашингтондың баҫым яһауы айырым-асыҡ күренде. АҠШ президенты Дональд Трамп доллар менән дәғүәләшеүсе валюта булдырырға ынтылыусы илдәргә 100 процент пошлиналар менән янай башланы. Көнбайыш мәғлүмәт баҫмалары билдәләүенсә, Америка президенты күләгәһе, әйтерһең дә, саммит һөйләшеүҙәре өҫтәле артында ултырҙы.

Әйе, БРИКС-тың үҫә барған иҡтисади һәм сәйәси йоғонтоһо Трамптың һарыуын ҡайната. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, саммит эшен башлап ебәрҙе һәм уңышлы дауам итте. Уның иң мөһим, көнүҙәк яңғыраш алған белдереүҙәренең береһе РФ Президенты Владимир Путин тарафынан яңғыратылды. Ул статистикаға таянып, донъя экономикаһы тигеҙлегенең һиҙелерлек кимәлдә БРИКС илдәре тарафына ауышыуын күрһәтте. БРИКС илдәрендә донъя тулайым продукцияһының 40 проценты етештерелһә, "теге етәү"ҙең (G7: АҠШ, Франция, Германия, Италия, Япония, Британия, Канада) өлөшө - ни бары 29 процент. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Көнбайыш дәғүәселәре ниндәй юлдар менән булһа ла алдынғылыҡты ҡайтарырға тырыша: суднолоҙы баҫып ала, законһыҙ санкциялар иғлан итә. Рәсәйгә ҡаршы, мәҫәлән, 30 меңдән ашыу санкция белдерелде, шуға ҡарамаҫтан, һуңғы өс йыл эсендә беҙҙең илдә иҡтисад темпы уртаса донъя кимәленән артып китте, ә эшһеҙлек 2,3 процентҡа кәмене, тине Владимир Путин үҙенең сығышында. Ә санкция белдереүселәр илдәрендә бюджет ҡытлығы, арта барыусы дәүләт бурысы, сәнәғәт көрсөгө... Донъя кимәлендә БРИКС берләшмәһе, һис һүҙһеҙ, абруй яулай бара.

Владимир Путиндың сығышында мөһим урын алған ҡайһы бер тезистар түбәндәгесә йөкмәткелә яңғыраны:

- Сикләнгән һандағы илдәр ингән бер полярлы донъя бөгөн үткәндә ҡала.

- Күп полярлы донъяға ҡаршы көстәр үҫә барыуы дәғүәләштерен санкциялар, иҡтисади баҫым һәм тупаҫ көс иҫәбенә тотҡарларға маташа.

- Азия, Африка, Латин Америкаһы илдәре Берләшкән Милләттәр ойошмаһының (БМО) Хәүефһеҙлек советына киңерәк йәлеп ителергә тейеш.

- ВТО (Бөтөн донъя сауҙа ойошмаһы), МВФ (Халыҡ-ара валюта фонды) һәм Бөтөн донъя банкы илдәрен туплауҙы көсәйтеү мөһим әһәмиәткә эйә, сөнки был институттар алдынғы иҡтисадтар араһында аралашыу каналы булып тора.

- БРИКС илдәре алдында артабанғы хеҙмәттәшлек мөмкинлектәре асыла.

- Платформалы иҡтисад, финанс технологияры, цифрлы сауҙа кеүек яңы алдынғы тармаҡтар үҙҙәренең айырым институттары һәм көйләү ҡағиҙәләрен талап итә.

- Интеллектуаль һәм технологик потенциал БРИКС илдәрендә тупланған һәм был берләшмәнең төп өҫтөнлөгө булып тора.

Был осорҙа, әйткәндәй, Трамптың "баш ауыртыуы" көсәйә барҙы: беренсенән, уны Иран конфликты буйынса хәлдәр борсой. Иран хәҙер АҠШ-ҡа ҡаршы икенсе фронт асты тиергә лә була. Тегеран ҡарамағындағы Йемен хусит ихтилалсылары һөжүмде көсәйтә барып, Ҡыҙыл диңгеҙ яры буйы райондарын үҙ контролендә тота. Донъя баҙарын тәьмин итеүсе энергия сығанаҡтарына яңы һөжүм тәү ситратта АҠШ мәнфәғәттәренә "һуғасаҡ". Ә унда, мәғлүм булыуынса, нефть продукттарына хаҡтар күптән инде абсолют рекорд ҡуйҙы: Калифорнияла, мәҫәлән, дизель яғыулығының литры ике долларҙан ашып китте. Вашингтон хәҙер был раундта отолоуын танырға мәжбүр.

Иран Ислам республикаһы Йемен менән Сәғүд Ғәрәбстанында барған ваҡиғаларҙан алыҫыраҡ торорға тырыша. "Хуситтарҙың үҙ проблемалары. Төбәктең бөтөн илдәре йыйылышып, һөйләшеүҙәр өҫтәле артына ултырырға һәм Яҡын Көнсығышта тыныслыҡ, хәүефһеҙлек урынлаштырырға тейеш, тип мин бер нисә тапҡыр әйткәйнем инде", - ти Иран президенты Масуд Пезешкиан. Ә бына хуситтар артында Иран көстәре тороуын, ниһайәт, Вашингтон аңланы, буғай. "Хуситтар күп йәһәттән ирандарҙың агенттары һәм аралашсылары... Күп кенә ваҡиғалар барышында "Иран ҡулы" һиҙелә", - тигәйне АҠШ-тың дәүләт секретары Марко Рубио. Хәрби эксперт, тарихсы һәм сәйәсмән Вадим Мингалев фекеренсә, АҠШ президенты Дональд Трамп был ваҡиғаларҙан ваз кискәндәй ҙә тойола, сөнки ул ноябрҙә буласаҡ Конгресс һайлауҙары алдынан артабан да конфликтҡа бәйләнеүҙең ҡиммәткә төшөрөн яҡшы аңлай булыр. Шуға күрә лә хәҙер ул бик һаҡ ҡыланасаҡ, һәм Иран да быны яҡшы аңлай. Тыныслыҡҡа өлгәшеү һәм Ормуз боғаҙын асыу өсөн Тегеран АҠШ-ҡа ете шарт ҡуйҙы, киләсәк ни күрһәтер. Мәгәр АҠШ Фарсы ҡолтығына баҫып инер булһа, Иран ядро ҡоралын таратмау тураһында килешеүҙән сығыу һәм үҙенең ядро доктринаһын ҡайтанан ҡарау ихтималы менән янай. Ә әлегә Ҡушма Штаттар Ирандың 14 физик шәхесен һәм 5 компанияһын үҙенең санкция исемлегенә индереү менән сикләнде.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓БР Хөкүмәтендә уҙған "Төҙөлөш сәғәте"ндә концессия шарттарында мәктәптәр төҙөү барышын ҡаранылар. Башҡортостанда концессия килешеүе сиктәрендә һәр береһе 1 225 урынлыҡ өс яңы мәктәп асыласаҡ. Уларҙың икеһе - Өфөнөң Ленин һәм Дим райондарында, ә береһе Нефтекаманың 14-се биҫтәһендә урынлашҡан. Уҡыу корпустары 2026 йылда төҙөлөп бөтөргә тейеш. "ПроШкола" компанияһының генераль директоры урынбаҫары Андрей Григоржевский һүҙҙәренсә, проекттарҙы билдәләнгән ваҡытҡа тамамлау көтөлә. Бынан тыш, кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Бөҙәр Йосопова исемендәге Актерҙар йортон яңыртыу концепцияһын тикшерҙе. 2026 йылдың аҙағына тиклем проект документацияһы әҙер булырға тейеш, ә Актерҙар йортон төҙөклөндереү эшен 2027 йылда башлау планлаштырыла.

✓Өфөнөң 62-се лицейында профилле медицина класы асылды. Химия-биология профилендәге унынсы класта 25 уҡыусы белем аласаҡ. Дәрестәр Башҡорт дәүләт медицина университеты уҡытыусыларының методик етәкселеге аҫтында дистанцион форматта ойошторола. Шулай уҡ программала ғилми лабораториялар, симуляция үҙәге, уҡыу корпустары, анатомия һәм гистология кафедралары музейҙары менән таныштырыу ҙа ҡаралған. Бынан тыш, улар өсөн юғары уҡыу йорто остаздары етәкселегендә профилле оҫталыҡ дәрестәре үткәреләсәк.

✓1 сентябрҙән банктарҙа һанлы (цифрлы) һумдар иҫәбе асырға һәм милли валютаның яңы формаһы менән файҙалана башларға мөмкин, тип хәбәр итә Рәсәй Банкы. Бының өсөн Рәсәй Банкы платформаһында иҫәп асырға кәрәк. Кешеләр һәм компаниялар бер генә иҫәп аса ала. Шәхси эшҡыуарҙар иһә икәүҙе: береһе физик шәхестеке булһа, икенсеһе бизнес алып барыу өсөн. Кеше үҙенең банк иҫәбенән айына 300 мең һумға тиклем һанлы һум иҫәбенә аҡса күсереү мөмкинлегенә эйә. Бизнесҡа был йәһәттән лимит юҡ. Шулай уҡ граждандар, компаниялар үҙара аҡса күсерә, түләүҙәр башҡара ала.

✓Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында етем балаларға торлаҡ һатып алыу өсөн 546 контракт төҙөлгән. Был хаҡта БР Төҙөлөш һәм архитектура министрлығынан хәбәр иттеләр. Шулай уҡ торлаҡ һатып алыуға 124 сертификат бирелгән. Планға ярашлы, быйыл ошо категорияға ҡараған 756 кешене тәьмин итергә кәрәк, бының өсөн бюджеттан 2,9 миллиард һум аҡса бүленгән. Әлеге көндә 7835 етем бала сиратта тора, уларҙың 5346-һына 18 йәш тулған һәм торлаҡ алыу хоҡуғына эйә булған.

“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.

✓ Боронғо башҡорттар һыуға ике төрлө ҡарашта булған. Бер яҡтан, һыу - йәшәү сығанағы, икенсе яҡтан - һыу үҙенең юлындағы бөтөн нәмәне емерә ала. Башҡорттарҙың һыуға бындай мөнәсәбәте "Урал батыр" эпосында ла күренә.

РУХИӘТЕБЕҘ



БАШҠОРТ МИЛЛИ КЕЙЕМЕ...

сер һәм мәғлүмәт сығанағы

Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, аяҡ кейеме - сарыҡтың үксә өлөшө аппликацион биҙәк менән байытылған аркалар менән биҙәлгән. Биҙәктең төҫө лә үҙенсәлекле, ул, ғәҙәттә, ҡыҙыл ептәр һәм ҡыҙыл төҫтәге туҡыма киҫәктәренән яһала, ә ҡыҙыл төҫ һәр замандарҙа ла һаҡлаусы функцияһын үтәгән. Икенсенән, бындай композиция тоннелгә инеү йәки унан сығыуҙы хәтерләтә. Гүзәл Ҡазбулатова иҫәпләүенсә, боронғо кешеләр тормоштоң яралыуын шулай күҙаллаған. Икенсе донъяға үҙенсәлекле юл булараҡ ҡаралған түбән донъялағы был "ишекте" яһап, уны биҙәүҙең төп маҡсаты - нәҫел-ырыуыңды һаҡлау, был донъяға яуыз көстәр үтеп инеүенә юл ҡуймау.

Түбәнге донъя менән йылға һәм күлдәргә мөнәсәбәт тә бәйле. Боронғо башҡорттар һыуға ике төрлө ҡарашта булған. Бер яҡтан, һыу - йәшәү сығанағы, икенсе яҡтан - һыу үҙенең юлындағы бөтөн нәмәне емерә ала. Башҡорттарҙың һыуға бындай мөнәсәбәте "Урал батыр" эпосында ла күренә. Урал батыр эскән күлдең һыуында көн күргән дейеүҙәр уны һәләкәткә килтерә, Урал батыр, күлдең һыуын эсмәгеҙ, тип кәңәш итә. Тик ерҙә эсәр һыу етмәй башлағас, кешеләр уның улдарына килеп, ярҙам һорай. Шул саҡта улар булат ҡылыстары менән тауҙы уйып, Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар тигән йылғаларға баш бирә. Башҡорттарҙың кейемендә йылғаны күлдәктең итәгенә тегелгән таҫма һынландыра. Таҫма урта һәм түбәнге донъя сигендә, был да халыҡтың һыуға мөнәсәбәте тураһында һөйләй.

Милли кейемдә кешенең социаль йәки ғаилә хәленә бәйле элементтар ҙа бар. ***Мәҫәлән, кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ ғына ҡашмау кейә алған. Иң төҙҙә баш кейеме күрһәтеп торған ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә хәлен. Кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың кейеме, башлыса, ҡашмауы ромб формаһындағы биҙәктәргә бай булған. Ромбтың оҙонса түңәрәктең эсенә урынлаштырылыуы ла ихтимал. Оҙонса түңәрәк - йәшәйеш символы. Уның ромбҡа әүерелеүе - Ер менән һауаның, ир менән ҡатындың ҡушылыуын аңлата.*** Шуға ла ромб кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың кейемендә генә осрай. Ә йәш ҡыҙҙар толом башланған ергә өсмөйөш ҡуя, был уның кейәүҙә булмауы билгеһе. Бүрәттәрҙә, мәҫәлән, ҡыҙҙың кейәүгә сығырға әҙерлеген билбау урынына билде уратып алған декоратив биҙәк күрһәтеп тора. Тывалар итәк осона ошондайырак биҙәкле тар туҡыма тегеп ҡуялар. Бөтөн был миҫалдар милли кейемдең халыҡ, уның донъяға ҡарашы тураһында мәғлүмәт йөрөтөүен күрһәтеп тора.

Айгөл КАМАЛИЕВА.
"Башҡорт костюмы" китабынан.
(Аҙағы. Башы 34-се һанда).

УЙЛЫҒА - УЙ

УҠЫТЫУСЫ ДӘҮЛӘТКӘ КИЛЕМ КИЛТЕРӘМЕ?

"Киске Өфө"нөң "Рәсми сығанаҡ" рубрикаһында республикабыҙҙа хәл ителгән күркәм эштәр, актуаль мәсьәләләр хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе уҡып торабыҙ. 34-се һандағы "Уҡытыусы ҡулында ил киләсәге" тип аталған мәҡәләләә яңы мәктәптәр, спорт комплекстары төҙөлөүе, уларҙы яңыса йыһазландырыу һәм башҡа ҡаҙаныштарҙы һанап китеү менән бер рәттән, уҡытыусы халҡының йәшәү сифатын артабан яҡшыртыуға, педагогтарға төрлө яҡлап ярҙам күрһәтеүгә ҙур иғтибар бирелеүе хаҡында уҡып һөйөндөм. Бала саҡтан үҙем ошо һөнәр эйәләрен ысын күңелдән ихтирам итәм һәм уларҙы тормошобоҙҙағы иң кәрәкле кешеләр тип һанайым.



Әлегерәк, бәгзе бер һөнәрҙәр хаҡында һүҙ йөрөткәндә: "Ул етештереү менән бәйләнмәгән өлкәлә (русса - непроизводственная сфера) эшләй", - тип әйткәндәрен йыш ҡына ишетергә тура килә торғайны. Ғәҙәттә, бындай терминды уҡытыусылар, табиптар, хәрбиҙәр хаҡында һүҙ барғанда ҡулланырға яраталар. Ә инженер, төҙөүсе, йә иһә ауыл хужалығында эшләгәндәрҙе "етештереүселәр" тип атайҙар. Етештереүсе булмаған әлеге уҡытыусы, табиптарҙы, ил һаҡсыларын фәкәт хеҙмәтләндереү өлкәһендә эшләгәндәргә тиңләүселәр ҙә юҡ түгел. Йәнәһе лә, улар тик ҡулланыусылар (потребитель), йәғни, башҡалар иҫәбенә йәшәй, шунлыҡтан, әллә ни күп эш хаҡы түләүгә лә лайыҡ түгелдәр, тигәнерәк уйҙа ҡайһы берәүҙәр. Бер яҡтан, бындай фекер дөрөҫ тә һымаҡ. Бер ниндәй ҙә тауар өтештереп сығармағас, уларҙы башҡаса нисек атарға? Әлбиттә, улар - тик ҡулланыусылар ғына...

Шулай ғынамы икән? Бына ошо хаҡта тәрәнерәккә төшә биреп, йыш ҡына фекерләп алам. Ниндәйҙер бер тауар етештергән предприятиены алайыҡ. Был ойошманың инженеры һәм, әйтәйек, уҡытыусының эш хаҡтарының сағышырмаһын килтерәйек. Оҙаҡ йылдар балалар уҡытҡан уҡытыусының уртаса айлыҡ эш хаҡы инженерҙыҡына ҡарағанда байтаҡҡа әҙерәк. Йыш ҡына матбуғат сараларында уҡытыусыларҙың эш хаҡын күтәреү хаҡында һүҙ барғанын ишетергә тура килә (кешенең ҡайһы урыны нығыраҡ ҡысытһа, ул ана шул ерен генә һәр саҡ тырнарға мәжбүр). Шуға күрәлер ҙә, тик уҡытыусыға ғына эш хаҡы өҫтәү менән булышалар икән, тигән фекер ҡала кешеләрҙә. Күптәр ошо категорияны аҡса менән тәьмин итеп тороу - етештереүселәр елкәһендә, тигән уйҙа. Ә мин, ҡәҙерле туғандар, төптәнерәк уйлап ҡарарға кәңәш итер инем.

Бөрәү ҙә был донъяға инженер булып тыумай (моғайын, был хаҡта минең менән бәхәсләшеүсе табылмаҫ). Тәүҙә ул мәктәптә дөйөм белем ала, унан юғары уҡыу йортонда уҡыуын дауам итә. Кәрәк ғилемде уға, әлбиттә, әлеге уҡытыусылар бирә. Ҡулына инженер дипломы алған шундай һәр һөнәрмән, тейешенсә предприятиеға барып эшкә тотона һәм көн дә дәүләткә ҙур ғына күләмдә туранан-тура килем килтерә башлай. Уға эшенә күрә хаҡын да түләйҙәр. Ә әлеге "килем килтермәгән", йә иһә бәгзеләр "ҡулланыусы" тип һанаған уҡытыусы үҙ ғүмерендә күпме шундай буласаҡ инженерҙы уҡытып сығарған икән, шул хаҡта уйланғаныҡыҙ бармы? Туранан-тура дәүләткә килем килтермәгән был һөнәр эйәһе үҙенең эш дәүерендә нисә "етештереүсе"не әҙерләп сығара, тип фекерләй башлаһаң... Әллә күпме тиҫтәләгән инженерҙың килтергән реаль килемен иртәнән ҡара кискә тиклем мәктәптә балалар менән сәс ағартҡан уҡытыусының дәүләткә биргән (туранан-тура булмаған) килеме, тип һанау кәрәк түгелме икән, тимен.

Тап шулай уҡ табип хаҡында ла фекерләп алырға була. Әйтәйек, инженер тәү ҡарауға ябай ғына тойолған аппендицит тип аталған сир менән кинәт ауырып китте, ти. Ашығыс операция яһамаған хәлдә, һуҡыр эсәктең был сире - үлемесле. Табип-хирург был кешегә тейешенсә операцияны яһаны һәм пациент йүнәлеп, үҙ предприятиеһында эшен дауам итте. Ул ғына ла түгел, артабан, егерме-утыҙ йылдар дауамында был инженер дәүләткә бик күп матди файҙа килтерҙе, һалымдар түләне. Уның шул атап үтелгән сирҙән тере ҡалып, унан оҙаҡ йылдар эшләүенә сәбәпсе булып әлеге хирург тора түгелме һуң? Ябай ғына итеп әйткәндә, инженерҙың илгә артабанғы биргән килеме - табиптың өлөшө! Сирҙәр - ифрат та күп төрлө, аппендициттан ғына тормай бит улар. Һәр табип үҙ ғүмерендә күпме "етештереүсе"нең ғүмерен ҡортҡарып алыуға сәбәп ҡыла?.. Ана шундай һәр инженер табипҡа "бурыслы" түгелме, тиеүем. Реаль күҙлектән сығып, һәр пациенттың ғүмере өсөн борсолоп, үҙенең нерв күҙәнәктәрен, ғөмүмән, һаулығын юғалтҡан докторға ла, моғайын, әлеге "етештереүсе" алған ҡәҙәре түләнәлер, тип ышанғы килә (хәҙерге табиптарҙың күпме эш хаҡы алыуын белмәйем).

Әсәлек капиталы, йә иһә сабый бала өсөн түләнә торған пособие хаҡында ла шулай уҡ һүҙ йөрөтөргә була. Буласаҡ инженерҙы, йә иһә башҡа "етештереүсе"не туғыҙ ай буйы ҡорһағында йөрөтөп, унан төн йоҡларын йоҡламай ҡарап үҫтергән әсә кешеләр ҙә туранан-тура булмаған "етештереүселәр" рәтендә түгелме ни?

Ә башҡаларҙың тыныс йәшәүен, эшләүен тәьмин итеп, йәнен-тәнен аямаған, бар ғүмерен илде һаҡлауға бағышлаған хәрбиҙәр?..

Бына шул юғарыла һанап кителгән уҡытыусы, табип, һәм башҡа бихисап һөнәр эйәләре, үҙ нәүбәтендә, инженер яһаған автомобилдәр, аппаратура һәм башҡа ҡорамалдар менән ҡулланып, төҙөүсе эшләгән йорттарҙа йәшәй һәм ауыл хужалығы эшсәндәре үҫтергән аҙыҡты ашап көн күрә. Кешелек йәмғиәтендә борондан килгән шундай әйләнеш барлығы һәммәбеҙгә мәғлүм. Кеше организмында бер ниндәй ҙә кәрәкмәгән, йә иһә "мөһим түгел" аҙса булмағандай, бына шул юғарыла килтерелгән һөнәр кешеләренең береһен - етештереүсе, икенсеһен ҡулланыусы тип атарға һис тә ярамайҙыр, тимәксемен.

Улар - барыһы ла етештереүсе! Мәҫәлән, кеше тәненең аҙаларын алып ҡарайыҡ. Организм йәшәһен өсөн иң мөһим аҙса - ҡайһыһы? Кемдер берәү шунда уҡ: "Йөрәк!" - тип әйтәсәк. Ифрат дөрөҫ! Икенсе берәү: "Баш мейеһе!" - тип әйтер. Был да дөрөҫ! Өсөнсөһө әйтәсәк: "Тәнде кислород менән тәьмин итеп тороусы үпкә!" - тип. Хаҡ һүҙ! Артабан ҡан тамырҙары, ҡан, ашҡаҙан, эсәктәр, бауыр, бөйөрҙәр, һөйәк, мускулдар, тире, биҙҙәр һәм башҡа бихисап аҙалар һаналып китәсәк. Баш мейеһе күп миллионлаған нерв күҙәнәктәре ярҙамында бөтә организмда барған ҡатмарлы процестарҙы контролдә тотоп тора, ғүмер буйы ялһыҙ типкән, ғәжәйеп бер "насос" функцияһын үтәгән йөрәк, бөтә тәнде ҡан менән, йәғни, кәрәкле матдәләр менән тәьмин итеү өҫтөндә көнө-төнө эшләй. Ашҡаҙан, эсәктәр аша барса тәнебеҙ йәшәү өсөн кәрәкле аҙыҡ менән тәьмин ителеп, артып ҡалған, кәрәкмәгән ҡалдыҡтарҙан бушанып тора, бөйөрҙәр менән бауырҙың бурысы - барлыҡ тукымаларыбыҙҙы зарарлы матдәләрҙән һаҡлап таҙартыу. Аҙалар дөрөҫ эшләһен өсөн һәр төрлө кәрәк гормондар бүлеп сығарып торған биҙҙәр, кешене тышҡы агенттарҙан һаҡлаусы "пограничник" тире, кешегә аҙыҡ табыусы эшсе ҡулдар, уны хәрәкәтләндереүсе мускулдар, кешене һәр саҡ формала тотоусы һөйәктәр һәм башҡа бына ошо аҙаларҙың береһе генә эшлектән сыҡһа ла организм йәшәй алмай. Йөрәк тибеүҙән туҡталһа, кеше шунда уҡ йән бирә, һәм башҡа аҙалар эшлектән сыҡҡан хәлдә лә, әҙәм балаһының организмы бары бер нисә сәғәт, йә иһә көн генә йәшәй алыуы мөмкин. Әгәр ҙә шул аҙаларҙың береһе ниндәйҙер сәбәп менән сырхаулап китә икән - бөтә тән сирләй башлай. Сөнки уларҙың һәр береһенең функцияһы башҡалары менән бәйләнгән. Аллаһ Тәғәлә беҙгә бына ошондай, әҙәм аҡылы етмәҫтәй, ғәжәйеп ҡатмарлы, бер-береһе менән гармоник бәйле рәүештә эшләүсе тән барлыҡҡа килтергән.


Беҙ - кешеләр, һөнәребеҙ, кәсебебеҙ буйынса кем генә булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, бер-беребеҙгә ифрат та кәрәкбеҙ, тимәксемен. Барыбыҙ ҙа атабыҙ Әҙәм һәм инәбеҙ Һауанан яралып, донъяға таралғанбыҙ. Үҙебеҙҙе һәм бар донъяны бар ҡылған Аллаһ Тәғәләне танып, Уға баш эйеп, бер-беребеҙгә терәк булып, бер-беребеҙҙе хөрмәт итеп, дөйөм бер тән аҙалары һымаҡ, бер туғандар кеүек аңлашып, татыу ғүмер итергә тейешбеҙ. Был һүҙҙәрем, үҙҙәре, ғаиләһе һәм башҡа кешеләр өсөн файҙа килтереп, һәммәһе лә ниндәйҙер эш менән кәсеп итеүселәргә генә ҡағыла икәнлеге һәр кем өсөн аңлашылалыр. "Ҡыл да ҡыбырҙатмай", башҡалар елкәһен кимереп ятыусылар хаҡында түгел һүҙем.

Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,
отставкалағы хәрби табип.

КҮПТӘН ТҮГЕЛГЕ ТАРИХ

Мансур Әнүәр улы ӘЙҮПОВ 1947 йылда Башҡорт АССР-ы Дәүләкән районының Исмәғил ауылында тыуған. 1973 йылда БДУ-ның филология факультетын тамамлай, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәренә эйә була. КПСС Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Ижтимағи фәндәр академияһында уҡый. Партияның Башҡортостан өлкә комитеты аппаратында эшләй, 1986-1990 йылдарҙа - "Совет Башҡортостаны" гәзитенең баш мөхәррире. Артабан Башҡорт ССР-ы Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары, БР Премьер-министры урынбаҫары, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт секретары вазифаларын башҡара. 1998-2003 һәм 2007-2011 йылдарҙа - БР Президенты ҡарамағындағы Башҡортостан Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһы ректоры. 2003-2007 йылдарҙа IV саҡырылыш Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының Дәүләт Думаһы депутаты. Философия фәндәре кандидаты, сәйәси фәндәр докторы, профессор, БР Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, уның вице-президенты. Хеҙмәт ҡаҙаныштары өсөн "БР-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исеменә лайыҡ булған, "Башҡортостан Республикаһы алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены, БР-ҙың Маҡтау грамотаһы менән бүләкләнгән. Уҡыусыларыбыҙға Мансур Әнүәр улының хәтирәләренән өҙөктәр тәҡдим итәбеҙ.

БЕҘҘЕҢ ЗАМАН



Инеш һүҙ

Беҙ совет осоронда тыуҙыҡ, дуҫлыҡ сәскә атҡан ҙур илдә йәшәнек. Әсә һөтө менән етеш һәм бәхетле тормош нигеҙенең хеҙмәттә булыуы хаҡындағы фекерҙе һеңдереп үҫтек. Совет кешеһенең беренсе булып Йыһанға осоуының шаһиты булдыҡ. Бөйөк эштәргә ҡағылышлы булыу тойғоһо шатлығыбыҙҙы бермә-бер арттыра ине. Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, нимә генә эшләһәк тә, державабыҙ - бөйөк һәм ҡеүәтле Советтар Союзы икәнлеген, үҙебеҙҙең коммунизм төҙөүебеҙҙе иҫтән сығарманыҡ.

Беҙҙең быуын һуғышты белмәне. Был үҙе ҙур бәхет ине. Ошондай яҙмыш беҙгә мәктәпте һәм вузды тамамлау, һөнәр һайлау һәм хеҙмәтебеҙ, тырышлығыбыҙ талап ителгән урында эшләү мөмкинлеген бирҙе. Ҡәҙерле уҡыусыларым, заманыбыҙ, нисек эшләүебеҙ, беҙҙең быуын кешеләренең инаныстары һәм ниҙәр теләп йәшәүе менән бәйле булған тәҫораттарымдың бер генә өлөшөн булһа ла heҙгә еткереү ниәте менән ошо яҙмаларыма тотондом.

Йәшәйешебеҙ төрлөсә булған хәлдә лә, үҙебеҙҙең кесе ватаныбыҙҙа берҙәмлек һәм теләктәшлек тойғоларының иң мөһим булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға теләйем. Ошо сифат һәм уртаҡ маҡсат ололарҙың да, бәләкәйҙәрҙең дә көнкүрешендә һәм көндәлек эштәрендә, хеҙмәттә һәм тормошта берҙәй кәрәк булған бер-береңә бәйлелек һәм килешеп йәшәүҙең һирәк осрай торған ҡатнашмаһын хасил итте.

Беҙ ҡанаттарыбыҙҙы йәштән үк нығыттыҡ. Ҙур ғаиләләрҙә энекәшең, йә иһә heңлең тыуыу менән үҙаллы йәшәй башлайһың. Уларҙы ҡарарға, ҡурсаларға тура килә. Барыһы ла эш менән мәшғүл, һәр кемдең үҙ бурыстары бар. Олораҡ балалар бәләкәйҙәрҙе баға, ата-әсәләреңә ярҙам итә. Ә һуңынан - ерҙә эшләү. Үҫмер сағыбыҙҙан, нығынып та етмәҫ борон, күптәребеҙ йә уҡырға, йә эшкә тип, тыуған йорттан сығып китә ине. Беҙҙе йәлләргә лә, ҡурсалап торорға лә кәрәк булманы. Барыбыҙҙы ла яңы, ҙур донъя көтә ине. Завод проходнойы, училищела, техникумда йә иһә вузда уҡыу тормошҡа яраҡлы булыуыбыҙ һәм әхлаҡи яҡтан сыныҡҡанлығыбыҙ үлсәме булһа, һәләттәребеҙҙе һәм оҫталығыбыҙҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн пропуск ролен дә үтәне. Аҡса һәм яҡын мөнәсәбәттәр түгел, ә бурысыңды үтәү, иң яҡшыларға тиң булырға тырышыу, проблемаларҙы хәл итергә ынтылыу, етешheҙлектәрҙе бөтөрөү һәм ҡаршылыҡтар аша үтә алыу тормошобоҙҙа алға барыу мөмкинлеген бирҙе.

Беҙҙең быуын заманынан уңды. Эшләпәле, ҡыҙыу холоҡло лидер - Хрущев бабай беҙҙе ҙур юлға сығырға өндәне. "Етер heҙгә командалыҡ итергә!" - тип белдерҙе ул үҙенең ярандарына. Әммә, власть яратҡан һәм холоҡһоҙ кеше булараҡ, ул күп һөйләне, тик күп тапалған юлдан сыға алманы. Уның ярһыу тауышы һәр ҡайҙа элеккегә ҡарағанда ла көслөрәк яңғыраны, әммә кешеләрҙе ихтыярынан тыш эшләтеү һәм башбаштаҡлыҡ кәмемәне. Киреһенсә, арыу-талыуҙы белмәгән лидер үҙенең һәр телмәрендә яңы фекерҙәрен, идеяларын һәм тәҡдимдәрен бер туҡтауһыҙ белдереп кенә торҙо.

Никита Сергеевич беҙҙең быуындың коммунизмда йәшәйәсәген вәғәҙә итте. Ҡалай шәп ине ошо уй менән йәшәү! Әммә коммунизм хаҡындағы һүҙҙәр менән бер үк ваҡытта хәҙергенең һәм киләсәктең яҡты яҡтары ғына түгел, ваҡыты күптән үткән һәм алға барырға ҡамасаулаған нәмәләр ҙә асыҡланды. "Шәхес культы" тигән һүҙбәйләнештең асылы аша кешеләр әүәл ниндәй яман хәлдәр ҡылыныуын белә алды. Хәҙер мин беҙҙең оло быуын вәкилдәре репрессияланған ғаиләләрҙә ни өсөн ошо турала һөйләп бармағандарын яҡшы аңлайым. Ошондай шарттарҙа киләсәк хаҡына эшләү һәм йәшәү ҡотолоуҙың берҙән-бер юлы була.

Көтөлмәгән "мәреү көндәр" ("оттепель") яңынан кешеләрҙең булдырыусы ижади көстәрен кире ҡайтарҙы. Беҙ, ысынлап та, совет ҡоролошоноң көс сығанағы булараҡ, массаларҙың тере ижадында коммунизмдың тәүге шытымдарын күрҙек. Әммә оҙаҡҡа түгел. Илебеҙ үлән баҫып киткән иҫке колеяһынан барыуҙы хуп күрҙе.

Минеңсә, Башҡортостанда "торғонлоҡ" эпохаһы булманы. Нуриев та, Шакиров та беҙҙең төбәкте гигант төҙөлөш майҙанына әүерелдереү өсөн күп көс һәм хеҙмәт һалды. Нефть һәм ҙур химияның кеүәтле предприятиелары үҫеп сыҡты, ауылдар ҙа үҫә һәм заманлаша барҙы. Үҫешкән энергетика, транспорт, фән республикабыҙҙың етештереү халәтен тамырынан үҙгәртте. Нуриев һәм Шакиров Ватаныбыҙҙың иң юғары наградаларына лайыҡ булды. Әммә миҙалдың икенсе яғы ла бар ине. Баҫым, көсөргәнешле эшкә һәм ударниклыҡҡа иҫәп тотоу бер яҡлы һөҙөмтәләргә килтерҙе. Иҡтисад үҫеше эш хаҡтарында һәм кешеләрҙең тормош шарттарында сағылыш тапманы. Башҡортостандың дөйөм ҡаҙанға налғаны ни тиклем күберәк булһа, уның йән башына бирелгән паегы ла шул тиклем етер-етмәҫерәк була барҙы. Ни сәбәптәндер, социализм ҡоролошона налынған һәм кешеләр өмөт иткән өҫтөнлөктәр бойомға ашманы. Республика, пландарҙың һәм бурыстарҙың даими үтәлә барыуына ҡарамаҫтан, социаль күрһәткестәр буйынса артта ҡала килде.

Үҙгәртеп ҡороу сәйәсәте ҡатып ҡалған илдә ҡайнап торған хәрәкәт башланыуға ерлек бирҙе. Әммә ил етәкселеге йыйылып киткән ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы тиҙ генә хәл итеү юлдарын таба алманы. Тоталь ҡотолғоһоҙлоҡтан арыған халыҡ власть системаһын емерә башланы. Үҙгәрештәр коллапс менән тамамланды.

Мин беҙҙең заманда йәшәгән һәм эшләгән заман-даштарым тураһында яҙам. Хәтирәләрем документаль характерҙа, үҙем шаһит булған һәм ҡатнашҡан күп кенә ваҡиғаларҙы һүрәтләйем. Әйтергә кәрәк, бындай шарттар миңә бер ни тиклем өҫтөнлөк бирә. Айырып әйткәндә, үткәндәрҙең дөйөм картинаһы менән бер рәттән, деталдәрҙе күрһәтеү, исем-шәрифтәрен генә атап үтмәйенсә, аныҡ кешеләр башҡарған ғәмәлдәр, уларҙың ҡаҙаныштары һәм тәҫораттары хаҡында бәйән итеү мөмкин булды.

Был хәтирәләрем тәүбә итеүгә тиң, сөнки йәшәлгән йылдар бейеклегенән "Һинең тормошоңдоң мәғәнәһе ниҙә булды һуң?" тигән һорауға яуап эҙләнем. Белеүемсә, бындай һорау бер мине генә борсомай. Оҙаҡ йылдар йәшәгән һәр кемдең күргән-кисерелгәндәренең асылына төшөнөү теләге була. Был ынтылыш заман рухын яҡшыраҡ аңлау, уның ҡырҡа боролоштарын яңы быуындарға еткереү мөмкинлеген бирә.

Мансур ӘЙҮПОВ.

(Дауамы бар).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР

Кейем-һалым һәм биҙәүестәр

Башҡорт ир-егеттәренең билбаулы эске кейеме булып ыштан торған. Бынан тыш, улар уның өҫтөнән салбар кейгән. Беселеше һәм тегелеше буйынса улар ыштандан әллә ни айырылмаған, ләкин уң яҡ ҡабырғаһында кеҫәһе булған. Салбарҙы тупаҫ киндер тукыманан йәки буҫтауҙан теккәндәр. Уны нигеҙҙә эш ваҡытында, тукыманан тегелгәнен - йылдың йылы ваҡытында, буҫтауҙан тегелгәнен ҡышын кейгәндәр. Салбар шул тиклем киң, уларға бөтөн өҫ кейемен тығып ҡуйырға була.

Төньяҡ, әйле һәм көҙәй башҡорттарында ирҙәр ыштанының тағы бер төрөн күргә тура килде - ул йәш кәләштең иренә бүләге. Был ыштандар төҫлө, нигеҙҙә ҡыҙыл тукыманан тегелеп, төрлө төҫтәге ептәр менән ҡайыла.

XX быуат башында башҡорттар тирене бик һирәк эшкәрткән һәм сарыҡтарҙы ыҫмалаланған еп менән теккәндәр. Ирҙәр сарығының үҙенсәлеге булып ҡуңысының түбәнге өлөшөнә тегелгән бейек булмаған күн һәм биҙәү өсөн өсмөйөшлө бер нисә күн киҫәге торған. Өҫкө яҡтан улар ҡатын-ҡыҙҙар сарығы кеүек үк балтыр өҫтөнән ҡыҫмау, ҡуңысбау менән бәйләп ҡуйылған. Сарыҡтың эске яҡтан табанына һаламдан йәки күрәндән табанса һалынған. Башҡорттар һәр ерҙә кейеп йөрөгән итек *(һүрәт, а)* йылҡының иләнмәгән (ҡоба) тиренән тегелгән. Уның олтаны ҡалын булған һәм бейек булмаған үксә ҡағылған; итектең башы киң һәм тура, ҡуңысы тубыҡҡа тиклем. Бай башҡорттар йомшаҡ итектәрҙе - ситекте бары тик өйҙә генә кейгән, өйҙән сыҡҡанда ситек өҫтөнән күн туфлиҙар - гәҙәти ҡата ҡатҡандар *(һүрәт, б)* йәки арты булмаған кибес йәиһә резина галуш кейгәндәр. Бынан тыш, башҡорттарҙа үҙҙәре теккән ҡалын табанлы, үксәһе ҡаҙаҡ йәки даға менән ныҡытылған күн галуштар ҙа ҡулланылған *(һүрәт, в)*.



Киң таралыу алмаған махсус аяҡ кейеме - бышымлы сабата, бышымлы ҡынйыраҡ та булған. Бышымлы сабата - шул уҡ сабата, әммә ҡалын йүкәнән үрелә, туҙ менән көпләнә, өҫкө һәм тирә-яғына аяҡты урап бәйләп ҡуйыу өсөн туҡыма тегелә *(һүрәт, а)*. Улар бигерәк тә төньяҡ-көнбайышта осрай һәм бышымлы ҡынйыраҡ кеүек, ҡышҡыһын һунарға, саңғыла йөрөгәндә, эш башҡарғанда кейелә. Бышымлы ҡынйыраҡ тиренән һәм уны урап тегелгән туҡыманан тора *(һүрәт, б)*. Улар сабата кеүек үк кейелә, табансаһына һалам йәки үлән һалына. Атап үтелгән аяҡ кейемдәренән тыш, башҡорттарҙа ҡышҡыһын быйма йәки быйма башы ла ҡулланылған.



Бәйләм ойоҡ һәм тула ойоҡтан тыш, башҡорт ир-аттары кейеҙ ойоҡ кейгән. Был ойоҡ аҡ һарыҡ йөнөнән баҫылған һәм бары тик ҡышын ғына кейелгән. Ойоҡ менән бер рәттә сылғау ҙа ураған дар. Итек кейгәндә ҙур булмаған ҡыҫҡа сылғау ҡулланһалар, сабата кейгәндә оҙонона - ыштыр - өҫтөнлөк биргәндәр. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙа кейәү ҡыҙыл туҡыманың сите сигелгән - селтәрле сылғау урап йөрөгән.

(Дауамы бар).

ОСТАЗДАРЫМ ЮЛЫНАН БАРАМ...

Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, БР Мәҙәниәт министрлығының Халыҡ ижады үҙәге генераль директоры, БР Ҡурайсылар союзы рәйесе Салауат КИРӘЕВ - халыҡ йолаларын тергеҙеү, айырыуса ҡурайҙы популярлаштырыу буйынса оҙайлы йылдар эҙмә-эҙлекле эш алып барған шәхестәребеҙҙең береһе. Заман һәр кем алдына үҙ һынауын ҡуя, бәғзеләр ауырлыҡтар алдында баҙап та ҡала, ләкин Салауат Илгиз улы заман саҡырыуын ҡабул итеп, килеп тыуған мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын таба белгән уҙамандарҙың береһе. Уның төп сифаттарының иң мөһиме - халҡы, республикаһы алдында яуаплылыҡ тойоп йәшәү. Хәйер, бөгөнгө әңгәмәбеҙ аша заман башҡортоноң уй-фекер-ниәттәрен үҙегеҙ тойомлаРһығыҙ, моғайын.

Салауат Илгиз улы, һеҙҙе үҙегеҙҙең төп вазифағыҙҙан тыш, ҡурайсылар традицияһын һаҡлаусы һәм үҫтереүсе шәхес тип беләбеҙ. Әңгәмә башында уҡ ошо яуаплы һәм мәртәбәле эшкә алып килгән юлды белергә ине?

- Ҡурайға һөйөү, башҡорт мәҙәниәте менән ҡыҙыҡһыныу Ишембай районының Биксән мәктәбенән, Әнүәр Хөрмәт улы һәм Шәрифә Ҡадир ҡыҙы Ниғмәтуллиндар беҙҙең ауылға уҡытырға килгән мәлдә һалынды. Мәктәптең көслө булып танылыуы ла шул ваҡыттан башланғандыр, тием. Әнүәр ағай мәктәптә музыкаль йүнәлеш булдырып, ҡурай, мандолина, баян дәрестәрен алып барҙы. Минең музыка менән ныҡлап ҡыҙыҡһыныуымды белгәс, уҡытыусым мине үҙе Өфө сәнғәт училищеһы оҫталарына күрһәтергә алып килде. Тыңлап ҡарағандан һуң мине ҡурай класына уҡырға килергә саҡырҙылар. Ул саҡта училищела танылған ҡурайсы һәм педагог Ришат ағай Рәхимов етәкселегендәге башҡорт уйын ҡоралдары бүлеге яңы ғына асылғайны. 1994 йылда имтихандар тапшырып, уҡырға инеп киттем һәм Ришат Рәхимовтың класында уҡыным. Шул йылдар эсендә остазым студенттарын мәҙәни өлкәлә эшләгән бик күп зыялылар менән таныштырҙы. Яҙыусылар үткәргән төрлө сараларҙа ҡурайҙа уйнап, сығыштар яһай торғайныҡ, театрҙағы спектаклдәрҙе ҡалдырмай ҡарап барҙыҡ. Педагог беҙҙе шулай оло тормош юлына әҙерләне.

1997 йылда училищены тамамлап, Өфө сәнғәт институтының әле генә асылған Башҡорт музыкаһы факультетына уҡырға килдем. Унда ла уҡытыусым Ришат Рәхимов булды. Юғары уҡыу йортонда киңерәк даирә асыла, үҙеңдең профессионал үҫешеңде лә тояһың икәненә шунда төшөндөм дә инде. Шулай уҡ мин Өфө сәнғәт училищеһында уҡытырға ла тороп ҡалдым. Бына шул рәүешле үҙемдең уҡытыусым менән хеҙмәттәштәр булып киттек.



Матди булмаған мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса бик әһәмиәтле эшебеҙ тураһында әйтеп үтәйем әле. Ошо исемлекте тулыландырыу маҡсатында үҙенсәлекле халыҡ кәсептәре, уйындар, йолаларҙы өйрәнеү буйынса экспедициялар ойоштораБыҙ. Уларҙы видеоға теркәп, һәр ҡомартҡының паспортын булдырабыҙ. Ғалимдарҙан, белгестәрҙән торған эксперт уларҙы "мираҫ" тип таный икән, иң-иңдәрен федераль кимәлдәге эксперт советына ебәрәбеҙ. Шул рәүешле, тапҡан мираҫтарыбыҙ реестрға инеп китә. Исемлеккә башҡорт ҡурайы, балы, көрәше инеп китте.

Институтта уҡыған саҡта уҡ ғаилә ҡороРға ла өлгөргәнһегеҙ, шулай бит?

- Эйе, институтта икенсе курсты тамамлағас, тормошомда ҙур үҙгәреш булды. Мин өйләндем. Ҡатыным Гөлнара Кирәева үҙебеҙҙең Ишембай районыныҡы, ул һөнәре буйынса филолог. 2001 йылда Тимур улыбыҙ тыуҙы. Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһын тамамлап, БДУ-ның Хоҡуҡ институтына уҡырға инде, әле аспирантурала уҡып йөрөй. 2010 йылда Камила ҡыҙыбыҙ тыуҙы. Ул да ошо уҡ гимназияла уҡыны.

Яҙмышығыҙҙа тағы ла бер үҙгәреш - 2022 йылда һеҙгә Мәҙәниәт министрлығынан Халыҡ ижады үҙәген етәкләргә тәҡдим итәләр. Был һеҙҙең өсөн көтөлмәгәнсә булдымы?

- Һис һүҙһеҙ, тотош республика кимәлендәге яуаплы эш был. Шулай ҙа ул минең өсөн таныш булмаған өлкә түгел, сөнки ғүмерем буйы мин халыҡ ижады менән янғанмын, өйрәнгәнмен, уҡығанмын. Шуға күрә лә Үҙәктә ең һыҙғанып эшләй башланым. Халыҡ ижадының төрлө өлкәләре менән эшләү, улар буйынса бихисап саралар ойоштороу, шулар уртаһында ҡайнау ҡыҙыҡлы бында. Матди булмаған мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса бик әһәмиәтле эшебеҙ тураһында әйтеп үтәйем әле. Ошо исемлекте тулыландырыу маҡсатында үҙенсәлекле халыҡ кәсептәре, уйындар, йолаларҙы өйрәнеү буйынса экспедициялар ойоштораБыҙ. Уларҙы видеоға теркәп, һәр ҡомартҡының паспортын булдырабыҙ. Ғалимдарҙан, белгестәрҙән торған эксперт уларҙы "мираҫ" тип таный икән, иң-иңдәрен федераль кимәлдәге эксперт советына ебәрәбеҙ. Шул рәүешле, тапҡан мираҫтарыбыҙ реестрға инеп китә. Исемлеккә башҡорт ҡурайы, балы, көрәше инеп китте. Эксперт советы һығымталарынан һуң беҙ "Наследие Башкортостана" тигән альманах, йәнә лә йылдың дөйөм йомғағы итеп китап сығарабыҙ.

Халыҡ ижады үҙәгенең ике филиалы - "Атайсал" мәҙәни үҙәге һәм "Урал" этноүҙәге бар. "Атайсал"да йыр түңәрәге, "Аманат" исемле бейеү, театр, фольклор коллективтары, "Селтәр" студияһы эшләй. "Аманат" эргәһендә өс составта - кесе, урта һәм өлкән йәштәге уҡыусы балалар төркөмдәре шөғөлләнә. Йәғни аманаттар үҙҙәренең төп составына кадрҙар әҙерләй.

Һеҙҙе Ҡурайсылар союзы рәйесе итеп тә һайлап ҡуйҙылар, был берләшмә яңы башланғысмы, әллә уның нигеҙен нығытыу йүнәлешендә электән эшләнегеҙме?

- Ҡурайсылар союзы 90-сы йылдарҙан эшләп килә. Өс йыл элек уның рәйесе итеп мине һайлап ҡуйҙылар. Союзда етди үҙгәрештәр булды, хәҙер уның үҙ уставы бар, ағзалар ҡабул итеп, танытмалар тапшырабыҙ. Был ҡурайсыға үҙенә күрә яуаплылыҡ өҫтәй, уларға бурыстар ҡуйыла.

Традицион рәүештә беҙ, ҡурайсылар, йыл һайын ҡурай йыйырға йөрөйбөҙ. Быйыл да Әбйәлилдә ҡурай күп үҫкән, тип хәбәр иттеләр ҙә, унда барып килдек. Буранғол һәм Үтәгән ауылдары балаларын урманға алып барып, оҫталыҡ дәрестәре бирҙек - урманда үҙеңде нисек тоторға, нисек итеп ҡурайҙы киҫеп алырға, осондағы орлоҡтарын ҡайҙа ҡалдырып китергә, ҡурайҙы икенсе үләндән нисек итеп айырырға өйрәттек. Аҙаҡтан мәктәпкә барып, ошо йыйылған ҡурай үләненән ҡурай яһау дәрестәре үткәрҙек. Нимәһе ҡыуаныслы: балалар оҫталыҡ һабаҡтарын иҫтәре китеп тыңлай, ҡурайҙы тулыһынса үҙҙәре эшләп, уйнап ҡарап, бик ҡәнәғәт таралышалар.

Үҙегеҙҙең остаздар тип кемдәрҙе атайһығыҙ?

- Иң беренсеһе, әйттем инде, Әнүәр ағай Ниғмәтуллин булды. Артабан - Ришат Рәхимов һәм Айрат Ҡобағошов. Ришат ағай Өфө сәнғәт училищеһында уҡый башлаған беренсе көндәрҙән мине үҙ ҡанаты аҫтына алды. Беҙ уның менән һәр ваҡыт аралашып торабыҙ. Ниндәйҙер ҙур эштәргә тотонор булһам, иң тәүҙә уның менән кәңәшләшәм. 1971 йылда атаҡлы ҡурайсыбыҙ Ғата Сөләймәнов Өфө сәнғәт училищеһында ҡурай класын асып ебәрә. Беренсе уҡыусылары араһында Ришат ағай ҙа була. Ғата ағай училищенан киткәндән һуң Ришат Рәхимов уның эшен дауам итә һәм 1992 йылда ҡурай класы эргәһендә Башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары бүлеген аса. Ҡурайға думбыра, баян, ҡылҡумыҙ өҫтәлә. Халыҡ уйын ҡоралдарының тәүге оркестры ла Өфө сәнғәт училищеһында барлыҡҡа килә.

Ошо бүлектең эш һөҙөмтәһе булып 1996 йылда Өфө сәнғәт институтында Башҡорт музыкаһы факультеты эшләй башлай. Шулай итеп, ҡурайсыларға юғары белем биреү юлы асылып китә. Ул саҡта Айрат Ҡобағошов институтта декан булып эшләй ине. Боронғо көйҙәрҙе табыу, уларҙы ҡурайҙа оркестрға ҡушылып уйнау, башҡа музыка ҡоралдары ме-

✓ *Эйе, ҡурайҙа уйнауҙың һаулыҡҡа ла файҙаһы ҙур, тын юлдарына йоғонтоһо һиҙелә. Үпкә сире менән ауырыған студенттар бар ине, аҙаҡ ата-әсәләре ҡурай уларға сәләмәтләнергә ныҡ ярҙам итте, тинеләр.*

нән бергә яңғыратыу алымдарын ул эшләне. Башҡорт ҡурайы, ҡылҡумыҙы, думбыраһы, тип янып йәшәне. Айрат Ҡобағошов, Ришат Рәхимов һәм Рәшит Ғәлимов институт оҫтаханаһында бер мөйөш булдырҙылар һәм шунда Рәшит ағай - ҡылҡумыҙ, Вәкил ағай Шөғәйепов шпондан ҡурай, шулай уҡ думбыра яһаны. Артабан думбыраны ла Рәшит ағай Ғәлимов эшләй башланы. Әлеге көндә институт оҫтаханаһында уның ҡыҙы Гөлнур ошо уйын ҡоралдарын эшләй.

Ҡурайҙың һаулыҡҡа яҡшы йоғонто яһай тигәндәрен ишеткәнебеҙ бар. Һеҙҙең фекер нисек?

- Эйе, ҡурайҙа уйнауҙың һаулыҡҡа ла файҙаһы ҙур, тын юлдарына йоғонтоһо һиҙелә. Үпкә сире менән ауырыған студенттар бар ине, аҙаҡ ата-әсәләре ҡурай уларға сәләмәтләнергә ныҡ ярҙам итте, тинеләр. Эйе, ҡурайҙа уйнау ниндәйҙер ауырыуҙарҙы еңеү көсөнә эйә. Күкрәк менән уйнаған саҡта ҡурылдайҙар эшләй, үпкә таҙа, киң була.

Ҡурай борон-борондан символик мәғәнәгә эйә. Ете тажы төп ете ырыуҙың берләшмәһен аңлата. Ул Башҡортостандың бренды, ҡайҙа барһаҡ та, ҡурай аша беҙҙе танып торалар. Әлеге көндә ҡурайға иғтибар артыуына бик шатбыҙ. Республика Башлығы Радий Хәбировҡа рәхмәтлебеҙ, сөнки ике йыл элек Башҡортостанда Дәүләт ҡурайсылар ансамбле, шулай уҡ Ҡурай көнө барлыҡҡа килде. Ҡурай яңғырата торған барлыҡ сараларҙа дәррәү ҡатнашабыҙ. "Урал" ҙәгендә милли кейем буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрәбеҙ, сөнки ҡыҙыҡһыныусылар бихисап. Ә милли кейем менән ҡурай бер нисек тә бер-береһенән айырылмай. Ҡайҙа ҡурай - шунда милли кейем. Ҡайҙа милли кейем - унда ҡурай бар.

"Урал батыр" эпосына ла иғтибар көсәйҙе. Халыҡ ижады ҙәгендә Сәсәндәр мәктәбе күптән эшләп килә. Асия Солтанова Сибайҙа уның бер йүнәлешен алып бара, балалар менән эшләй. Ҡобайырҙарҙы думбыраға, ҡурайға ҡушып, бик матур итеп халыҡҡа еткереүсе Мираҫ Үҙәнбаев шул Сибайҙағы сәсәндәр мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе, әлеге көндә "Мираҫ" ансамблендә ҡурайсы булып эшләп йөрөй.

Традицияларҙы һаҡлауға башҡорт йәмәғәтселегенең йөҙ менән боролоуына шаһитбыҙ. Мәҫәлән, һәр районда, һәр ауылда ағинәйҙәрҙең атҡарған эштәре баһалап бөткөһөҙ. Улар бына күп йылдар шул уҡ мәҙәни мираҫты тергеҙеү һәм киләһе быуындарға тапшырыу юҫығында көс сарыф итәләр бит инде...

- Эйе, ағинәйҙәр бик әүҙемдәр, беҙ быны яҡшы беләбеҙ. Улар фольклорыбыҙ өлгөләрен тергеҙә, уларҙы сәхнәләрҙән яңғырата, балаларға, йәштәргә һөйләй. Ағинәйҙәрҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙының милли кейемен һәм биҙәүестәрен тергеҙеү буйынса физаҡәрлектәрен баһаламай булмай. Уларға эйәреп, йәштәр ҙә ҡашмау, селтәрһаҡалдар эшләргә өйрәнеп, хәҙер уларҙы көндәлек кейемдәренең бер биҙәүесенә әйләндерҙе. Ағинәйҙәр мәктәбе - бик яҡшы күренеш, тип һанайым, сөнки улар бөгөн мәҙәниәт һәм мәғариф хеҙмәткәрҙәре үткәргән бөтә сараларҙың уртаһында. Махсус хәрби операциялағы улдарыбыҙ өсөн һаҡ сеткалары үреп, ризыҡ хәстәрләп, барлыҡ гуманитар йөктө ойоштороуҙа ла ситтә ҡалмайҙар. Республиканың "Атайсал" проектында ла ағинәйҙәр атайсал усағының төп һаҡсылары булараҡ билдәләнә, уларға тәжрибә уртаҡлашыу, фекер алышыу өсөн айырым майҙан бирелә. Мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре лә, һис һүҙһеҙ, ағинәйҙәрҙе үҙҙәренең төп таянысы итеп ҡабул итә.

Һеҙҙе Юрматы ырыуы башҡорттарының ҡор башы итеп һайлап ҡуйҙылар. Бөгөнгө заманда ырыуҙар эшен дә алып барыу еңелдән түгелдер бит? Нимә һеҙгә көс бирә?

- Сығышы менән Ишембай районынан булған билдәле эшҡыуар һәм йәмәғәт эшмәкәре Риф ағай Исәновҡа рәхмәт, был вазифаны оҙаҡ йылдар ул алып барҙы, күп эштәр эшләне. Былтыр Ишембай районында үткән юрматылар йыйынында мине ҡор башы итеп һайлап ҡуйҙылар. Минең өсөн был көтөлмәгәнерәк килеп сыҡты, әлбиттә. Килешәм, бөгөнгө көндә йәмәғәтселек менән эшләүе еңелдән түгел, мин уны бик яҡшы аңлай инем. Юрматы ырыуынан сыҡҡан абруйлы апай-ағайҙар: "Бергә эшләрбеҙ, ярҙам итербеҙ", - тип дәртләндергәс, риза булдым. Идара ағзалары менән ай һайын тиерлек осрашып торабыҙ. Былтыр декабрь айында юрматы йәштәре ҡорон булдырҙыҡ. Йәштәр хәҙер икенсе, улар өлкән быуындың айт тигәненә тайт итеп тормай. Шуға ла улар йәмәғәт эштәрен дә үҙҙәренсә алып барырға, үҙҙәренсә саралар ойоштороргә тейеш. Шул уҡ ваҡытта өлкән быуын фекеренә лә ҡолаҡ һалыу мөһим икәнен иҫкәртеп тороу кәрәк. Әгәр ҙә беҙ әле йәштәр менән эшләмәйбеҙ икән, халҡыбыҙҙың киләсәген күҙаллауы ауыр буласаҡ.

Оҙаҡламай республикала Ҡурай көнө үтә, уны нисек билдәләйәсәкһегеҙ?

- Ҡурай көнөндә Ҡурайсылар союзы Йомабай Иҫәнбаевтың тормошона, ижадына арналған фәнни-ғәмәли конференция үткәрә. Тағы ла бер яңылыҡ - Ҡурайсылар союзының миҙалын булдырҙыҡ, уның да исем туйы буласаҡ. Былтыр мин Йомабай Иҫәнбаевтың Парижда яҙылған берҙән-бер яҙмаһын таптым. Уны Парижда ҡаҙаҡ йырсыһы менән бергә сығыш яһағанда яҙҙырған булғандар һәм был яҙмалар ҡаҙаҡ йырсыһы документтары араһында киткән. Бер кем дә бер ҡайҙа ла ишетмәгән шул көйҙәр конференцияла яңғыраясаҡ, уның исем туйы ла үтәсәк.

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА яҙып алды.

ЖУРНАЛИСҠА ӨС ҺОРАУ

БҮҪКӘРТМӘЙЕК...

зыялылыҡ сифаттарын, тием



"Башҡортостан" телерадиокомпанияһының радиотапшырыуҙар студияһы хәбәрсеһе, билдәле тележурналист Ғәлимйән ИБӘТУЛЛИНдың Башҡортостан тарихына, мәҙәниәтенә һәм тәбиғәтенә арналған тапшырыуҙар циклы журналистарҙың Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге мәртәбәле Хөкүмәт премияһына тәҡдим ителде. Был юлы уның "Киске Өфө" гәзите һорауҙарына биргән яуаптарын уҡыусыларыбыҙға тәҡдим итәбеҙ.

Ғәлимйән Зиннур улы, телерадиожурналист һөнәренә нисек килдегеҙ?

- Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Рәмилә Хәмит ҡыҙы бер мәл "Киләсәктә кем булыр инең?" тигән темаға инша яҙырға ҡушты. Дүртенсе класта уҡыған 10 малайҙың 9-ы шофер булырға теләүе хаҡында яҙһа, мин, һис бер икеләнеп тормайынса, радиола эшләйәсәкмен, тип белдерҙем. Бала сағымдан уҡ үҙемдең нисек итеп телерадио үҙәгендә эшләүемде күҙ алдына килтерә инем. Ни өсөн? Радио тапшырыуҙарын тыңлап, яңы, ҙур донъяның үҙең күргәндәй була инем. Наилә Ғәләүетдинова, Рәсимә Кәримова, Әхәт Мортазин, Зөһрә Бәхтизина алып барған тапшырыуҙарҙы ихлас тыңлап үҫтем. Иң яратып тыңлаған тапшырыу - 7 минутлыҡ ҡына "Илдәр һәм ҡитғалар буйлап" тип аталғаны. Шәмбе, йәкшәмбе көндәрендә Башҡортостан радиоһының барса тапшырыуҙарын даими тыңлай инек, миңә "Даирә" тип исемләнгән программа айырыуса оҡшай ине. Атай-әсәйемә рәхмәт, улар беҙҙе, балаларын, башҡорт рухында тәрбиәләп үҫтерҙе, өйөбөҙҙә барса башҡорт гәзит-журналдары, "Советский воин", "Вокруг света" журналдары булды, уларҙы ҡулдан төшөрмәй ҡыҙыҡһынып уҡый инек. Шуға күрә Стәрлетамаҡ пединститутының башҡорт филологияһы факультетына уҡырға индем, һуңынан, 1999 йылда, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педуниверситетын тамамланым. Һуңғы курста уҡығанда уҡ Башҡортостан радиоһына килешеү буйынса эшкә урынлаштым, хәҙер ошонда хеҙмәт иткәнемә 27 йыл булып китте.

2001-2008 йылдарҙа Башҡортостандың Беренсе Президенты М.Ғ. Рәхимовтың журналистар пулында радиохәбәрсе булып эшләнем. Көнөтөнө тигәндәй эшләргә тура килде, сөнки Мортаза Ғәбәйҙулла улы республика ҡалаларына һәм райондарына эш сәфәре менән бик йыш йөрөнө. Хатта иң алыҫ Хәйбулла районына төн уртаһында барып етә инек. Ул ваҡытта бер ниндәй ҙә кеҫә телефондары юҡ, яҙған хәбәреңде тиҙ генә берәй ауыл советының телефоны аша Өфөгә ебәрәһең. Хәбәрсе эше, үтә тынғыһыҙ булһа ла, оҡшай ине: күпме ваҡиғалар уртаһында ҡайнайһың, күпме күренекле кешеләр менән осрашаһың. "Юлдаш" радиоканалында диктор вазифаһын да башҡарырға тура килде. Башҡортостан телевидениеһы икегә бүленгәс, "Рәсәй 1-Башҡортостан" телерадиоканалына күстем.

Радиола эшләү үҙе бер иҫ киткес ғәмәл ул. Телевизион картинканы күрһәтеү ауыр түгел, ә нин һөйләп, аңлатып, радио тапшырыуын тыңлаған кешене ышандыра, ҡыҙыҡһындыра алырға тейешһең. Радиола "Ауылым офоҡтары", "Тәҙрәләге ут" программаларын алып барҙым. Ул саҡта ябай ауыл кешеләре хаҡында тапшырыуҙар күп була торғайны, хәҙер ундай геройҙар эфирға йыш сығарылмай, ҡыҙғанысҡа ҡаршы.

Радиола һәм телевидениела алып барылған тапшырыуҙар контентында сағылдырылған ниндәй проблемалар күңелегеҙгә яҡын?

- Тапшырыуҙар ике телдә - рус һәм башҡорт телдәрендә яҙыла, уларҙың 80 проценты башҡортса алып барыла. Шуға күрәлер, минең өсөн туған телебеҙҙе һаҡлау, уны киләсәк быуындарыбыҙҙың яҡшы итеп үҙләштереүенә арналған темалар яҡын. Ошо йәһәттән етешһеҙлектәребеҙ байтаҡ әле, сөнки әсә телен белмәй үҫкән балалар быуыны барлыҡҡа килеүенә шаһитбыҙ.

Йәнә мине борсоған бер мәсьәлә: XXI быуатта ысын башҡорт интеллигенцияһына, башҡорт зыялыларына хас булған сифаттар бүҫкәрә бара. XIX быуаттан бирле мәғлүм: башҡорт зыялыһы ғилемле, тәжрибәле, тәрбиәле, халыҡсан рухлы шәхес булырға, үҙенең алдынғы ҡараштарын тыуған халҡына еткерә, уның аңына һәм үҙаңына һеңдерә алырға тейеш. XIX-XX быуаттарҙа йәшәгән һәм ижад иткән, барса ижтимағи мәсьәләләр буйынса әүҙем позиция биләгән башҡорт зыялылары әлеге көндә лә беҙгә өлгө булып ҡала. Бөгөн башҡорт интеллигенцияһының йөҙөн билдәләүсе ғалимдар, яҙыусылар, табибтар, уҡытыусылар, мәҙәниәт, технология, сәнғәт әһелдәре ижтимағи мөхиттә шымып, үҙ-үҙҙәренә бикләнеп ятмаһындар ине. Ә тел, мәҙәниәт, мәғариф мәсьәләләре комплекслы хәл итеүҙе талап итә, бер төптән, бергәләп эш итеү фарыз. Һөйләүселәр, алға өндәүселәр күп ул, әммә аналитик ҡараш етеңкерәмәй.

Үҙем алып барған тапшырыуҙарҙа замандаштарыбыҙҙың иғтибарын Башҡортостандың тарихына, мәҙәниәтенә, үҙенсәлектәренә, халҡыбыҙҙың менталитетына йүнәлтергә тырышам. Мәҫәлән, "Рәсәй 1-Башҡортостан" телеканалында "Хәйерле иртә, Башҡортостан", "Рәсәй-Башҡортостан" радиоканалында "Иғтибар үҙәгендә" тип аталған программаларҙа республика халҡы өсөн көнүҙәк булған сәйәси, иҡтисади, ижтимағи, экологик проблемалар буйынса студияға саҡырылған белгестәр, эксперттар менән фекер алышабыҙ. "Рәсәй 1" һәм "Башҡортостан 24" телеканалында "Сәйәхәтсе һуҡмағында" тип исемләнгән программабыҙ тамашасыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уята, беҙ уларҙы тыуған төйәгебеҙҙең гүзәл тәбиғи һәм тарихи объекттары менән таныштырабыҙ, тәрән һәм киң мәғлүмәт бирәбеҙ. Мәҫәлән, Бөндәбикә кәшәнәһе, Ерәнсә сәсән ерләнгән урын менән бәйле тапшырыу төшөрҙөк, ә бит күп ватандаштарыбыҙ ошо хаҡта мәғлүмәтле түгел. Әйткәндәй, ошо программабыҙ Рәсәй конкурстарында 11 наградаға лайыҡ булды.

Радио, телевидениела ла туған телде белгән белгестәр менән ҡыйынлыҡтар барҙыр?

- Мәктәптәребеҙҙә башҡорт теле уҡытыла, шул уҡ ваҡытта байтаҡ ҡына ғаиләләрҙә үҙ-ара тик русса ғына аралашалар, шул бәкәлгә ныҡ һуға. Шуға башҡорт телен барса нескәлектәрендә үҙләштереп, матур әҙәби телдә яҙа, һөйләй белеүсе журналистарға ҡытлыҡ хәҙер. Уйлап ҡараһаң, журналистың ике телде лә яҡшы белеүе отошло: бер үк теманы русса ғына түгел, үҙебеҙҙең туған телебеҙҙә әллә нисә төрлө итеп тасуирларға, яңынан асырға була. Беҙ Бөйөк Ватан һуғышынан алдараҡ һәм унаң һуң мәктәптәрҙә саф башҡортса белем алып, руссаны ла яҡшы үҙләштереп, иҡтисад, техника, фән, сәнғәт, әҙәбиәт, мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау һ.б. өлкәләрҙә таныллыу тапҡан шәхестәребеҙҙе өлгө итеп алырға тейешбеҙ.

Телебеҙҙе үҫтерергә кәрәк, тиҙәр. Ул былай ҙа иҫ киткес бай бит, уны үҫтереү тураһында түгел, һаҡлау һәм киләсәк быуындарға тапшырыу хаҡында хәстәрлек күреү мөһимерәк. Ә телебеҙҙең киләсәктә лә йәшәренә ныҡлап ышанырға кәрәк, сөнки ул милли моңобоҙ менән ҡуша йәшәй. Минеңсә, һәр башҡорт кешеһе, олоғая килә, тыуған халҡының моңдарын үҙ телендә тыңларға һәм башҡарырға теләйәсәк. Йырҙарыбыҙ йәшәһә, телебеҙ ҙә йәшәйәсәк, был - кире ҡаҡҡыһыҙ аксиома.

Бәҙри ӘХМӘТОВ һөйләште.

✓ Юҡ, балаҡай, беҙ барбыҙ, беҙ ербеҙ, тыуған тупрағыңбыҙ, игелекбеҙ. Күпме йылдар үткәс тә, беҙҙе эҙләп килгәнһең икән, беҙ һинең йәнеңә лә шул рәүешле уйылғанбыҙ. Беҙ йыр ҙа, икмәк тә, беҙ - мәңгелек, беҙ - иман!

МАТУР ХӘТИРӘ

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипова һуңғы йылдарҙа бик үҙенсәлекле "Аҡлы-ҡаралы донъя" тигән хәтернамә циклы яҙа башланы. Тормош юлына һәм ижады биографияһына бәйле был парадоксаль яҙмаларҙың бер өлөшө былтыр "Ағиҙел" журналының 9-сы һанында донъя күрҙе лә инде. Уларҙың үҙенсәлеге шунда: автор үҙенең башланғыс ижад йылдарынан алып бөгөнгәсә үҙ тормошоноң сетерекле ваҡиғаларын, туғандарын, айырым шәхестәрҙе иҫкә ала, теге йәки был әҫәрен яҙыуға сәбәпсе булған тормош ваҡиғаһын бәйән итә. Яҙмаларҙың исемдәрен генә атау ҙа күпкә ишара, әйтәйек: "Яныу", "Урланған "а", "Түңәрәк круг", "Сатан өйрәк балаһы", "Дөйөм мунса", "Талҡаҫ", "Мәсхәрә", "Бай балаһы", "Бүре күҙҙәре", "Тәүәккәллек", "Юлаусылар","Таяныу нөктәһе", "Алма һәм намыҫ", "Поезда", "Депутат","Оятһыҙ ағай", "Ҡайындар иле", "Йәшел бесәй ҡыҙыл ҡойроҡло", "Сатыбаляша", "Шайтан балалары" һ.б.

Ошо циклға ҡараған тағы бер хәтирәһендә яҙыусы бер фото-рәсемгә ҡарап ҡына ошо мәҡәләне яҙған. Шуныһы ғәжәп: фотолағы Фәүзиә инәйгә ҡараһаң, уның йөҙөндә һәр ҡайһыбыҙ үҙенең әсәһен, өләсәһен, ҡартәсәһен, инәһен, апаһын - туғанын таныйҙыр. Мин иң тәүҙә уны ауылдашым Рәйес Түләктең әсәһе Яңылбикә инәйгә оҡшаттым, ә инде мәҡәләне уҡый башлағас, әсәйемдең, өләсәйемдең, ҡартәсәйемдең, атайымдың бер туған апаһы Нурия инәйемдең һәм бик күп инәйҙәремдең сифаттарын таныным. Фәүзиә инәй яҙыусының күп кенә әҫәрҙәренең прототибы ла. Быға инанырға теләһәгеҙ, иң тәүҙә фотоны ентекләп ҡарағыҙ, артабан ошо мәҡәләне уҡып сығығыҙ...

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.



ПРОТОТИП,

йәғни бер фото-рәсем уятҡан уйҙар

Селтәр сәбәпсе булдымы, әллә...

Бик боронғо өйҙәң ишек алды. Ишектә - ҡара камзул кейгән, аҡ күлдәкле, аҡ яулығын яҙып ябынған оло йәштәге инәй һыны. Арыраҡ - ҡыҙ бала. Тотош күкрәген ҡаплап торған селтәр һалынған. Әүәл был фотоны интернет селтәрендә күреп ҡалдым. Бәй, был бит беҙҙең Фәүзиә инәй! Фәүзиә Мөхәмәтҡолова. Эргәһендәге үҫмер ҡыҙ - ейәнсәре Клара. Һикһәнде үткән Клара апай иҫән. Фәүзиә инәйемдең баҡыйлыҡҡа күскәненә алты тиҫтәгә яҡын ғүмер үткән. Ә фото ҡалған, һаҡланған. Был фотоның ғүмерле булыуына ҡыҙ өҫтөндәге селтәр сәбәп булдымы, әллә...

Ул замандағы аҡлы-ҡаралы фотонан камзулдың ысын ҡиммәтен баһалап булмай, әлбиттә. Ә мин бит беләм! Саф көмөш, ысын мәрйендән яһалған был ҡомартҡының инәйгә кемдән ҡалғанын да, инәйҙең уны нисек һаҡлауын да беләм. Белеү генә түгел, "Ҡәҙриә" исемле хикәйәмдең дә яҙылыу тарихына ошо ҡомартҡы-аманаттың сәбәп булғанын да һөйләй алам.

Хәйер, бер хикәйә генәме? Ғөмүмән, бөтә ижадымды байытҡан, уның һиммәтен һәм ҡиммәтен күтәргән аҫыл хаттарҙың нигеҙендә ошо ябай ғына кейемле, ғүмеренең һуңғы йылдарын тома һуҡырайып үткәргән Фәүзиә инәйем сәбәп булғанды һөйләмәү мөмкинме?

Йылғалар тауҙарҙан башланған кеүек, ижад та шул тере шишмә бит, тик ул рухтары менән мәғрүр тауҙарға оҡшаш кешеләрҙән башлана. Тәүге хикәйәм "Ялан сейәһе" егерме дүрт йәшендә тол ҡалған күрше ҡатын Бибинур *(Гөлйыһан)* апайҙан башланһа, артабан "Аҡ тирәк" драмаһында - Гөлниса, "Төштәге йыр"ҙа - Гөлзада, "Бөйрәкәй" пенталогияһында Барсынбикә - Фәүзиә, "Һәйкәл тураһында баллада" ла - Мәстүрә, "Китмәгеҙ, торналар"ҙа Бибизата булып, мөхәббәттәренә, иманға тоғро ҡалып, ҡурпыларын бағып, тоҡомдарын ҡурсып, ил инәһе дәрәжәһенә күтәрелгән бей-бисәләр образында әҫәрҙән-әҫәргә йәшәүҙәрен дауам иттеләр. Ижадымдың башындараҡ яҙған "Күгәрсен йыры" исемле хикәйәмдә дүрт күршем - дүрт инәйем дүрт фәрештә кеүек, ҡыҙ баланың күңеленә ояларға иткән асыу-ярһыуҙан һаҡлай. Төшөмдә улар балаға дүрт күгәрсен ҡиәфәтендә килә. Был әҫәремдә инәйҙәремде үҙ исемдәре менән индергәнмен: Фәүзиә, Хөмәйрә, Сәмиғә, Бибинур. Хикәйәлә ошондай юлдар ҙа бар: "...Байтаҡ йылдар үткәс, күп йылдар уҙғас, диңгеҙ хәтле һыуҙар кискәс, инәйҙәрем оҙатып ҡалған ошо урынға тағы килермен. Үҙҙәрен дә, ғүмер иткән донъяларын да таба алмағас, оло юл менән үргә, зыяратҡа күтәрелермен. Исемдәре уйылған таштарҙың да бер-беренә күрше генә тороуҙарын күрермен дә, аяҡ остарына сүгәләп, былай тип өндәшермен:

- Тегендә үҙегеҙҙе тапмағас, аяғым ошонда тартты. Бәғзеләрегеҙҙең нигеҙе лә юҡ хатта...

- Юҡ, балаҡай, беҙ барбыҙ, беҙ ербеҙ, тыуған тупрағыңбыҙ, игелекбеҙ. Күпме йылдар үткәс тә, беҙҙе эҙләп килгәнһең икән, беҙ һинең йәнеңә лә шул рәүешле уйылғанбыҙ. Беҙ йыр ҙа, икмәк тә, беҙ - мәңгелек, беҙ - иман! - тигән ауаз ишетермен *(1-се том, Китап - 2017).*

Үҫкәндә ни күрһәң, осҡанда - шул, тиҙәр бит. Ирҙәрен, бәғзеләре улдарын яуҙарҙа юғалтып, рухтарын байраҡтай күтәреп йәшәгән ошо инәйҙәрҙән фатиха алып, оло юлға юлланмаһам, ығы-зығылы, ваҡыты менән ыжғыр елдәрен, аҙаштырыр бурандарын йәлләмәгән был тормош ниндәй хәлдәргә төшөрмәҫ ине... Был - шулай. Әммә минең ниәт, ҡулға ҡәләм алырға мәжбүр иткән нәмә - фото. Ул рәсемдә әле телгә алған инәйҙәремдең береһе, башта әйткәнемсә, Фәүзиә Мөхәмәтҡолова.

Минең ҡыҙ фамилиям шулай уҡ Мөхәмәтҡолова. Фәүзиә инәйҙең ире Ниғмәтулла апа *(бабай)* менән атайымдың атаһы бер туғандар. Йәғни Мөхәмәтсафа олатайҙың өс улы була: Ғибаҙулла, Һибәтулла, Ниғмәтулла. Ниғмәтулла апа оҙон буйлы, ерән сәсле ир була. Әсәйем минең ҡыҙғылт сәс көлтәһенә ҡағылған һайын:

- Һы... Ниғмәтулла апаң ҡошап... ерән сәс! Ярар, ерән сәсле кеше сәсән була ул, - тиер ине.

Һылап-һыйпап ир еткереп алдым...

Апаның үҙен күргәнем булманы. Мин иҫ белгәндә юҡ ине инде. Фәүзиә инәй менән күрше йәшәйбеҙ. Тәҙрәләш. Беҙҙең өй ҡарағас, олатайҙан ҡалған. Фәүзиә инәйҙеке лә ҡарағас. Ул олатайҙың атаһы Ҡотлогилденән ҡалған. Уларға күрше нигеҙ - Мөхәмәтҡол олатайҙыҡы, тинеләр. Шуға беҙ барыбыҙ ҙа Мөхәмәтколов инде. Фәүзиә инәй Ниғмәтулла апама еңгә ҡатын булып килгән, тиҙәр ине. Үҙенең дә:

- Мин килгәндә апағыҙға ун ике генә йәш ине. Кис булһа, ҡапҡа башына менә лә ултыра. Ҡурмас ҡыҙҙырып, алдатып, саҡ төшөрөп алып, яныма һалам. Һылап-һыйпап, ир еткереп алдым апағыҙҙы, - тип һөйләгәнен ишеткәнем булды. Һәр хәлдә, Фәүзиә инәй менән Ниғмәтулла апанан Ишмөхәмәт, Ишҡужа исемле улдар, Ишбикә исемле ҡыҙ бала тыуа. Ишҡужа ағайҙы һуғыш ваҡытында ФЗО-ға алалар. Ишбикә апай, өс бала әсәһе булғас, ҡаты сирләп донъя ҡуя. Ишмөхәмәт ағай ҙа шул уҡ үпкә сиренән китә. Ишбикә апайҙың Ғәлиә исемле бик теремек, зирәк аҡыллы ҡыҙы ғүмерен дә шул сир алып китә. Был фажиғәне мин "Ай менән Ҡояш бер генә" тигән тәүге ҙур күләмле повесымда бәйән ҡылғанмын. Ғәлиә миңә үлер алдынан көмөш тәңкәләрҙән яһалған хәситәһен бүләк иткәйне. Ялтырап торған тәңкәләр минең муйында төн сыҡҡансы ҡап-ҡараға әйләнде. Әсәйем уны шундуҡ сисеп алды ла, башҡаса күрһәтмәне. "Һинең тәнеңә көмөш ярамай, күрәһең", - тине. Эйе, ул повесҡа Ишбикә апай ҙа, Ғәлиә лә, Фәүзиә инәй үҙе лә үҙгәрешһеҙ тиерлек килеп ингән. Әйткәндәй, Ишбикә апай мәрхүмәнең ире Сибәғәт еҙнәй ҙә шул уҡ сир менән ауырып үлә. Әсәйемдең: "Инәңә Хоҙай түҙем бирһен, бер йыл эсендә өйөнән дүрт мәйет сыҡты",- тигәне иҫемдә.

Фәүзиә инәй ике етем бала менән ҡалды. Клара - менингит сире мейеһен зарарлаған ҡыҙ бала ине. Төҫкә таҙа, әммә... Айрат - ейәне. Минең йәштәш. Бала сағында аяғын төкөтөп, аҫҡап ҡалған ир бала. Беренсе кластан бергә уҡыныҡ, дәрестәрҙе бергә әҙерләнек, сәхнәлә "Аҡҡоштар"ҙы дуэт йырланыҡ...

Ике зәғиф бала менән яҙмыш ҡосағында ҡалған Фәүзиә инәйҙең тормошо, шөғөлдәре һәр саҡ күҙ алдында барҙы. Инәйҙең иң беренсе күҙгә ташланған характер һыҙаты - ул бер ҡасан да буш ултырманы. Уларҙың кәртә артынан ғына ҙур булмаған йылға аға ине. Шул инешкә төкәтеп тигәндәй, ике соҡор уйылған. Ул соҡорҙа инәйҙең һалабаштары - киндер орлоғо һабаҡтары сереп ята. Инәй уларҙы таш менән батырыбыраҡ та ҡуя. Шулар серегәс, өйөнә ташып ала ла, һыҙыра. Балаҫ һуға торған станогында шул һалабаштарҙан туҡыма һуға. Колхоз тоҡ тегә шуларҙан, арҡан иштерә. Шулар өсөн инәйгә әҙерәк трудодень һуҡтылар шикелле. Йәй көндәре инәй ҡара таңдан емешкә сығып китер ине. Буш ҡайтманы. Сейә, еләк, муйыл, энәлек киптерҙе. Ағас тирмәне бар ине. Шуларҙы тартып, порошок яһай. Йыл әйләнәһенә унан емешле май, талҡан өҙөлмәне. Сирләһәк, күңелгә ятырлыҡ танһыҡ ризығын тотоп, иң элек ул инә ине хәл белергә:

- Ҡыҙыма *(йә улыма)* муйыл әвиндем. Эс киткәнгә ифрат килешә...

✓ *"Булғанына шөкөр итеү... Һәр хәлдә мин инәйемдең бар тип шатланғанын, юҡ тип ҡайғырғанын хәтерләмәйем. Шулай ҙа инәйемдән ҡалған иң ҙур иҫтәлек - уның менән бергә ултырып сәй эсеү, ҡунаҡ булыу.*

Икмәк индерһә, унда мотлаҡ киндер орлоғо ҡушылған була. Тәмле лә, туҡлыҡлы ла.

Айрат менән гел бергә уйнайбыҙ. Уйнағас, асығабыҙ. Инәй бер һыныҡ икмәкте икегә бүлеп бирә лә:

- Ултырып ашағыҙ. Икмәкте аяғөҫтө ашамайҙар, - ти. - Уның бер валсығы һеҙҙән дә, беҙҙән дә оло!

Ултырабыҙ. Икмәк - ҡәҙерле ризыҡ - тәмен оҙағыраҡ татығы килә.

- Аяҡтарығыҙҙы һелкетмәгеҙ ашағанда, - ти инәй. - Шайтан саҡырмағыҙ. Шайтан һеҙ сәйнәгәнде йотоп торор әтеү...

Һелкетеү ҡайҙа! Бөтә инәйҙәр ҙә ингән бер балаға икмәк бирep ултыртып ҡуймай ҙа ул. Әгәр ҙә инде шунда йәшен йәшнәп, күк дөрһөлдәһә, инәй беҙгә:

- Үә лә хәүлә, үә лә ҡеүәтә, илла биллаһи-л-ғәли-ил-ғәҙим, тип ҡултыҡ аҫтын һыпырығыҙ, - ти. - Шайтан, йәшендән ҡасып, ҡултыҡ аҫтығыҙға ултырмаһын.

Инәй йомарт булды

Ҡарт бер өләсәй һәм ике зәғиф етемдән торған ғаиләлә эшләгән, мал тапҡан бер кеше булмаһа ла, Фәүзиә инәйҙе ҡылыҡһырлаған тағы бер һыҙат - уның йомартлығы ине. Беҙгә йыш ҡына Сибайҙан әсәйҙең туғандары килер булды. Кейәүгә киткән апайҙар ҙа йыш ҡына хәл белеп торҙо. Иң өлкән апай алыҫ йәшәне. Икенсе Этҡол ауылы Ирәндек аръяғында, Бөрйән урмандары яғында бит. Бына шунан килә ине улар. Еҙнәмдең атын ауылда танып бөттөләр. Күрше Бибинур апай, әллә ҡайҙан күреп ҡалып, йүгереп килеп ҡапҡаны шар асып ебәрә. Атты туғарыуға Фәүзиә инәй сәйгә саҡыра һала. Элек хәҙерге ише телефон юҡ, ашһыу әҙерләү аңғармаҫтан килеп төшкән ҡунаҡ килгәс кенә башлана. Ә был ваҡытта килгән ҡунаҡ Фәүзиә инәйҙең үләндәр ҡушылған тәмле сәйен емешеләккә ҡушып һемерә, һыуһын ҡандыра. Муса еҙнәм инәйҙең шул ҡунаҡсыллығын һәр ваҡыт күҙенә йәш алып иҫкә төшөрөр булды:

- Фәүзиә ҡәйнәм ашъяулығына кипкән еләк-сейәһен һибеп ебәрә, сөсө икмәген һындырғылап ташлай ҙа "Әйҙә, етешегеҙ, оҙон юл - һыуһап, аңҡап килеп ултыраһығыҙҙыр", - ти. Әйткәндәй, минең теге "Ай менән Ҡояш бер генә" повесымда ла инәй менән сәй эсеү йолаһы һүрәтләнгән. Инәй менән һәр аралашыу ҙа доғаға тиң иҫтәлек булғанлыҡтан, ошо өҙөктө был яҙмама ла күсереп ҡуям.

"Булғанына шөкөр итеү... Һәр хәлдә мин инәйемдең бар тип шатланғанын, юҡ тип ҡайғырғанын хәтерләмәйем. Шулай ҙа инәйемдән ҡалған иң ҙур иҫтәлек - уның менән бергә ултырып сәй эсеү, ҡунаҡ булыу.

Ҡунаҡ булыу тигәс тә, быларҙың табыны милли аштарҙан, ҡабартма, бауырһаҡтан, сейәле, еләкле майҙарҙан һығылып торған икән, тип уйларға ярамай. Эш бында икенсе нәмәлә.

Таҙа итеп йыуылған ҡорама юрғандар уртаһында киндер ашъяулыҡ. Шул ашъяулыҡтың ҡап уртаһында - эре сәскәләр төшөрөлгән ҡара батмус. Ситтәрәк урындыҡ ширлегендә, ҡурай һәм ҡумыҙ тауыштары сығарып гөүләп ултырған еҙ самауыр. Самауыр эргәһендә тышы ҡырылып йыуылған, ҡайһылыр быуаттың ниндәйҙер оҫтаһы тарафынан эшләнгән ағас һөт һауыты. Шул хикмәтле биҙәктәр менән семәрләп ырылған сөм һауытҡа башы ағарып бөткән ағас ҡалаҡ һөйкәтелгән. Батмуста - сынаяҡтар, боронғо ағас бормасала - шәкәр. Икмәк, телемләп киҫелеп, һәр кемдең алдына һалына. Һыйырҙың һауҙырған сағы булһа, әлеңге түңәрәк батмуста бер йомарлам май ҡояш кеүек көлөп ята...

- Бисмилла... - Мәрзиә инәйем (бында ул шул исемдә, автор иҫкәрмәһе) тыйнаҡ тантаналы рәүештә баяғы һөт һауытына һөйәлгән ҡалаҡҡа үрелә. Һәр хәрәкәтендә илаһи тыныслыҡ, тотанаҡлы абруй. Һин үҙең дә ошо тынлыҡтың, ситтәрен йылдар, дәүерҙәр ашап йомрайтҡан тантаналы мәңгелектең бер өлөшөһөң". *(2019 йыл, 2-се том. Әҫәрҙәр. Таңсулпан Ғарипова).*

Эшсәнлек. Йомартлыҡ. Инәйҙең ике сифатын ғына атаным. Ә уның кешенең тән төҙөлөшөн белеүе. Ҡул, аяҡ быуындары сығамы - уға йүгерәбеҙ. Хәҙер генә һыуын йылыта ла, һабын тоттора. Арлы-бирле ыуған кеүек кенә хәрәкәттәр яһауына сыҡҡан быуын урынына ултыра. Мейене лә ҡаҡты. Башты үлсәне, шунан урын еренә ҡуйҙы. Бала тыуырға ваҡыт етһә:

- Инәңә әйтә һал! - Исемләп тороу ҙа юҡ.

Минең Фирҙәүес апай ҙа:

- Мин кендек инәмә оҡшағанмын, шуға сабырмын,- ти торғайны. Ысыны ла шул: апай ауыҙы тулы ҡан булһа ла, төкөрмәне. Шуныһы ла ысындыр: тыуасаҡ бала, тапҡан инәмә түгел, кендегемде ҡырҡҡан инәмә оҡшармын, тип юрай тиҙәр.

Бохара тәрилкәһе

Инәйебеҙ, башта әйткәнемсә, һуҡырайҙы. Бер осор ҡалалағы улы, Ишҡужа ағай, Айратты Темәс интернатына тапшырып, әсәһен һәм Клараны үҙҙәренә Сибайға күсереп алып ҡайтты. Торламанылар. Бер генә ҡышты сыҡтылар унда. Инәй һәм Клара тағы шул иҫке нигеҙҙә йәшәй башланы. Айрат та ҡайтты интернаттан. Һигеҙенсене бөткәс, почта тарата башланы. Мин Түбәгә уҡырға киттем. Тормош һәүетемсә дауам итте. Өйгә ҡунаҡ йыйһаҡ, әүәлгесә Фәүзиә инәйҙән бик боронғо, Бохара яғынан килгән тәрилкәне алып торабыҙ. Шундай затлы монаят тойола ине ул миңә! Бер әйттем әсәйгә:

- Әсәй, Фәүзиә инәй ошо тәрилкәне һораған һайын тоттора ла сығара, ярып ҡуйырҙар тип ҡурҡмаймы икән?

- Әллә... бәлки, ҡурҡалыр ҙа... Тик ул тәрилкә бит Мөхәмәтҡол олатаңдан, йәғни атайыңдың олатаһының олатаһынан ҡалған ҡомартҡы. Уртаҡ ҡомартҡы була инде...

Алғараҡ китеп әйтәйем, ул һарғылт һәм өҫтөнә йәшел япраҡ шәкеле һырылған биҙәкле тәрилкә хәҙер Баймаҡ китапханаһы ойоштorған "Әҙәбиәт музейы"нда һаҡлана. Уны миңә һикһәненсе йылдарҙа бер Күсейгә килгәнемдә Айрат үҙ ҡулы менән тапшырҙы: "Апый, был ҡомартҡы һиндә һаҡланһын", - тине. Айрат минән айлап ҡына кесе булһа ла, миңә һәр саҡ "апый", йәғни "апай" тип өндәште.

Инәйемдең боронғо нигеҙҙә ултырған ҡарый донъяһында бынан башҡа ла минең өсөн ҡыҙыҡлы монаяттар бар ине. Мәҫәлән, һандыҡ. Семәрләп, зауыҡ менән яһалғайны ул. Ә иң ҡыҙығы - биге. Йоҙағын асҡанда унан моңло ғына, сихри ауаз сыға. Инәй уны бик һирәк асты. Фотола Клараға һалынған селтәр, күрәһең, шунда һаҡланды. Ул селтәрҙе һорап килеүселәр ҙә булды. Инәй һатманы. Әсәйемә шул хаҡта әйттем бер.

- Инәйең аҡсаға алдана торған зат түгел, - тине әсәй. Ҡурҡа торған күлдәге лә күптән туҙған. Аты ла булды уның. Аҡтар килеп, күкрәгенә мылтыҡ терәп, атын алырға иткәндәр. Инәйең: "Башта үҙемде атығыҙ", - тигән, йүгәнде ҡулынан ысҡындырмаған. Ҡыҙылдарға ла ат кәрәк булған. Инәйең командирына барған да: "Яңғыҙ әбейҙең яңғыҙ атын алырға хаҡығыҙ юҡ!" - тигән.

- Хәҙер юҡ та аттары...

- Колхозға бирҙе уны. Унан бирле, балаҡай, күпме һыу аҡты. Ат түгел, күпме кеше юҡ хәҙер. Һуғыш алып китте күбеһен. Инәйеңдең өйөнән генә күпме мәйет оҙатылды...

- Инәйем ул хаҡта һөйләмәй ҙә...

- Ныҡ бит ул. Тешләнмә. Барына шөкөр итә белә...

Мин көләмһөрәнем. Беләм бит, әсәйем совет уҡытыусыһы, ә белемде төрлө мәҙрәсәләрҙә алған, дини китаптар уҡыған. Күңеле минең дәһрилекте ҡабул итеп бөтмәй. Шуға ҡыҫтырмай ҡалманым:

- Был донъяла ярлы йәшәгәндәр тегендә *(йәғни үлгәс)* ожмахҡа эләгә ти бит...

Әсәйем тәҙрәгә яҡын килеп Фәүзиә инәйҙең беҙҙең яҡҡа ҡараған тәҙрәләренә баҡты:

- Инәйең, ҡыҙым, ожмахты был донъяла тапҡан кеше. Ожмах уның күңелендә.

- Һы! Ожмахты үлмәйенсә лә табып була икән...

Әсәйем өндәшмәне. Бары:

- Икмәк һалғанмын, хәҙер май бешәм, инәңде сәйгә алып ин, - тип кенә ҡуйҙы.

Һәр эштең башы булған кеүек, аҙағы ла була шул инде. Урта мәктәпте тамамлап, ауылда ике йыл китапханаһы, клуб мөдире булып эшләгәндән һуң, өҫтө бер аҙ бөтәйтеп, уҡырға китергә әҙерләндем. Бер көн иртән Айрат килеп инде:

- Апый, мин бөгөн бесән сабырға өмә яһайым. Килә алаңмы?

- Киләм, әлбиттә. Ә кемдәр була?

- Үҙебеҙҙең класташ малайҙар инде. Әғләм, Зәйнәғи, Ғәлимйән....

- Ярар.

- Ат менән барырбыҙ.

Аңланым. Сабынлығы ауылға яҡын уларҙың. Мин унан саҡ ҡына өҫтәрәк сабам. Айрат - чабан. Ялы юҡ. Һыйыр көтмәйҙәр хәҙер, нарыҡтары бар. Әҙерәк иғәнә кәрәк шул. Мин инде эште тапшырҙым. Ике-өс көндән юлға. Баш ҡалаға!

Август аҙағы булһа ла, үлән ҡатмағайны. Ере һыуһын. Әлбиттә, бесәне лә шәп булмаҫ - күрән. Юҡтан ғәйри инде. Айрат, алғы яңбашы сыҡҡас, ауыр эшкә барымы юҡ. Беҙ, дүрт салғы, сабынлығын ике-өс сәғәттә ҡырып һалдыҡ. Дүртенсе класты бөткәндән алып бесән саба торғас, миндә көс тә, таһыл да етерлек ине. Етмәһә, егеттәр кеүек, тартырға туҡтап, ваҡытты исраф итмәйем. Шуға күрә миңә егеттәрҙең тиҙлегенә түгел, уларға минең тиҙлеккә өлгәшеүе ауырғараҡ төштө буғай. Арбаға тейәлештек. Салғылар өҫтөнә мул итеп йәшел бесән һалып алып, ҡайтырға сыҡтыҡ.

- Һарыҡ һуйып бирep киттем, ҡайтып китмәгеҙ, - ти Айрат. - Өләсәйем шулай ҡушты.

Ысынлап та, тыштағы усаҡта ут һүрелгән, ҡаҙандан бешкән ит еҫе боҫорай. Өйгә үттем. Инәй, ғәҙәтенсә, урындыҡ мөйөшөндә ултыра.

- Ҡыҙым, - тине миңә, ингәнемде әллә ҡайҙан һиҙенеп. - Ошо ашҡа һалманы үҙең баҫып ҡырҡсәлең?

- Ярар. - Мин табаҡҡа үрелдем. - Клара, он ҡайҙа?

- Ҡыҙым, - инәй йәнә өндәште. - Ҡамырҙы... һурпаға баҫаң шикелле һин?

- Эйе. - Күреп тора тиерһең: ысынлап та, мин һалмаға тигән ҡамырҙы бешкән ит һурпаһына баҫам. Йомортҡа ла һытам...

- Беҙҙә йомортҡа юҡ инде ул. Балам, һин ҡамырға бәләкәй суда һал.

- Ярар.

Һалмаға тигән ҡамырға сода һалғаным юҡ ине быға са. Һалдым. Яңы һуйылған йәш бәрән ите булғанғамы, аш ифрат тәмле килеп сыҡты! Содалы һалма ойошманы, еңел һәм тиҙ ҡабарып сыҡты. Инәкәйем дә рәхәтләнеп ашаны. Тәрбиәле ҡулдан бешкән аш уға таныһыҡ ине шул. Минең ҡулдан һуңғы тапҡыр ейгән ризығы булды инде. Мин киттем, әсәйемде ағай Сибайға үҙ янына алды. Атайымдың олатаһынан ҡалған ҡарағас өйҙә ағай башкөллө Айратҡа бирҙе. Айрат өйләнде. Өс ул, ике ҡыҙ үҫтерҙеләр. Айһылыу менән бергә. Фәүзиә инәйебеҙ шул мин киткән ҡышты гүр эйәһе булған. Клара Айрат ҡустыһы менән йәшәне. Уның балаларын ҡарашты. Әле лә минең Илдар ағай һәҙиә ҡылған ҡарағас өйҙә йәшәй...

С глаз долой и из сердца - вон, ти урыҫ мәҡәле. Фәүзиә инәй менән аралашып, күҙ күрешеп йәшәү мөмкинлеге тамамланһа ла, күңел тартылыуы, рухи аралашыу бөтмәне. Улай ғына түгел, яңы һәм бейегерәк баҫҡысҡа күтәрелде. Яҙмамдың башында әйткәнемсә, башта "Ялан сейәһе"нә, "Бал тип үрелгәнем" хикәйәләреңә үҙенең бошона белмәгән шаян, дәртле темпераменты менән ут күршем Бибинур апай Диярова килеп инде, унан инде Фәүзиә инәйем дә көттөрмәне: "Кәзриә", "Аҡ тирәк", "Төштәге йыр", "Китмәгеҙ, торналар!", "Сәскәләр һабаҡта кибә", "Бөйрәкәй"...

Ысын ҡиммәттәрҙең баһаһы

Әҫәрҙәрҙә инәйҙең холҡо, ҡылыҡфиғеле төрлө аспекттарҙа асылды. "Кәзриә"нән башланды был яҙмам. Ахырында тағы шуға әйләнеп ҡайтҡы килде. Бына Кәзриә менән өләсәһе араһындағы әңгәмә: *(Кыҫҡартып бирәм. **Авт.**)*

- Ҡыҙҙар туй күлдәген ғүмергә бары бер генә кейә, ә шуның йәмен, ҡыуанысын йөрәгендә мәңге һаҡлай.

- Өләсәй, ә туй бөткәс, күлдәктәрен ҡайҙа һаҡлай улар?

- Һандыҡта һаҡлайҙар. Ваҡыт ашауҙан, туҙандан, ҡарайыуҙан ҡурҡалар. Туй күлдәге бит, балаҡай, тоғролоҡ, инсафлыҡ билдәһе булып ята. Йәшлек бит ул шундай ҡыҫҡа, уның хаҡында хәтерләтер изге бер ҡомартҡы ла ҡалдырмағас...

- Өләсәй, ә ниңә һинең туй күлдәгең һаҡланмай, әллә бер ҙә йәш булманыңмы?

- Диуана, - тип көләмһөрәне өләсәһе. - Булды минең дә йәш сағым. Еләктәй саҡтарым булды. Тик ул заманда туй күлдәге урынына селтәр-ҡашмау һалындыра торғайнылар. Шул. Алабута икмәге, кесерткән ашы ашаныҡ, әсәйем бүләген - туй кейемемде ризыҡҡа алмашманым. Мин үлһәм, һиңә ҡомартҡы булыр...

Һүҙ әленге фотолағы селтәр хаҡында бара.

Был ҡомартҡының яҙмышы миңә билдәһеҙ. Айрат та, уның хәләл ефете Айһылыу ҙа күптән донъя ҡуйҙылар. Сабый хөкөмөндәге ҡыҙ бала - Клара - олоғайҙы. Фәүзиә инәйебеҙ тәһәрәткә йөрөй алған сағында намаҙын ҡалдырмай уҡыны. Уға эйәреп мин дә намаҙға ойой торғайным. Доға белмәйем. Инәй: "Ата-әсәңә, туғандарыңа һаулыҡ, йорт-илгә бәрәкәт теләп тор!"- ти. Теләйем. Артығы менән үтәйем инәй ҡушҡанды. Клараны Айраттың ҡыҙы менән кейәүе Хафиз ҡарай. Ул Күсей мәсетенең имам-хатибы. "Күктүбәлә - Ҡояш" тигән әҫәремә Хафиз кейәү образы ла инеп китте. Инәйҙән ҡалған рух тулҡын-тулҡын булып ҡағыла, тоноҡлана башлаған хәтирә-иҫтәлектәрҙе уята, намыҫтарға һуғып һиҫкәндерә, донъя ығы-зығыһы күмә башлаған мәңгелек ҡиммәтте - кешелеклелекте - өҫкә сығара. Ысын ҡиммәттәрҙең баһаһын бары тик күңел күҙе күрә икәнен иҫтә тоторға ҡуша...

Таңсулпан ҒАРИПОВА.

✓ *20-40 мең йыл элек зубр был урмандарҙың тулы хоҡуҡлы хужаһы булған. Хайуандар бында һуңғы боҙлоҡ осоронан (яҡынса 100 мең йыл элек) мезолит дәүеренә (16 мең йыл элек) тиклем йәшәгән.*

ИНТЕРНЕТТАН



БАЛАҢА ҠЫСҠЫРМА!

■ Үҫмер балаларға ҡысҡырырға һәм уларҙы түбәнһетергә ярамай, тип иҫкәртә ата-әсәләрҙе психологтар. Ғалимдар раҫлауынса, ҡысҡырыу, әрләү, түбәнһетергә тырышыу үҫмерҙең эмоциональ үҫешенә кире йоғонто яһай, хатта депрессияға килтереүе ихтимал. Ике йыл буйына барған тикшеренеү осоронда белгестәр 976 ғаилә менән аралашҡан. Күп ата-әсәләр балаларына ҡарата ауыр һүҙҙәр ҡулланыуын белдергән. 13-14 йәштәге үҫмерҙәр был осраҡта үҙен мәктәптә агрессив тота башлай, алдаша, һуғыша. Ғалимдар өйҙә балалар менән уларҙың хис-тойғолары тураһында күберәк һөйләшергә һәм уларға ҡысҡырмаҫҡа кәңәш итә.

■ Рәсәй медицина фәндәре академияһы академигы Влаиль Казначеев иҫәпләүенсә, антибиотиктарҙың иркен һатылыуы халыҡтың сәләмәтлеген ҡаҡшата. "Пенициллин һәм антибиотиктар дәүере халыҡтың һаулығын һаҡлап ҡалыуҙа ҙур роль уйнаны, бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы һәм унан һуңғы йылдарҙа стрептоккок һәм пневмоккок бактериялы инфекцияларҙан ҡотҡара ине. Әммә уларҙы күпләп ҡулланыу бактерияларҙың айырыуса ҡурҡыныс варианттарын барлыҡҡа килтерҙе". Академик белдереүенсә, уларҙы пенициллин менән еңеп булмай, хәҙер яңы препараттар эҙләү мөһим.

■ Беҙ ҡолағыбыҙ менән генә түгел, күҙҙәребеҙ менән дә тыңлайбыҙ. Иң ҡыҙығы, кешенең телмәрен аңлауҙа күҙҙәр күпкә мөһимерәк, тип белдерә Солт-Лейк-Ситилағы (АҠШ) Юта университеты белгестәре. Тикшеренеүселәр психолог Гарри Макгурктың илле йыл элек асҡан яңылығын аңлатырға тырышҡан. Психолог ул ваҡытта уҡ әгәр ҙә телевизорҙағы тауыш менән һүрәт тап килмәһә, кеше мәғлүмәтте күҙҙәре аша алғанлығын раҫлай. Әле үткәрелгән һынауҙар ҙа күрһәтеүенсә, кешенең нервылар системаһы мәғлүмәтте визуаль ҡабул итеүгә өҫтөнлөк бирә.

■ Ир-егеттәргә - 40 йәштән һуң, ҡатын-ҡыҙға 30 йәшкә тиклем үҙ сәләмәтлегенә айырыуса иғтибарлы булыу кәрәк. Ғалимдар бер нисә мең ауырыу тарихын анализлаған. Баҡтиһәң, инсульт һәм инфарктҡа 30-ҙы үтмәгән ҡатын-ҡыҙҙар һәм 40-ты үткән ир-егеттәр тиҙерәк бирешә икән. Ғалимдар әйтеүенсә, был ҡағиҙә тап килмәгән осраҡтар була, әлбиттә, шулай ҙа иммунитеттың түбәнәйеүе, тәмәке тартыу, гипертония, шулай уҡ һимереү ауыр сирҙәргә килтерә.

■ Балалар кәйефе насар булғандан түгел, ә рационда шәкәр күп булыуынан да мыжыуы ихтимал. Ғалимдар ошондай һығымта яһаған. Был балаларҙың 40 проценты көн һайын иң кәмендә - бер , ә 4 проценты дүрт порция татлы газлы эсемлек ҡулланған. Әҙ генә күләмдә лә татлы эсемлек ҡулланыу балаларҙың үҙен тотошона йоғонто яһауы билдәләнгән: улар күпкә ярһыуыраҡ һәм иғтибарһыҙыраҡ булып сыҡҡан. Бындай балалар сит кешеләрҙең әйберҙәрен ватҡан, һуғышырға тырышып ҡына торған. Тикшеренеүселәрҙең береһе әйтеүенсә, бала газлы эсемлекте ни тиклем күберәк эсһә, шул тиклем агрессивыраҡ булған. Тап был эсемлек балалар араһында артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусыларҙың күбәйеһә килтерә.

ТӘБИҒӘТ ДОНЪЯҺЫНДА

ЗУБРҘАРҒА...

беҙҙең урмандар оҡшаны



Ошо көндәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Күгәрсен районына эш сәфәре барышында "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркындағы вольер хужалығында ла булып, Белоруссиянан Беловеж урманынан килтерелгән зубрҙарҙы ла күреп китте.

Зубрҙарҙы республикабыҙға ҡайтарыу тарихы 2023 йылдың ғинуарында башланды. Радий Хәбиров Белоруссияға сәфәре ваҡытында үҙенең тарихи тыуған төйәгендә юҡҡа сыҡҡан төрҙөң популяцияһын тергеҙергә тәҡдим итте. Минск был башланғысты ихлас хупланы. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ведомство-ара эшсе төркөм булдырылды. Ғалимдар легендар Беловеж урманында булды һәм ҡырыҫ Урал тәбиғәте Ҡыҙыл китапҡа индерелгән хайуандар өсөн идеаль тигән нығымтаға килде. Рәсәйҙең Тәбиғәт ресурстары һәм экология министрлығы рөхсәте менән 26 майҙа Башҡортостан еренә туғыҙ зубр килтерелде, ә декабрҙә уларға тағы ла туғыҙы ҡушылды.

"Беҙ был проектты шикләнеп кенә башлағайныҡ, ләкин беҙҙең урмандар уларға бик оҡшаны, - тип билдәләне Радий Хәбиров "Башинформ" хәбәрсеһе менән әңгәмәлә. - Ныҡлы мал аҙығы базаһы, йомшаҡ климат, уларға һөжүм итерҙәй йыртҡыстарҙың булмауы идеаль шарттар тыуҙырҙы. Бында, Башҡортостан шихандары янында ете быҙауҙың тыуыуы барыһы ла дөрөҫ барыуын күрһәтә. Проект үҙен икеләтә аҡланы: фәнни эксперимент туристарҙы күпләп йәлеп итеү урынына әүерелде".

Зубрҙар популяцияһын тергеҙеү буйынса был уникаль проект республиканың экологик яуаплылығының ысын символына әүерелде.

Белгестәрҙең хәстәрлеге, төрлө һутлы үләп һәм йомшаҡ континенталь климат - былар барыһы ла зубрҙарға ыңғай йоғонто яһай. Яңыраҡ тағы ла ике быҙау тыуған. Бөгөн Европанан ситтә берҙән-бер ирекле төркөмдә 33 баш зубр бар. Проект "Экологик именлек" федераль милли проекты сиктәрендә бойомға ашырыла. Быйыл Grass һәм RWB компаниялары башланғысы менән Башҡортостанға Беловеж урманынан йәнә алты зубр килтерелде. Киләсәккә пландар ҙур: 2027 йылда Президенттың Тәбиғәт фонды гранты иҫәбенә республикаға тағы ла туғыҙ зубр алып ҡайтырға тейештәр.

Инә зубрҙарҙың береһенә хәрәкәт итеүҙәрен күҙәтеү өсөн радиомаяҡлы муйынсаҡ кейҙергәндәр. Мәғлүмәттәр тәүлек әйләнәһенә килә, ғалимдарға хайуандарҙың һауа торошоноң ҡапыл үҙгәреүенә нисек яраҡлашыуын һәм яңы маршруттарҙы үҙләштереүен аңларға мөмкинлек бирә. Башҡалары иркенлектә йәшәй. Туристар өсөн махсус "Зубр һуҡмағы" маршруты һалынған. Демонстрация вольерындағы зубрҙар кәртәләп алынған ҙур майҙанда йәшәй. Мөһабәт хайуандарҙы һәр кем ике кимәлдәге кәртәләр аша хәүефһеҙ аранан күҙәтергә мөмкин.

Башҡортостан эксперименты уңышының тәрән тарихи нигеҙе бар. Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге етәксеһе Василий Мартыненко һөйләүенсә, 20-40 мең йыл элек зубр был урмандарҙың тулы хоҡуҡлы хужаһы булған. Шүлгәнташ мәмерйәһенең серле "Билдәләр залында" уға һунар итеү төшөрөлгән һүрәттәр әле лә һаҡланған. Хайуандар бында һуңғы боҙлоҡ осоронан (яҡынса 100 мең йыл элек) мезолит дәүеренә (16 мең йыл элек) тиклем йәшәгән, уларҙы тәүтормош һунарсылары ҡырып бөтөргән. Хәҙер ғәҙеллек тергеҙелде: Рәсәйҙең Ҡыҙыл китабына индерелгән төр ышаныслы һаҡлана. "Зубрҙар донъяһында матриархат хакимлыҡ итә, - тип күҙәтеүҙәре менән уртаҡлаша Василий Мартыненко. - Тәжрибәле инә зубр ғаиләне һыу эсергә алып бара һәм иң яҡшы көтөүлектәрҙе һайлай. Ата зубр иһә айырым йәшәүҙе өҫтөн күрә һәм ҡарығыу осоронда ғына көтөүгә ҡушыла".

Рәсәй Фәндәр академияһының Федераль тикшеренеү үҙәге ғалимдары иҫәпләп сығарған: экосистемаға зыян килтермәйенсә, "Мораҙым тарлауығы" паркы 70-75 баш зубрҙы ашата ала. Экологтар әйтеүенсә, хайуандар үҙҙәренең яратҡан аҙығын тап бында тапҡан. Ул - Белоруссияла булмаған, әммә Урал аръяғында күпләп үҫкән бейек ҡылған. Ғәйәт ныҡ көслө булыуҙан тыш, урман үгеҙҙәре бик шәп йөҙә, текә битләүҙәрҙә һәм һаҙлыҡтарҙа бер ауырлыҡһыҙ йөрөй ала.

Рәсәй Экология министрлығының Дәүләт сәйәсәте департаменты директоры урынбаҫары Сергей Белянский төбәктең дөйөм милли эшкә индергән өлөшөн юғары баһаланы. Илдә зубрҙарҙың дөйөм һаны - 3230 баш. Күпселеге Орел, Брянск, Калуга һәм Тула өлкәләрендә йәшәй, әммә зубрҙарҙың берҙән-бер ирекле төркөмө - тап Башҡортостанда.

"Башҡортостанда Беловеж урманынан килтерелгән таҙа ҡанлы зубрҙарҙың башҡорт популяцияһын булдырыу буйынса проект өс йыл тормошҡа ашырыла. Ошо ваҡыт эсендә уларҙың быҙауҙары тыуҙы, был төркөмдөң яҡшы торошо тураһында һөйләй", - тип билдәләне Сергей Белянский.

Башҡортостан Башлығы федераль ведомствоға ярҙам өсөн рәхмәт белдерҙе һәм төбәк проекттарын һирәк төрҙәрҙе һаҡлауҙың берҙәм системаһына берләштереүҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, алда ирекле хайуандар һәм ауыл хужалығы етештереүселәре араһында конфликттарҙы булдырмау өсөн майҙандың сиктәрен билдәләү бурысы тора.

Проект эске туризмды үҫтереүгә ҡеүәтле этәргес бирә. Боронғо урмандарҙың хужаларын күреү өсөн бөтә республиканан киләләр. Республика етәксеһе Туризм министрлығына махсус, шул иҫәптән "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" программаһы сиктәрендә оло быуын вәкилдәре өсөн экскурсиялар әҙерләргә ҡушты. "Көслө ҡырағай хайуан - тәбиғәтебеҙҙең ысын биҙәге. Беҙ мөһим дәүләт повесткаһын ябабыҙ. Был беҙҙең ата-бабалар ере алдындағы әхлаҡи бурысыбыҙ. Беларусь зубрҙарына беҙҙең тәбиғәттең оҡшауы күренеп тора - улар Башҡортостанды үҙ итте", - тип билдәләне Радий Хәбиров "Башинформ" хәбәрсеһе менән әңгәмәлә.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

СЫСҠАНДАН АҢ БУЛЫҒЫҘ



Көҙ етеү менән сысҡандар кеше торлағы тирәһенә күсә башлай. Шуға бәйле белгестәр республика халҡына бөйөр синдромы менән геморрагик биҙгәк йоҡтороуҙы иҫкәртеү сараларын үтәргә кәңәш итә.

Тәү сиратта ихаталарҙа сүп-сарҙы өйөмдәргә һалмайынса йыйып алығыҙ. Туҙан менән бәйле һәр төрлө эштәрҙә, мәҫәлән, иҫке йорт яны ҡаралтыларын һүткәндә, бесән йәки һалам тейәгәндә, ағас материалдар өйөмөн тараҡанда мотлаҡ респиратор йәки дымлы дүрт ҡатлы марля битлеген, шулай уҡ бирсәткәләр һәм һаҡланыу кейемдәрен кейергә кәрәк.

Торлаҡты сысҡандарҙан һаҡлауға айырыуса иғтибар бүлеү мотлаҡ. Вентиляция тишектәренә ваҡ күҙәнәкле рәшәткәләр ҡуйырға, шулай уҡ тоҙаҡтар йәки ағыулы алдатҡыс емдәр ярҙамында дератизация үткәрергә кәңәш ителә. Ағыулы алдатҡыс емдәрҙе балалар һәм йорт хайуандары теймәҫлек урындарға, ҡәтғи инструкция буйынса урынлаштырығыҙ.

Аҙыҡ-түлекте ҡаты, герметик һауытта һаҡларға кәрәк, ә сысҡандар зарарлаған аҙыҡ-түлекте ашарға ярамай. Шулай уҡ сысҡандарға һаҡлағыс бирсәткәләрһеҙ ҡағылырға кәңәш ителмәй.

✓ *Ҡыҙыл йылғаһының исеме лә әлморондоң көҙ көнө ошо йылға буйын ҡыҙартып ултырыуынан алынғанлығы тураһында фараз бар.*

ИРӘНДЕК ҮҪЕМЛЕКТӘРЕ

ӘЛМОРОН,

йәки Ниңә Ҡыҙыл йылғаһына шундай исем ҡушылған?



Әгәр ҙә рауза сәскәле үҫемлектәрҙең бөтәһен дә бер урынға йыйһаң, улар аҡ, һарғылт, ҡыҙғылт, ҡара һәм башҡа бик күп төҫтәрҙән торған күҙҙе ҡамаштырырлыҡ бер шәлкем булыр ине. Рауза сәскәһенең үҙенең генә лә 700 сорты бар, сәскә төҫтәренең сағылышы ла шул тиклем үк. Уларҙың ботаника телендә *Rosa cinnatomia L* тип аталған ябай үҫемлектән - әлморондан (шиповник) таралып китеүе хайран ҡалдыра. Уны халыҡ телендә гөлйемеш, тип тә йөрөтәләр.

Әлморон, әйтерһең, шул матурлыҡты киңерәк майҙанға таратыр өсөн бөтә Европаны, илебеҙҙең төньяҡ райондарын, Көнбайыш һәм Көнсығыш Себерҙе баҫып алған. Ул йылға буйҙарында ла, урмандарҙа ла, ҡыуаҡлыҡтар араһында ла, урман аҡландарында ла, болондарҙа ла, соҡорҙа ла үҫә. Тәү ҡарауға ғына ябай, баҫалҡы үҫемлек ул, ә ысынында иһә әлморон ҡыуағы мөһим үҙенсәлектәргә эйә. Ул төрлө дарыу, витаминдар эшләү, ҡорттарға бал йыйыу өсөн, буяу эшләүгә яраҡлы, шулай уҡ декоратив һәм хатта мелиоратив үҫемлек сифатында ла үҫтерәләр.

Әлморондоң көрәнһыу ҡыҙыл емештәрендә бик ҡиммәтле матдәләр бар. С, Р, В1, В6, К витаминдары, каротин, гликозида, кемферол һәм кверцетин, шәкәр, буяу матдәләре, органик кислоталар - лимон, алма кислоталары, эфир майы, калий тоҙо, тимер, марганец, фосфор, кальций, магний һәм башҡаларға бай ул. Гөлйемештә аскорбин кислотаһы ҡара ҡарағаттағынан - 10, лимондағынан 50 тапҡырға күберәк.

Әлморондо беҙҙә белмәгән кеше юҡ, сөнки ул бөтә райондарҙа ла үҫә. Бигерәк тә таулы райондарҙы үҙ итә. Уны шулай уҡ баҫыу һаҡлағыс һыҙаттарҙа ултыртыу маҡсатҡа ярашлы.

Ҡыҙыл йылғаһының исеме лә әлморондоң көҙ көнө ошо йылға буйын ҡыҙартып ултырыуынан алынғанлығы тураһында фараз бар. Сөнки сентябрь, октябрь, ноябрь айҙарында Ҡыҙыл йылғаһы буйы әлморон емештәре ҡыҙыллығы менән күҙҙең яуын алып тора.

Әлморон үҫемлегенән культуралы декоратив рауза сәскәләренең күп һанлы сорттары барлыҡҡа килгән. Төньяҡ Кавказдағы Кисловодск ҡалаһында "Раузалар үҙәне" бар. Бындағы рауза сәскәһенең сорттары 250-нән ашыу. Данлыҡлы француз хушбуйҙарын, одеколон эшләү өсөн рауза майы ҡулланылыуын күптәр белмәйҙер әле. Был рауза майҙары Болгарияла етештерелә. Бынан бер нисә йыл элек ошо илдә сәйәхәттә булғанда Ҡаҙанлыҡ ҡалаһында рауза майын етештереү технологияһы менән яҡындан танышырға тура килде.

...Тәүге майлы рауза үҫемлектәре Болгарияла бынан 300 йыл элек үҫтерелә башлаған. Киңлеге - 30, буйы 150 километрға һуҙылған Раузалар үҙәне был үҫемлек өсөн ғәжәп уңайлы булып сыға. Хәҙер был үҙән тик ошо культураны үҫтереүгә махсуслаштырылған. Был территорияла урынлашҡан Карлово, Ҡаҙанлыҡ, Калофер ҡалалары һәм башҡа эреле-ваҡлы хужалыҡтарҙағы халыҡ рауза үҫтереү, уны йыйыу һәм эшкәртеү менән мәшғүл. Был ерҙәрҙә йәшәгән халыҡ раузаны йәшел алтын тип атай. Бында хаҡлыҡ бар, 1 кг рауза майы халыҡ-ара валюталар баҙарында 1 кг алтын хаҡына торошло. Донъялағы майлы рауза запасының 80 проценты Болгарияла үҫтерелә. Халыҡ хужалығының был тармағы отошлоларҙан һанала. Рауза сәскәһенең япраҡсаларын сәғәт иртәнге 5-тән 9-ға тиклем генә йыялар. Был ваҡытта сәскә япраҡсаларында хуш еҫле майҙың иң күп тупланған сағы була. Ҡаҙанлыҡ ҡалаһында урынлашҡан рауза үҫемлектәренең ғилми-тикшеренеү институты раузаның яңы сорттарын сығарыу, уны мөмкин тиклем тулыраҡ эшкәртеү ысулдарын эҙләү эше менән мәшғүл. Ошо уҡ ҡалала донъялағы берҙән-бер рауза үҫемлеге музейы эшләй. Болгария буйлап сәйәхәт иткәндә унда булыу бәхете тейҙе. Был тирәлә киң таралған рауза сәскәһе тураһындағы легенданы ла ошо музейҙа һөйләп ишеттерҙеләр.

... Ер йөҙөндә Аллалар, ярым Аллалар һәм уларҙы хеҙмәтләндергән мәжнүндәр йәшәгән дәүерҙә булған был хәл. Үҙенең бик бай йыһазландырылған һарайында һунар Аллаһы Диана көн иткән. Уны хур ҡыҙҙары хеҙмәтләндергән. Был ҡыҙҙарға ир-егеттәр менән аралашыу һәм уларға ғишыҡ тотоу ҡәтғи тыйылған. Ғашиҡ булған һәр бер ҡыҙҙың йөрәген уҫал Диананың тапҡыр уғы тишеп үткән. Был ҡыҙҙарҙың араһында иң һылыуы Розалия исемле булған. Уның мөхәббәте өсөн Аллалар үлемһеҙлек, алтын тауҙар вәғәҙә иткәндәр. Тик Розалия үҙенең мөхәббәтен берәүгә лә белдермәгән.

Бер ваҡыт иртә менән Диана йәшәгән һарайҙың ишеген шаҡыйҙар. Был - иртәнге сәскәләрҙән йыйылған ысыҡ тултырылған көршәк күтәргән көтөүсе егет була. Ошо ысыҡ менән Диана үҙенең күҙҙәрен йыуа торған булған. Егет ишек асыусы ҡыҙға - Розалияға көршәген һона, һәм шул саҡ уларҙың ҡараштары осраша. Шул көндән алып иртәнге ишек шаҡыуға Розалия һәр ваҡыт беренсе булып килеп етә һәм тылсымлы тамсылар тултырылған көршәкте ҡулына ала торған булып китә. Ҡыҙ егеттең күҙ ҡарашында иртәнге ысыҡтай сафлыҡ бөркөлөүен тоя, йәшлек осҡондарын һәм мөхәббәт сатҡыларын һиҙемләй. Көндәрҙең береһендә егет Розалияға осрашыу тәҡдим итә. Билдәләнгән ваҡыт, төн уртаһы килеп еткәс, ғәжәп матур баҡсаның бер мөйөшөндә егет менән ҡыҙ осраша. Мөхәббәт бәхетен татыған бер мәлдә Диананың мәргән уғы ҡыҙҙың йөрәген үтә тишеп сыға. Ҡыҙ, тын алырға ла өлгөрмәй, ергә ауа. Шул ерҙә мөхәббәт Аллаһы үҙенең һулышы менән ҡыҙҙың кәүҙәһен аҡ сәскәгә, ә яранан аҡҡан ҡан урынын ҡыҙыл сәскәгә әүерелдерә. Был сәскәләрҙе ҡыҙ хөрмәтенә "розалия" тип атайҙар. Шул заманда алып ер йөҙөндә ҡыҙҙарҙың саф мөхәббәт билдәһе - аҡ рауза, төрлө сикләүҙәрҙе еңеүсе көслө мөхәббәт билдәһе - ҡыҙыл рауза, әйтелмәгән мөхәббәт билдәһе булған һары рауза сәскәләре йыл һайын яҙ килеү менән сәскә ата.

Әлморондан витаминлы төнәтмә. 2 стакан һыу, 2 ҡалаҡ кипкән емеш һәм 20 г шәкәр ҡомо алына. Емештәрҙе ҡәһүә ваҡлағыста йәки төйгөс менән ваҡлап, ҡайнаған һыуға һалып, 4 - 5 сәғәткә ҡараңғы урынға тондорорға ҡуялар. Һуңынан ике ҡат марля аша һөҙөп, шәкәр ҡомо өҫтәйҙәр. Аш алдынан ярты стаканлап эсергә тәҡдим ителә.

Рауза сәскәһенән ҡайнатма. Ҡайнатма өсөн рауза сәскәләренең таж япраҡсалары алына. Бер стакан япраҡсаларға 1 стакан шәкәр ҡомо кәрәк. Ошо нисбәттә алынған япраҡсалар менән шәкәр ҡомон бутап, төнгөләккә ҡуялар (ярты стакан тирәһе һыу һалырға мөмкин). Барлыҡҡа килгән массаны талғын утта 5 минут тирәһе ҡайнатҡас, һыуыталар. Һыуынған ҡайнатманы тағы ла ҡайнап сыҡҡансы утта тотҡандан һуң, һыуытып, банкаларға тултырып, һаҡларға ҡуялар.

Әлморон япраҡтарынан сәй. Был рецепт П. П. Сумарковтың 1800 йылда сыҡҡан "Источник здравия, или Словарь всех употребительнейших снедей, приправ и напитков..." тигән китабынан килтерелә:

"Ҡырағай әлморон япрағынан йәшел ҡытай сәйенә оҡшаш сәй әҙерләнә. Уны ҡәҙимге сәйҙән айырыуы ҡыйын. Сәй былай әҙерләнә: әлморон ҡыуаҡтарында яҙ көнө беренсе яп раҡтар күренеү менән ботаҡтарынан өҙөп алалар һәм аҡ ҡағыҙға һалып, ус менән өҫтөнән йөрөтәләр. Япраҡтар сәй һымаҡ булып төрөлә. Һуңынан уларҙы күләгәлә киптерәләр һәм туҡыманан тегелгән тоҡсайҙа йәки быяла һауытта һаҡларға ҡуялар. Бындай сәй күкрәкте ныҡыта, ә тәме яғынан ҡытай сәйҙәренән ҡалышмай һәм иң мөһиме - үҙеңә күпләп әҙерләп ҡуйырға була.

Әлморон һәм энәлек емештәрен 1/1 нисбәттә бергә ҡушып, термоста төнәтмә эшләйҙәр. Йөрәк сиренән бына тигән дауа килеп сыға. Сәй урынына эсәләр.

Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,
биология фәндәре докторы, профессор.

ЗИһЕН КИҢӘЙТЕП...



КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

Ялан турғайы

(Полевой (деревенский) воробей)



Ялан турғайын башындағы шоколад төҫөндәге башлығынан танырға була. Арҡаһы ҡарғыҫҡыл һоро, көлһыуыраҡ сикәһендә өтөрҙө хәтерләткән ҡара биҙәге бар. Тамағындағы ҡара төҫтәге табы ҙур түгел. Ҡанаттарында тар ғына аҡ ике һыҙыҡ бар. Ата ҡош менән инә ҡош тышҡы ҡиәфәте менән айырылмай. Йыры - сырҡылдау, әммә ул моңлораҡ, "зев-зев-зев" кеүегерәк ишетелә.

Европаның бөтөн, ә Азияның ҙур ғына өлөшөндә - Британия уртауҙарынан Һинд-Ҡытай ярымутрауҙарына тиклем осрай. Уның таралыуында кешенең дә өлөшө бар, ҡайһы бер ерҙәргә уларҙы кеше үҙе күсереп үрсетә.

Кеше йәшәгән ергә яҡыныраҡ, урман ситендәге ағастарҙың өңөнә, күпер аҫтарына, яр ҡарлуғастары ташлап киткән ерҙәргә, ә инде ауылдарҙа, коллектив баҡсаларҙа төрлө ҡоролмаларға оя ҡора. Ташландыҡ ауылдарҙың урынын ихлас үҙләштерә. Бер ҡоролма ҡыйығы аҫтында 5-6 оя турғай булырға мөмкин. Әммә уларҙы йорт турғайы был урындарҙан ҡыуып ебәреүе лә ихтимал. Өфө фән һәм технологиялар университетының Нуғай ҡасабаһындағы уҡыу базаһы территорияһында ул шифер аҫтына оялай, шулай уҡ электр бағаналары ла уларҙыҡы: бында ҡоролған оя йылы, яҡты, ҡош балаларына ямғырҙан һәм елдән ышыҡ, йорт турғайы юҡ.

Йылына 2 тапҡыр йомортҡа һала, уларҙың һаны ғәҙәттә 5-6. 11-12 көн баҫа, бәпкәләр ояла тағы ла 16 көн тирәһе ултыра. Икенсе тапҡыр баланы июнь айында сығара.

Көҙөн һәм ҡышын ялан турғайы тупҡа йыйылып, юлдарҙа, сүп үләне үҫкән урындарҙа йәшәй, сүп үләндәренең, культура үҫемлектәренең орлоғо менән туҡлана. Ҡышын иһә бер-береһенә дошман икәнлеген онотоп, ялан турғайҙары менән йорт турғайҙары бик татыу итеп бер ихатала йәшәп ала, йорт хайуандары һәм ҡоштарының ризығын уртаҡлаша.

Ялан турғайы игенгә ҙур зыян килтереүе бар. Бәпкәләрен үҫтергән саҡта урман һәм баҡса ҡоротҡостарын ярайһы ғына сүпләй. Ул суҡышын төрлө бөжәк менән тултырмайынса осоп китмәй, һәр япраҡты, ботаҡты, ағас ҡайырыһын ентекләп тикшерә. К.Н. Благосклонова (1950) мәғлүмәттәренә ярашлы, ялан турғайы балаһын сәғәтенә 26 тапҡыр ашата, йәғни тәүлегенә 300 тапҡыр. Тимәк, 15 көн эсендә ул ояһына 4500 тапҡыр осоп килә.

Осҡан саҡта был ҡоштоң йөрәге минутына 1000 тапҡыр тибә, шуға ла улар оҙаҡ оса алмай. Бик зирәк тә, ояһын йырҡыс ҡоштоң ояһының аҫтына ҡороп, уның ҡурсыуы аҫтында ла йәшәй ала.

М. Баянов, Ә. Мәмәтов,
"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.
(Дауамы бар).



21 СЕНТЯБРЯ
ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.30 "Горячий лёд". Фигурное катание. Открытие сезона 2026/2027. [0+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Центурия". [16+]
23.55 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Игра с тенью". [12+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).
12.15 Навигатор истории. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 "Асыш". Дети. [6+]
16.00 "25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ". [12+]
16.45 "Криминальный спектр". [16+]
17.00, 20.15 Квадратные метры. [12+]
17.15 На своей земле. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
18.00 "Ландшафтные эксперименты". [12+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Специальный репортаж. [16+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Күстәнәс. [12+]
0.00 Х/ф "Жемчужная свадьба". [16+]
1.45 Ф. Богданов "Падающая звезда". Спектакль БАТД им. М. Гафури. [12+]
3.45 Специальный репортаж. [12+]
5.00 Новости (на баш. яз.). [12+]

22 СЕНТЯБРЯ
ВТОРНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Центурия". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Игра с тенью". [12+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).
12.15 Навигатор истории. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
16.00 "25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ". [12+]
16.45 Республика LIVE. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
18.00 "Ландшафтные эксперименты". [12+]
19.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Материнство и детство. [12+]
20.30, 3.30 Д/ф "О чем говорят Памятники". [12+]
21.00 Креативный код. [12+]
22.00 Подкаст. Интонации. [12+]
23.00 "Башҡорт йыры-2026". [12+]
23.45 На своей земле. [12+]
0.00 Х/ф "Жемчужная свадьба". [16+]
1.45 Р. Солнцев "Наш одуванчик". Спектакль Туймазинсокго государственного татарского драматического театра. [12+]
5.00 Новости (на баш. яз.). [12+]

23 СЕНТЯБРЯ
СРЕДА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Центурия". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Игра с тенью". [12+]
11.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Дознание. [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Экологично". [6+]
16.00 "25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ". [12+]
16.45 Материнство и детство. [12+]
17.00 "Просто физика". [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
18.00 Дуҫтар. [16+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск). КХЛ.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Байык-2026". [12+]
0.00 Х/ф "Джинн". [16+]
1.45 Ф. Буляков "Коварная любовь". Спектакль Сибайского государственного башкирского драматического театра им. А. Мубарякова. [12+]
3.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.00 Новости (на баш. яз.). [12+]

24 СЕНТЯБРЯ
ЧЕТВЕРГ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.40, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.00 Давай поженимся! [16+]
15.50 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Центурия". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.15, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Доктор Краснов". [16+]
23.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Х/ф "Игра с тенью". [12+]
11.00 Моя планета - Башҡортостан. [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).
11.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Дознание. [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Сулпылар. [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 "25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ". [12+]
16.45 "Криминальный спектр". [16+]
17.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]
17.15, 21.00 Материнство и детство. [12+]
17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
18.00 "Йома". [6+]
19.00 Телецентр.
19.45 "Мама". [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 "Территория героев". Репортаж со слета юных патриотов. [6+]
21.15 Формула здоровья. [12+]
22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Джинн". [16+]
1.45 Р.Кулдавлетов "Бермудский треугольник". Спектакль Стерлитамакского государственного башкирского драматического театра. [12+]
3.15 Специальный репортаж. [12+]
5.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]

25 СЕНТЯБРЯ
ПЯТНИЦА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.25, 18.40 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 14.15 "Время покажет". [16+]
16.15 Давай поженимся! [16+]
17.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон.
23.25 Х/ф Премьера. "Мой Марчелло". [18+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.40, 6.10, 6.40, 7.10, 7.40, 8.10, 8.40 Утро России.
5.06, 5.36, 6.06, 6.36, 7.06, 7.36, 8.06, 8.36 Местное время. Вести-Башҡортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 "Доброе утро, Башҡортостан!" [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башҡортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
0.55 Х/ф "Не твоё дело". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Черная месса". [12+]
11.00 "Йома". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз.).
11.45, 17.45, 21.15, 22.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
12.15 "Криминальный спектр". [16+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
15.30 Гора новостей.
15.45 Тирмәкәй. [6+]
16.00 "25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ". [12+]
16.45 Дознание. [16+]
17.00 Республика LIVE. [12+]
18.00 Башҡорттар. [6+]
19.00 Честно говоря. [12+]
19.45 На своей земле. [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 "Башкорт йыры-2026". [12+]
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
23.00 Дуҫтар. [16+]
23.30 Х/ф "Больше, чем врач". [16+]
1.00 Ш. Рахматуллин "И в шутку, и всерьез". Спектакль НМТ РБ им. М. Карима. [12+]
2.15 Моя планета - Башҡортостан. [12+]
2.45 Специальный репортаж. [12+]
3.00 Колесо времени. [12+]
5.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]

26 СЕНТЯБРЯ
СУББОТА
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Опасные связи". Специальный репортаж. [16+]
11.10 Премьера. "Свой голос". К юбилею Ильдара Абдразакова. [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.20 "Михаил Танич. Не забывай". [16+]
15.50 Т/с Премьера. "Формула преступления". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Музыкальный фестиваль "Голосящий КиВиН-2026". [16+]
0.35 Д/ф Премьера. "Композитор - нерв". К 120-летию со дня рождения Дмитрия Шостаковича. [12+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башҡортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Осенняя мелодия". [16+]
0.40 Х/ф "Южный циклон". [16+]
4.05 Х/ф "Поцелуев мост". [12+]
5.45 Перерыв в вещании.

БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.15 Материнство и детство. [12+]
8.30 На своей земле. [12+]
8.45 Аль-Фатиха. [12+]
9.15 Сәләм представляет... [12+]
9.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 "Городок АЮЯ". [6+]
11.00 "Елкән". [6+]
11.30 Гора новостей.
11.45 "Асыш". [6+]
12.00 Атайсал. [6+]
12.30 Навигатор истории. [12+]
12.45 Ете еget. [12+]
13.30, 4.30 Башҡорттар. [6+]
14.00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Мегасело. [12+]
17.30 Квадратные метры. [12+]
17.45 "25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ". [12+]
18.30 Новости (на баш. яз.).
18.50 Хоккей. "Динамо" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.
21.30 Новости (на рус. яз.).
22.00, 5.45 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 Новости недели (на баш. яз.).
23.30 Караоке по-башкирски. [12+]
0.00 Х/ф "Больше, чем врач". [16+]
1.30 В. Дельмар "Дальше тишина". Спектакль Салаватского государственного башкирского драматического театра. [12+]
4.15 Специальный репортаж. [12+]
5.00 Новости недели (на баш. яз.). [12+]

27 СЕНТЯБРЯ
ВОСКРЕСЕНЬЕ
ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.10 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Будем жить!" [16+]
13.10 "Видели видео?" [0+]
14.15 Т/с "Знахарь". [16+]
16.20 Премьера. Премия "Сделано в России. Экспортер года". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Большая игра". [16+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1

6.05, 2.35 Х/ф "Личные счёты". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50, 1.35 Д/с "Рассказы из русской истории. Владимир Мединский". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башҡортостан.
15.00 "Весёлые ребята". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.00 "Киселёв".
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.18 Перерыв в вещании.


БСТ

7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.15, 19.30 Квадратные метры. [12+]
8.30 Күстәнәс. [12+]
9.15 "Мама". [12+]
9.30 Новости (на рус. яз.).
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 Тирмәкәй. [6+]
11.00 Сулпылар. [6+]
11.30 Гора новостей.
11.45 "Атайсал. Знай наших!". Репортаж. [6+]
12.00 "Ат уйнатып". [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.).
13.15 Все песни о прекрасном. [12+]
14.00 "Дарю песню". Концерт по заявкам телезрителей. [12+]
14.30 Дорога к храму. [6+]
15.00 Честно говоря. [12+]
15.45 Д/ф "Взгляд с высоты. Загадка байкальского рифта". [12+]
16.15 Полезные новости. [12+]
16.30 Креативный код. [12+]
17.00 Республика LIVE. [12+]
17.45 "25 лет БСТ. Ретроспективный показ программ". [12+]
18.45 Преображение. [12+]
19.45 Әлләсе. [12+]
20.30, 5.00 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30 Новости недели (на рус. яз.).
22.15 Концерт Зульфии Кудашевой. [12+]
0.00 Х/ф "Где живет Надежда?" [12+]
3.00 Г. Шафиков "Черный иноходец". Спектакль ГАРДТ РБ. [12+]
4.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
5.30 Дуҫтар. [12+]
6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]

✓ *Йөрәк ашъяулыҡ түгел, һәр кем алдында йәйеп булмай.*
(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

БАШ ЭШЛӘТМӘК

ТЕҘ СҮКМӘЙСӘ, СЕБЕР КИТҺӘМ КИТӘМ, БИРӘСӘГЕМ ТҮГЕЛ УРАЛЫМДЫ!



Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

33-сө һандағы сканворд яуаптары.

Горизонталь буйынса: Ҡолаҡ. Агроном. Ҡағыҙ. Ихата. Асҡар. Крейсер. Камелот. Арҡан. Еңмеш. Әҙибә. Йод. Нәжми. Илле. Оҫол. Ризыҡ. Кавал. Окоп. Окинава. Ареал. Аксаков. Усаҡлыҡ.

Вертикаль буйынса: Кеҫәртке. Исмәғилев. Ләләҫ. Оло. Азат. Какаду. Актер. Ҡороҡ. Йөлөн. Ашҡаяҡ. Ғәйнетдинов. Какао. Ҡумыҙ. Ваҡ. Ара. Нерпа. Рәшә. Аҙым. Рун. Ишкол.

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

БӘЛӘ СЫҒАНАҒЫ БУЛМАҺЫН



Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығынан хәбәр итеүҙәренсә, Баймаҡ районының Калинин ауылында шәхси йортта газ шартлаған. Һөҙөмтәлә ике кеше - 75 йәшлек ир һәм 65 йәшлек ҡатын зыян күргән. Тәндәре бешеп, хәҙер улар Сибай үҙәк ҡала дауаханаһының хирургия бүлегендә дауалана.

Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, газ ҡорамалын файҙаланғанда янғын хәүефһеҙлеге ҡағиҙәләрен боҙоу шартлауға сәбәпсе булған. Янғын һүндереүселәрҙе ваҡиға урынына саҡырмағандар. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы тәфтишсеһе әле ваҡиғаның сәбәптәрен асыҡлай.

Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы көнкүреш газын хәүефһеҙ ҡулланыу ҡағиҙәләрен тайпылышһыҙ үтәргә саҡыра:

- газ ҡорамалдарының төҙөкләгән даими тикшерегеҙ һәм уны ваҡытында техник хеҙмәтләндерегеҙ;
- газ еҫе сыҡҡанда асыҡ ут ҡулланмағыҙ, тәмәке тартмағыҙ һәм электр приборҙарын ҡабыҙмағыҙ;
- газды ябығыҙ, бинаны елләтеү өсөн тәҙрәләрҙе һәм ишектәрҙе асығыҙ;
- хәүефле урындан сығып, 104 телефоны буйынса авария газ хеҙмәтен йәки 112 телефоны буйынса берҙәм ашығыс хеҙмәтте саҡырығыҙ.

Был ябай ҡағиҙәләрҙе үтәү фажиғәле эҙемтәләрҙән ҡотолорға ярҙам итәсәк.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

22 сентябрь "Киске табын" (М.Кәрим, И.Ҡаҙаҡбаев). 16+

24 сентябрь "Бөйрәкәй" (Т. Ғарипова, А. Абушахманов, инсц. А. Ишбулдина), драма. 16+

М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

18 сентябрь "Конёк-Горбунок" (П.Ершов, В.Хрущев), әкиәт. 11:00. 6+

18 сентябрь "Аҡһаҡ" (М. Ғиләзов, Ф. Ғәрипов), драма. 19:00. 12+

19 сентябрь "Седина в бороду или невеста из Имеретии..." (Б. Рацер, В. Константинов, М. Күлбаев), музыкаль комедия. 18:00. 12+

22 сентябрь "Капитанская дочка" (А.Пушкин, И. Сакаев). 19:00.12+

23 сентябрь "Цирк на поляне" (М. Непряхин, О. Мусина), әкиәт. 11:00. 0+

24 сентябрь "Конёк-Горбунок" (П.Ершов, В.Хрущев), әкиәт. 11:00. 6+

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

19 сентябрь "Доктор Айболит һәм уның дуҫтарының мажаралары" (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+

19 сентябрь "О чем поет осень" (В. Щербакова). 14:00. 0+

20 сентябрь "Красная шапочка" (Д. Гараева). 12:00 һәм 15:00. 0+

23 сентябрь "Путешествие в театр кукол". 12:00. 0+

23 сентябрь "Коллекция смеха" (О.Куценко). 19:00. 16+

24 сентябрь "Индийская легенда" (Н.Гусева, С.Потабенко). 19:00. 12+

БР Милли музейы

19 сентябрь "Татарское наследие: от предков к потомкам" автор экскурсияһы. 11:00. 6+

22 сентябрь "Амулеты древности" оҫталыҡ дәресе. 12:00. 0+

23 сентябрь "Семейный мастер-тур: в мире этнографии" экскурсияһы һәм оҫталыҡ дәресе. 15:00. 6+

24 сентябрь "Музей на кончиках пальцев" музейҙың тактиль станциялары буйлап инклюзив экскурсия. 11:00. 0+

24 сентябрь "Сила и честь. Искусство войны" автор экскурсияһы. 16:00 - 17:00. 6+

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

ЙЫЛМАЙҒАНДА 40 МУСКУЛ ХӘРӘКӘТКӘ КИЛӘ

- Кешеләр ғүмерҙәренең ике аҙнаһын сфетофорҙың йәшел уты янғанын көтөп үткәрә.
- Айҙа гольф өсөн өс туп бар.
- Бысраҡ ҡар тиҙерәк ирей.
- Офис өҫтәлендә бактериялар бәҙрәфкә ҡарағанда 400 тапҡырға күберәк.
- 1111111 һанын ошо уҡ һанға ҡабатлаһаң, 1234567654321 яуабы килеп сыға.
- Леонардо да Винчи Мона Лизаның ирендәрен 12 йыл буйына төшөргән.
- Асыҡ күҙҙәр менән сөскөрөү мөмкин түгел.
- Донъяла иң популяр һүҙ - "ОК".
- Алабамала мыйыҡ үҫтерергә ярамай, сөнки мыйыҡтарҙы күреп, сиркәүҙә кешеләрҙең көлөп ебәреүе ихтимал.
- Йылмайғанда 40 мускул хәрәкәткә килә, ә мылтыҡтың көйҙәһенә баҫыу өсөн - 4.
- Күп миллионерҙарҙың ҡатындары һөнәре буйынса уҡытыусы.
- 1 класҡа уҡырға барыусы бала төрлө компанияларҙың 200 логотибын айыра.
- 1932 йылда ҡыш шул тиклем һыуыҡ була, хатта Ниагара шарлауығы тулыһынса туңа.
- Альберт Эйнштейн үҙенең телефон номерын бер нисек тә хәтерендә ҡалдыра алмаған.

✓ *"Батшам, әтәскә ҡарағыҙ әле. Ул хәҙер бик тыныс тота үҙен. Бындайҙар үҙенең дошманын күргәндә ҡаушап төшмәй. Сөнки уның камиллығы ла, көсө лә - уның үҙ-үҙен тотошонда, сабырлығында, дәрәжәһендә..."*

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

ЛАЙЫҠЛЫЛАР БАҺАЛАНДЫ

Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Мәҙәниәт һәм сәнғәтте үҫтереү мәсьәләләре буйынса совет ултырышында тармаҡтың сағыу вәкилдәре бүләкләнде.

Мәҙәниәт эшмәкәрҙәренә маҡтаулы исемдәрҙе Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тапшырҙы. Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының музыкаль-әҙәби лекторийы солисы Азамат Тимеров һәм "Асҡар фильм" студияһы директоры Айнур Асҡаров Салауат Юлаев ордены менән бүләкләнде. Башҡорт дәүләт академия опера һәм балет театры артистары, яңғыҙ партиялар башҡарыусы балет артистары, сәхнә оҫталары Софья Сәйетова һәм Сергей Бикбулатов, шулай уҡ опера йырсыһы, сәхнә оҫтаһы Руслан Хәбибуллин "Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булды. Рәсәй Рәссамдар ижади союзының Башҡортостан төбәк бүлексәһе идараһы ағзалары Камил Буҙыҡаевҡа һәм Вәкил Шәйхетдиновҡа Башҡортостан Республикаһының халыҡ рәссамдары исеме бирелде. BABY Ti исеме менән билдәле эстрада артисы Арыҫлан Тимеровҡа "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы" тигән маҡтаулы исем тапшырылды. Күмертау ҡалаһының Концерт-театр берекмәһе концертмейстеры Фаил Кәримов, Сибай ҡалаһы мәҙәниәт йорто директорының художество бүлеге буйынса директор урынбаҫары Гүзәл Сыңғыҙова, Өфө ҡалаһының Әҙеһәм Иҫкужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбенең думбыра класы буйынса уҡытыусыһы Гөлсәсәк Шәһәргазина "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем алды.

МИЛЛИ КЕЙЕМ - ЗАМАНСА МОДА

Башҡортостанда Милли кейем көнө билдәләнде. Республика Башлығы Указы менән булдырылған байрам йылына ике тапҡыр - апрелдең өсөнсө йомаһында һәм сентябрҙең икенсе йомаһында билдәләнә.



Күп милләтле төбәк халҡы өсөн милли костюм - кейем генә түгел, ә тере тарих. Башҡортостанда күп милләт вәкилдәре йәшәй, уларҙың һәр береһе үҙенсәлекле тегеү, сигеү һәм орнамент традицияларын һаҡлай. Байрам милләт-ара татыулыҡты нығытыуға, ата-бабаларҙың мәҙәни кодын һаҡлауға һәм йәш буында традицияларға һөйөү тәрбиәләүгә йүнәлтелгән.

Был көндө тотош республикала этномәҙәни саралар уҙғарылды. Өфөлә "Ватан" этнопаркы майҙансығында БР Хореография сәнғәте эшмәкәрҙәре союзы "Берҙәмлек бейеүе" флешмобын ойоштороҙо. Унда тотош республиканан 500-ҙән ашыу ҡатнашыусы һәм 50-гә яҡын ижади коллектив ҡатнашты. "Берҙәмлек бейеүе" флешмобы Дәүләкән, Сибай, Салауат, Нефтекама, Учалы, Ҡырмыҫҡалы райондары, шулай уҡ Башҡортостандың башҡа ҡалалары һәм райондары бейеүселәрен берләштерҙе.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, "Ҡатын-ҡыҙ бәхете биләмәһе" проекты, "Һылыуҡай" модель агентлығы һәм урындағы дизайнерҙар ярҙамында "Атайсал. Тыуған яҡ биҙәктәре" тигән исем аҫтында этностилдәге кейем коллекциялары күрһәтелде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәләрендә яҙыуынса, бөгөн милли кейем заманса мода һәм бизнестың бер өлөшө булып тора. Элек дәреслектәрҙә, музейҙарҙа ғына күрергә мөмкин булған орнаменттар һәм биҙәктәр бөгөн эшлекле костюм һәм көндәлек кейем элементтарына әүерелә. "Был матур, үҙенсәлекле, ә хәҙер - модала", - тип билдәләне республика Башлығы.

Этностилдең популярлашыуы еңел сәнәғәт һәм креатив индустриялар үҫешенә көтөлмәгән этәргес бирҙе. Милли биҙәкле аксессуарҙар, кейем-налым халыҡ һәм туристар араһында хуплау тапты, был иһә бәләкәй һәм урта бизнестың иғтибарын йәлеп итте. "Дөрөҫөн әйткәндә, төп маҡсатыбыҙ был түгел ине, әммә беҙ бындай яҡшы "бонус"ҡа бик шатбыҙ", - тине республика етәксеһе.

ҠУРАЙҘА УЙНА ЛА...

Башҡортостанда Ҡурай көнөнә арналған флешмоб булды. Акцияны Башҡортостандың Ҡурайсылар союзы иғлан итте.

Уның сиктәрендә 110 ҡурайсы 110 халыҡ көйөн башҡарырға тейеш ине. "Халҡыбыҙҙа ата-бабаларыбыҙҙан һаҡланып килгән көйҙәр, йырҙар бихисап. Был беҙҙең ҙур мәҙәни байлығыбыҙ. Музыкаль мираҫ ынйыларының 110-ы республика конкурстары положениеһына индерелгән - шул рәүешле профессионал ҡурайсылар араһында уникаль система булдырылған. Күләмле эстафетаны тап ошо 110 көйгә бағышлайбыҙ. Беҙ был көйҙәрҙе уйнап ҡына ҡалмайбыҙ, ә уларҙың матурлығы һәм тәрәнлеге хаҡында һәр кемдең иҫенә төшөрөргә теләйбеҙ", - ти эстафета-флешмобты ойоштороусылар.

Эстафетаны Стәрлетамаҡ ҡурайсыһы Динар Абдуллин башлап ебәрҙе. Һәр ҡатнашыусы исемлек буйынса бер көйҙө уйнай (мәҫәлән, беренсе ҡурайсы "Азамат"ты башҡара) һәм эстафетаны артабан тапшыра. Ҡатнашҡан ҡурайсыларҙың видеояҙмалары интернет селтәрҙәрендә төрлө төркөмдәргә һалып барыласаҡ. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 10 октябрҙә Башҡортостанда Ҡурай көнө билдәләнә.

"ЕҢЕҮ ПОЧТАЛЬОНЫ"

Башҡорт режиссеры 100 миллион һумға фильм төшөргән."Еңеү почтальоны" нәфис фильмы (16+) - Рәсәй, Белоруссия һәм Ҡаҙағстандың уртаҡ проекты. Ябыҡ күрһәтеү Мәскәүҙә һәм Алматыла үтте. Картина 3 сентябрҙән БДБ илдәрендә прокатка сыҡты.

"Еңеү почтальоны" фильмының режиссеры - башҡорт режиссеры Айнур Асҡаров ("Өфөнән һөйөү менән", "Өс таған", "Буран", "Йыл ғаиләһе", "Ярлыҡау"). ТАСС хәбәр итеүенсә, күләмле проекттың бюджеты яҡынса 100 миллион һум тәшкил иткән. Аҡсаның күп өлөшө Ҡаҙағстандан бүленгән, тип уртаҡлашты проекттың генераль продюсеры һәм идея илһамландырыусыһы - Ҡаҙағстандың Кинематографистар лигаһы идараһы рәйесе Айҙар Баталов.

"Еңеү почтальоны" фильмы өҫтөндә эш 2025 йылдың аҙағында башланғайны. Сценарий нигеҙендә - алғы һыҙыҡта батырлыҡ ҡылған 18 йәшлек почтальондың тарихы. Төп ролде Ҡаҙағстан актеры Алихан Нуржауов башҡара. Фильм Белоруссияның Минск ҡалаһы янында төшөрөлә, ҡуйы урмандарҙа һәм һаҙлыҡтарҙа әле лә тарих һулышы һиҙелә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында тап ошо урындарҙа ҡаты алыштар бара, партизан отрядтары ойоштorола. Фильмда өс илдең актерҙары ҡатнаша, шул иҫәптән Юлия Лазовская, Василий Копейкин һәм Константин Адаев.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

ҮЛӘ АШАҒАНСЫ...

бүлә аша

Йөрәк ашъяулыҡ түгел, һәр кем алдында йәйеп булмай.

(Башҡорт халыҡ мәҡәле).

Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡытайҙың бер батшаһы әтәс һуғыштырыу тамашалары ойоштороpға яратҡан. Бының өсөн уның хеҙмәтселәре илдәге иң көслө һәм иң матур әтәстәрҙе һайлап килтерер булған. Бындай тамашалар батшалыҡта көн дә тиерлек булып торған һәм оло байрамға әйләнгән. Бер ваҡыт батшаға эре тоҡомло, сағыу, матур ҡаурыйлы, ҡанаттары һәм аяҡтары көслө бер әтәс бүләк итәләр. Батша уны ҡыуанып ҡабул итә һәм: "Был әтәскә тиңләшерлек башҡа әтәс булмаясаҡ! Ул барыһын да еңергә тейеш. Синцзыны саҡырығыҙ, ул әҙерләһен әтәсте алышҡа", - тип бойороҡ бирә. Синцзыны батшаға алып киләләр. Үҙенә йөкмәтелгән бурысты тыңлағас, Синцзы әтәсте ентекләп ҡарай һәм уны алышҡа яраҡлы тип таба ла күнектерә башлай. Ун көн үткәс, Синцзыны батша үҙ янына саҡырта: "Ун көн үтте. Был ваҡыт эсендә һин әтәсте әтәстәр ярышына әҙерләп бөтөргә тейеш инең. Был донъялағы иң шәп әтәс һәм һуғышта уға тиңләшеүсе булырға тейеш түгел! Шулай итеп, әтәс әҙерме?" - тип, батша тәкәббер ҡарашын күнектереүсегә йүнәлтә. "Юҡ, әҙер түгел, - ти Синцзы.- Әтәс артығы менән үҙүҙенә ышаныусан һәм һауалы. Тәкәбберлеге күкрәгенә һыймай. Шуға ла уны майҙанға сығарырға иртәрәк әле..." "Һин быларҙы ҡайҙан беләһең?" - тип аптырай батша. "Батшам... - тип йылмая Синцзы. - Әтәскә ҡарағыҙ әле. Ул алыштағы һөҙөмтәләре тураһында бөтөнләй уйламаған, ә үҙ-үҙе менән һоҡланған кеше һымаҡ тота үҙен. Ул шул тиклем маһайған, уны теләһә ниндәй башҡа әтәс еңә аласаҡ..." Батша әтәсенә аптырап ҡарап тора ла, күнектереүсе менән килешә.

Тағы ун көн үтеп китә. Батша үҙенең баяғы әтәсен танылған бер хакимдың әтәсе менән һуғыштырырға теләп, түҙемһеҙләнеп, Синцзыны саҡыра: "Байтаҡ ваҡыт үтте бит, минең әтәсем алышҡа әҙерҙер, моғайын?" - тип һораулы ҡарашын күнектереүсегә төбәй. "Юҡ, батшам, ул әҙер түгел. Әтәстә әле сыҙамлыҡ һәм түҙемлек юҡ, ул әле теләһә ниндәй күләгә артынан ташлана, теләһә ниндәй тауышҡа яуап бирә. Ашығыусанлығы һәм түҙемһеҙлеге арҡаһында ул алышта еңеләсәк", - ти Синцзы. Батша бер ни тип тә яуап бирмәй һәм уйға ҡала. Ун көндән һуң тамам түҙемлеге шартлаған батша Синцзыны килеп етергә бойора. Синцзы алдына килеп баҫҡас, асыуын көскә тыйып, әтәстең алышҡа әҙер булыу-булмауы тураһында һорауын бирә. "Юҡ, батшам, тағы көтөргә кәрәк, - ти Синцзы. - Әтәскә әле башҡалар менән алышҡа сығырға иртәрәк. Ул асыулы, агрессив, уның ҡарашы - нәфрәт, тәне көс менән тулы. Ундайҙар алыштар мәлендә бары тик имгәнеүгә генә дусар була".

Ошонан һуң тағы ун көн үтә. Батша өндәшмәй генә Синцзының үҙе килгәнен көтә. Ун беренсе көндөң кисендә Синцзы батша эргәһенә килә һәм әтәстең алышҡа әҙер булыуы тураһында хәбәр итә. "Ә һин уның әҙер булыуын нисек билдәләнең?" - тип һорай батша. "Батшам, әтәскә ҡарағыҙ әле. Ул хәҙер бик тыныс тота үҙен. Уның көсө тышҡа бәреп сыҡмай, ә ҡысылған пружина кеүек эстә туплана. Бындайҙар үҙенең дошманын күргәндә ҡаушап төшмәй. Уның менән алышҡа сығырға бер әтәс тә батырсылыҡ итмәйәсәк, сыҡҡанда ла, әйләнеп ҡасып китәсәк. Сөнки уның камиллығы ла, көсө лә - уның үҙ-үҙен тотошонда, сабырлығында, дәрәжәһендә..."

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Башҡортостан Республикаһы Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Башҡортостан Республикаһы буйынса Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығында теркәлде: **ПИ №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.**

Баш мөхәррир: Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.

Мөхәрририәт: Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17.09.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 17.09.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 18.09.2026 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2487
Заказ - 1653